ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-2 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай) 2016

№48 (726)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туған телдә уҡытыуҙы...**

бер кем дә тыймай ҙаһа!



5

**Сәсәнлек - эпос йәки ҡобайыр һөйләүсе генә түгел,**



сәсәнлек - ул булмыш, ул - халыҡтың теле 8-9,11

**Һәр халыҡтың моңо...**

Йыһандан төшөрөлгән йәшерен мәғлүмәт



10

**Тере ҡалһам, намаҙ уҡыр инем...**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Иғтибар! 1 декабрҙән 11 декабргә тиклем арзан хаҡҡа 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо арауыҡта ДО665 индекслы гәзитебеҙгә - 409 һум 26 тингә, ДО673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 439 һум 26 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I һәм II төркөм инвалидтары 369 һум 42 тингә яҙыла ала.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 1917 йылдың 29 ноябрендә Рәсәй дәүләтенең федератив өлөшө булараҡ Башҡортостан милли-территориаль автономияһы барлыҡҡа килгән. Был хаҡта ниҙәр беләһегеҙ?



Ырымбур. Ҡаруанһарай.

***Салауат АҠДӘҮЛӘТОВ, Ырымбур өлкәһенең "Каруанһарай" гәзите мөхәррире:*** Үҙгәртеп ҡороу йылдары һәм Башҡортостан суверенитеты өсөн хәрәкәт осоронда Рәсәй дәүләтенең федератив өлөшө булараҡ Башҡортостан милли-территориаль автономияһы иғлан ителгән 29 ноябрь киң билдәләнә ине. Был көн хаҡлы рәүештә республиканың иҫтәлекле даталар календарына ла индерелде, ләкин һуңғы йылдарҙа йәмәғәтселек был көндө билдәләп үтеүҙе "онотто". Совет осоронда өйрәнелгәнсә, Рәсәй Эшсе-Крәҫтиәндәр хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте араһында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылған 1919 йылдың 20 мартына күберәк иғтибар йүнәлтелде. Бер яҡтан, быны үҙ логикаһы булһа ла, Рәсәй составындағы тәүге үҙаллы республика булараҡ, Башҡортостандың тарихи документтарға нигеҙләнгән ысын тыуған көнөн һанлап еткермәү бик үк яҡшы түгел, әлбиттә. Илдәге тәүге республиканың тыуған көнө һуңғы тапҡыр 2007 йылдың 29-30 ноябрендә "Башҡорт автономияһы иғлан итеүлеү менән бәйле Рәсәй федерализмы нигеҙҙәре" Бөтөн Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы менән билдәләнгәйне. Ул Өфөлә асылып, Ырымбурҙа дауам итте. Был сараның төп маҡсаты Башҡорт автономияһы иғлан итеүҙең тарихи һәм сәйәси әһәмиәтен асып биреү, шул уҡ ваҡытта Рәсәй федерализмы үҫешенең актуаль мәсьәләләрен, уның тарихи-хоҡуҡ аспекттарын яҡтыртыуға арналғайны. Билдәле булыуынса, 1917 йылдың декабрендә Каруанһарай бинаһында булып үткән Бөтөн башҡорт ойоштороу ҡоролтайы Башҡорт мәркәз шураһы иғлан иткән Башҡортостан автономияһы тураһындағы Фарманды раҫлай. Әлеге фәнни-ғәмәли конференция барған көндәрҙә Каруанһарай бинаһына ошо хаҡта иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылды.

Милли автономия менән бәйле артабанғы хәлдәр барыбыҙға ла тарихтан яҡшы билдәле, мәҫәлән, 1918 йылдың ғәйәт ҡатмарлы шарттарында колчаксылар яғынан автономияға янаған хәүеф арҡаһында Башҡорт хөкүмәте һәм хәрби ғәскәренең ҡыҙылдар яғына сығыу фактын иҫкә төшөрөп үтәйек. 1919 йылдың 20 мартында Мәскәүҙә ошо хаҡта Рәсәй Эшсе-крәҫтиән Хөкүмәте менән Башҡорт хөкүмәте араһында Килешеүгә ҡул ҡуйыла. Тап быны ошо факт бөгөн, Башҡортостан, йәнәһе лә, автономияны большевиктар ҡулынан алған, тип уйларға сәбәп булып тора. Ләкин тарихи документтар икенсене раҫлай. Шуға ла Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығы хаҡында һүҙ барғанда автономияның иң тәүҙә башҡорт милли хәрәкәте башланғысы булыуын һәм улар фиҙаҡәрлеге менән рәсми датанан күпкә алдараҡ барлыҡҡа килеүен онотмайыҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

БАШ ҠАЛАМ

# ӘСӘ БУЛЫРҒА ЙЫЙЫНЫУСЫЛАРҒА...

**Өфөлә яңы республика перинаталь үҙәге асылып та өлгөрмәне, унда иң беренсе сабый - ҡыҙ бала донъяға килде. Был ваҡиға айҡанлы Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов баш табип Фирғәт Байрамғолов аша өсөнсөгә әсә булған Ләйсән Вәлинуроваға сәскә гөлләмәһе һәм иҫтәлекле бүләк тапшырҙы.**

Перинаталь үҙәк 2003 йылдан башлап эшләһә лә, бала табыу мәле еткәс, ҡатын-ҡыҙҙар икенсе клиникаларға ебәрелгән булған. Хәҙер инде бындай ихтыяж юҡ, тимәк, был үҙәктең асылыуы буласаҡ әсәйҙәр өсөн генә түгел, медицина персоналы өсөн дә көтөп алынған ваҡиға. Заманса үҙәк 2014 йылда төҙөлә башлай һәм ошо ваҡыт эсендә Республика Башлығының иғтибар үҙәгендә тора. Яңы үҙәк 130 пациентҡа иҫәпләнгән һәм иң заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған.




12+

✓ *Милләттең тауышын ишеттереү өсөн юғары власть органдарында үҙ вәкилдәребеҙ булыуы шарт. Ләкин хатта башлыса башҡорттар йәшәгән райондарҙан да депутатлыҡҡа башҡа милләт кешеләрен күтәреү күренеше бар.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТЕЛЕБЕҘҘЕ...
## үҙебеҙ "ҡырҡабыҙ" бит

***Нурислам ҠАЛМАНТАЕВ, БДУ-ның Башҡортостан Республикаһы тарихы, археология һәм этнология кафедраһы доценты:*** Демократия принциптарына ҡоролған дәүләттә йәшәйбеҙ һәм һәр мәсьәләне халыҡ тауышы, халыҡ фекере хәл итергә тейеш. Һәр хәлдә, ил кимәлендә аҙ һанлы милләттәрҙең, өлкәләрҙең тауышын ишеттереү өсөн юғары власть органдарында ла, депутаттар араһында ла үҙ вәкилдәребеҙ булыуы шарт. Ләкин хатта башлыса башҡорттар йәшәгән райондарҙан да депутатлыҡҡа башҡа милләт кешеләрен күтәреү күренеше бар. Ҡайһы бер милләттәштәр "Урыҫ был мәсьәләләрҙе яҡшыраҡ хәл итә ул", тип ебәрә. Ауылдарҙа ла, башҡа милләт кешеһе депутат булһа, күпкә яҡшыраҡ, тигән хаталы фекер йөрөтөүселәр бар. Аҡыллы, үҙ халҡына файҙа килтерерҙәй, алдынғы ҡарашлы башҡорттар ҙа күп бит ул. Йәштәребеҙ араһында ла күптәр улар. Ниңә уларҙы күтәрмәләп тормайбыҙ һуң?

Әлбиттә, йәштәргә тәү сиратта сәйәси йәһәттән белемле булырға, үҙҙәрен кеше араһында яҡшы яҡтан таныторға ла кәрәк. Хәҙерге заманда кешенең белем даирәһе киң булырға тейеш, бер нисә юғары уҡыу йортон тамамлаһа ла ҡамасау итмәҫ. Һәр ваҡыт уҡып, яңынан-яңы эштәргә өйрәнеп, һәр урында иң юғары баһаланған хеҙмәткәр булыу мөһим. Быны өсөн ғаиләлә балаларҙы бәләкәйҙән рухлы, эшһөйәр, ҡыҙыҡһыныусан, маҡсатлы итеп тәрбиәләү мотлаҡ. Рухи тәрбиә етерлек бирелмәһә, был йәш кеше өлгәшкән уңыштарҙың үҙ халҡыбыҙға файҙаһы теймәүе лә бар бит. Йыш ҡына тап бына ошо сифат етмәй йәштәргә. Рухи тәрбиә тәү сиратта балаға туған тел аша бирелә шул. Был йәһәттән күңелдә шом да бар: заман модаһына эйәреп, шул тиклем үҙ тамырҙарын оноторға ризалашыусылар күп. Башҡорттар йәшәгән төрлө төбәктәрҙә булырға тура килә, милләттәштәр менән осрашҡанда улар араһында туған телдәрен бөтөнләй белмәгәндәрҙе күреп аптырайһың. Туған телен өйрәнергә, шул телдә белем алырға теләгән һәр кемдең быны Рәсәйҙең бөтә төбәктәрендә лә талап итергә законлы хоҡуғы бар. Нисек инде, ата-әсә үҙе теләп балаһына туған телен өйрәтеүҙән, рухи тәрбиә биреүҙән баш тарта? Р. Бикбаев әйтмешләй, элек халҡымдың телен карателдәр ҡырҡһа, хәҙер үҙебеҙ "ҡырҡабыҙ". Уйлап ҡараһаң, ваҡыт тиҙ генә үтә лә китә, ун-егерме йыл да күҙ асып йомғансы үтеп китер, туған телен бөтөнләй белмәгән быуын да үҫеп буй еткерер. Ул саҡта туған тел мәсьәләһен күтәргән, үҙебеҙҙең рухиәтебеҙҙе ҡайғыртҡан, халыҡ мәнфәғәттәрен уйлаған башҡорт та ҡалмауы ихтимал. Шуға күрә, барыһын да үҙ ваҡытында эшләргә кәрәк: әле мөмкинлек булғанда, үҙ милләтеңдәге кешеләрҙе хупла, балаларҙы рухлы һәм оҫҡор итеп үҫтер, туған телгә ҡағылышлы мәсьәләләрҙе ғаиләңдә лә, үҙең йәшәгән мөхиттә лә хәл ит һ.б. Башҡорттоң "Терһәкте тешләп булмай", тигән мәҡәле бар, шул хәлгә ҡалмайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *1917 йылдың 29 ноябрендә Рәсәй дәүләтенең федератив өлөшө булараҡ Башҡортостан милли-территориаль автономияһы барлыҡҡа килгән. Был хаҡта ниҙәр беләһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәйсә ИБРАҺИМОВА, китапхана хеҙмәткәре:*** Һеҙҙең был һорау минең өсөн көтөлмәгән булманы, сөнки тап ошо көндәрҙә мин Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабын тағы бер ҡат уҡырға тотонғайным. Ил Президенты В.Путиндың "Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеү тураһында" Указы баҫылып сыҡҡас, китапханаларға ошо йүнәлештә эш башлап ебәреү буйынса аныҡ бурыстар ҡуйылды. Мин, мәҫәлән, киләһе йылдың мартына тиклем Башҡортостан автономияһын ойоштороусы башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәрҙәре хаҡында стенд һәм әҙәбиәт күргәҙмәһе әҙерләргә тейешмен. Шуға ла был турала ентекле мәғлүмәткә эйә булыу һәм Зәки Вәлидиҙең арҡаҙаштары хаҡында күберәк белеү маҡсатында "Хәтирәләр"ҙе ҡайтанан ҡарап сығырға кәрәк булды. Автономия идеяһы еңел генә бирелмәй, ул киҫкен көрәш шарттарында бара. "Киске Өфө" гәзитендәге (№ 12, 2009 йыл) сығышында профессор Марат Ҡолшәрипов: "Байтаҡ йылдар буйына Башҡортостан автономиялы республикаһы 1919 йылдың мартында Совет хөкүмәте ҡарары менән ойошторолған, был большевиктарҙың милләттәргә ҡарата "шәфҡәтле сәйәсәте", тип тәкрарланып килде", - тип яҙҙы был турала. Артабан ул былай тип дауам итә: "Бында Үҙәк совет власы менән Башҡортостан хөкүмәте араһындағы тарихи Килешеү күҙ уңында тотола. Улай булғас, Башҡортостан хөкүмәте ҡайҙан килеп сыҡҡан һуң? Уны совет власы төҙөмәгән бит? 1917 йылдың 11 ноябрендә I Башҡорт ҡоролтайында ойошторолған Башҡорт мәркәз шураһы үҙенең тарихҡа ингән "Беренсе һанлы фарман"ында Башҡортостан мөхтәриәтен Советтар ҡулынан алмаясаҡбыҙ, халҡыбыҙҙың хоҡуҡ һәм ихтыярын үҙ ҡулыбыҙ менән сикләргә риза булмаясаҡбыҙ, тигән ҡәтғи ҡараш белдерә. Атаман Дутов ғәскәрҙәре Ырымбурҙы алыу менән яңы хисап буйынса 29 ноябрҙә "Икенсе һанлы фарман"да Ырымбур, Пермь, Өфө һәм Һамар губерналары сиктәрендә Башҡортостан ерле мөхтәриәте иғлан ителә".

"Һуңыраҡ, Советтар менән фарман төҙөгәндән һуң Ленин үҙе минән был фарман хаҡында һораны, - тип яҙа "Хәтирәләр"ендә Зәки Вәлиди. - Эйе, фарманды мин яҙҙым, ул халҡыбыҙҙың шул замандағы милли хакимиәтен аңлатыуы ине... Рәсәйҙә анархизм хөкөм һөрөү сәбәпле, Башҡортостандың мөхтәриәтен иғлан итеү кәрәк булды... Һәм ысынлап та, был фарманды иғлан иткәндән һуң дүрт көн үткәс, Башҡортостандың мөхтәриәтен рәсми рәүештә иғлан итеп, милли хөкүмәт төҙөнөк..."

***Ринат ШӘЙБӘКОВ, Белорет районы Йөйәк мәктәбенең тарих уҡытыусыһы:*** Ил Президенты Указы менән 2019 йылда Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Тик тарихтан белеүебеҙсә, автономияға юл байтаҡ алда башлана. 1917 йылдың Февраль революцияһы Рәсәй халыҡтарында милли мәсьәләләрҙе хәл итеп булыр тигән ҙур өмөт уята. Башҡорт халҡы ла милли-территориаль үҙбилдәләнешкә йүнәлеш ала. Беренсе Бөтөн башҡорт ҡоролтайы 20-27 июлдә Ырымбур ҡалаһында үтә. Унда юғары милли власть органы итеп Башҡорт мәркәз шураһы һайлана, ер һәм башҡа көнүҙәк мәсьәләләр ҡарала. Бер айҙан һуң Өфөлә йыйылған Икенсе Бөтөн башҡорт ҡоролтайы Дөйөм Рәсәй ойоштороу йыйылышына делегаттар һайлау мәсьәләһен ҡарай, Ойоштороу йыйылышы асылмаҫ элек Башҡортостан автономияһын иғлан итеп, уны шул йыйылышта танытырға йыйына. Ләкин был арала Рәсәйҙә большевиктар тарафынан социалистик революцияға юл алына, 1917 йылдың 25 октябрендә власть улар ҡулына күсә. Совет хөкүмәте "Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡтары хаҡында декларация" ҡабул итә (1917 йыл 2 ноябрь). Рәсәй халыҡтарының үҙбилдәләнешкә хоҡуғын таный яңы власть. Шуға таянып, Башҡорт мәркәз шураһы 15 ноябрь төрлө губерналарҙағы бөтә башҡорт ерҙәрен Рәсәй республикаһының автономиялы өлөшө тип иғлан итә. Тимәк, киләһе йылда ошо датаның 100 йыллығы буласаҡ. Был да ҙур ваҡиға ул. 2019 йылда билдәләнәсәк оло юбилей саралары киләһе йылда уҡ ошо датаны ла киң билдәләүҙән башланырға һәм Совет власы тарафынан рәсми танылыуға 100 йыл тулыу көнө булып торған 2019 йылдың 23 мартына тиклем дауам итергә тейеш, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**


ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Ноябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 2 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..."**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.




● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**


## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин пенсионерҙарға биш мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһындағы федераль законға ҡул ҡуйҙы. Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, аҡса 2017 йылдың ғинуар айында түләнә. Түләү пенсия эшендә булған документтар нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Уны алыу өсөн Пенсия фондына мөрәжәғәт итергә йәки ғариза яҙырға кәрәкмәй.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитовтың моноҡалаларҙа тиҙ социаль-иҡтисади үҫешеүсе биләмәләрҙең резиденттарына ҡарата критерийҙарҙы ике тапҡырға кәметеү тураһындағы башланғысы Рәсәй Хөкүмәте ҡарары проекты статусын алды. Төҙәтмәләр капитал һалыуҙарҙың кәрәкле минималь күләмен 5 миллион һумдан 2,5 миллионға тиклем ҡыҫҡартыуға, шулай уҡ инвестиция проекты сиктәрендә булдырылған яңы даими эш урындары һанын 20-нән 10-ға тиклем кәметеүгә ҡайтып ҡала.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының 30 ноябрҙә үтәсәк пленар ултырышында республика Башлығының Мөрәжәғәтнамәһен тыңланасаҡ. Депутаттар шулай уҡ 40-тан ашыу закон проектын ҡараясаҡ. Закон проекттарының бер өлөшө федераль ҡануниәттең үҙгәреүенә бәйле әҙерләнгән. Мәҫәлән, 2017 йылдың 1 ғинуарынан етештереү, социаль һәм фәнни, халыҡҡа көнкүреш хеҙмәттәре күрһәтеү өлкәләрендә эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге төрҙәрен билдәләгәндә Рәсәй төбәктәренә яңы исемлеккә таянырға кәрәк. Был үҙгәрештәр төбәк ҡануниәтенә индерелә.

✓Башҡортостандың баш дәүләт автоинспекторы үлемесле юл-транспорт ваҡиғаларының өс сәбәбен атаны. "Төп сәбәп - тиҙлекте арттырыу. Икенсе урында - юлдың ҡаршы яҡ һыҙатына сығыу. Өсөнсөлә - иҫерек килеш автомобиль менән идара итеү", - тип хәбәр итте Динар Ғилметдинов журналистар менән осрашыуҙа. Быйыл 10 айҙа Башҡортостанда 3761 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, 432 кеше һәләк булған һәм 4835-е төрлө йәрәхәттәр алған. Иҫерек водителдәр арҡаһында 359 авария булған, уларҙа 61 кешенең ғүмере өҙөлгән һәм 493-ө йәрәхәтләнгән. Ошо осорҙа юлдарҙа 12 бала һәләк булған, 411-е йәрәхәттәр алған.

✓ ***Мин "Әйҙәгеҙ, аҡса эшләйек!" тигән рубрикалағы сығыштарҙы көтөп алам. Хатта ки, уларҙы төрлөләндереп, аҡса эшләүҙә шаҡ ҡатырғыс, ғәҙәти булмаған уңышҡа өлгәшкән замандаштар тураһында күберәк яҙһағыҙ ине.***



*БЫЛ АЙҘА...*

# АҠЪЮЛАЙ НИҘӘР ЮРАЙ?

**Йылды тамамлап ҡуйыу бурысы йөкмәтелгән аҡъюлайға. Йыл - үҙе бер ҙур оркестрға оҡшаш. Ғинуарҙан алып, бөгөнгө көнгә тиклем ул төрлө ҡылдарҙа уйнаны: күберәген - беҙҙең, ябай халыҡтың нервыларында. Ялҡытҡыс рашҡыларҙан йонсоған минор ноталар ҙа, өтөп алып барған ҡыҙыулылығы менән иҫтә ҡалырлыҡ мажорҙары ла байтаҡ булды йылдың. Һәм был тәбиғәт көйһөҙлөгөнә генә ҡағылмай.**



Хәтирәләр, яралар йәйлап уңалыр, күңелдән юйылыр, хәҙер шунһы мөһим: бер йыл һуҙымындағы "көй"гә ниндәй аккорд ҡуйыр ҙа ниндәй теләктәр юллар аҡъюлай... Киләсәгебеҙгә аҡ юлдар түшәп, атамаһы кеүек яғымлы яңғыраған матур яҙмыштар ғына юраһын ине ул беҙгә. Ябай халыҡтың тормош хәле бер аҙ ғына булһа ла яҡшырыуға табан йүнәлергә тейештер бит, ниһайәт! Иҡтисад һәм социаль үҫеш хаҡына иреклеләрҙең халыҡ-ара көнөн (**5 декабрь**) билдәләү, һис шикһеҙ, маҡтауға лайыҡтыр, тик уның Ер йөҙөндә тормошто яҡшыртыуға ниндәй өлөш индереүе генә билдәһеҙ. Социаль прогресс хаҡына донъя халыҡтары теләктәшлеген белдергән ҡыйыу сығыштар кәрәгерәк бөгөн, ә бер ниндәй йоғонтоһоҙ декларатив атамалар, календарь битендәге көндәр түгел. Йәки, мәҫәлән, Бөтөн донъя СПИД-ҡа ҡаршы көрәш көнөндә (**1**) ниндәй аныҡ ғәмәлдәр иғлан ителә? Исем өсөн билдәләнгән бындай көндәрҙән кем файҙа күрә икән?

Икенсе мәсьәлә - Халыҡ-ара коррупция менән көрәш көнө (**9**). Рәсәй бында төп фигура, сөнки беҙҙәге кеүек башҡаса бер ерҙә лә коррупция күпереп сәскә атмайҙыр. Беҙ әкиәттәрҙә генә ишеткән байлыҡҡа илебеҙҙә тап ана шул юл менән эйә булалар. Тотолған хәлдә лә беҙҙә бурҙар һәм ришүәтселәр еңелсә ҡурҡыу менән ҡотолһа, сит илдәрҙә, үҙегеҙгә мәғлүм, уларҙы үлем язаһы, кәмендә ампутация көтә.

Кеше хоҡуҡтары көнөнөң (**10**) Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы көнө (**12**) менән бер мәлдәрәк килеүе был хоҡуҡтарыбыҙҙың мөһимлеген, тейелмәҫлеген ҡат-ҡат иҫкәртеүҙер ҙә, бәлки, сөнки кеше тыуып-үҫкән ерендә лайыҡлы йәшәргә, ә бының өсөн торлаҡлы булырға, белем алырға, һөнәре буйынса эшләргә, ял итергә, кәрәк икән, дауаланырға хоҡуҡлы. Күрсәк, эшһеҙлек, оптималләштереү һылтауҙары менән кеше хоҡуҡтары сикләнгән илдә сыҙам, сабыр, илһөйәр, романтик рухлы әҙәмдәр генә йәшәй алалыр. Бындай түҙемле халыҡҡа Халыҡ-ара фәҡирҙәргә ярҙам (**19**) һәм Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көндәрен (**20**) билдәләү генә лә ярҙам итә алмаҫ шул...

Илһөйәрҙәр булғас - булайыҡ: милли рухыбыҙҙы, халҡыбыҙ ижады хазиналарын, гүзәл тәбиғәтебеҙ байлыҡтарын ҡәҙерләйек. Урман-һыуҙарыбыҙ, халҡыбыҙ күңелеләй мәғрур тауҙарыбыҙ күп бит беҙҙең. Халыҡ-ара тауҙар көнө лә (**11**) ошо хаҡта иҫкәртеп торһон әйҙә. Башҡортостанды республика, дәүләт булараҡ нығытып, әсә телебеҙҙә яҙырға, уҡырға, уйларға, аралашырға хоҡуҡ биреүсе Конституциябыҙҙы (**24**) һанлайыҡ.

Тағы ниндәй дата тороп ҡалды? Ә-ә-ә... Ҡотҡарыусы көнө (**27**) лә бар икән дә, рәхмәт яуғырҙары! Уларға беҙҙә эш етерле-е-ек. Ҡулдарынан килмәһә, фәҡәт фәҡирлектән генә ҡотҡарыу килмәйҙер, ә, ғөмүмән, көнөбөҙ тулайым уларға ҡалып килә. Тәндәребеҙҙе ҡотҡарыр ҙа улар, йәндәребеҙҙе кем ҡотҡарыр? Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр, тигән дә бит аҡыл эйәһе. Бөгөн донъяла матурлыҡты нимә кәүҙәләндерә? Ярым-яланғас сибәркәйҙәр ярышымы, әллә әҙәбиәт, сәнғәт әҫәреме? Һуңғыһы икән, кино - бөгөн сәнғәтме, әллә күңел асыу тамашаһы, ваҡыт уҙғарыу сараһымы? Әйткәндәй, **28 декабрь** - Халыҡ-ара кино көнө.

Хаҡ мосолман ҡәрҙәштәребеҙҙең дә иҫтәренә төшөрәбеҙ: 1 декабрҙән 29 көнгә һуҙылған рабиғел әүүәл айы башланып, ошо айҙың **11**-се көнө - Мәүлит кисе билдәләнә.

**Был айҙа тыуғандар:**

**8** - Дин һәм йәмғәт эшмәкәре, мөфтөй, Башҡортостан мосолмандарының диниә назараты рәйесе **Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллинға** - 70 йәш.

**12** - Башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир **Мифтахетдин Аҡмулланың** тыуыуына - 185 йыл (1831-1895).

**14** - Шағирә, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Әнисә Таһироваға** - 75 йәш (1941).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*

# БАШҠОРТОМДОҢ...

## ылҡаһыҙ уҡыла торған гәзите

**Телебеҙҙә ылҡаһыҙ тигән бик матур һүҙ бар. "Киске Өфө" гәзите тураһында һүҙ әйт, тиһәләр, мин: "Был гәзитте ылҡаһыҙ итеп уҡыйым", - тип әйтер инем. Йәнә, фекерҙәрен теткеләп, йолҡҡолап уҡыйым. Бер "тере" урынын да ҡалдырмайым. Әле килеп, гәзит уҡыусы булараҡ, ошо гәзитте сығарыусы редакция коллективына әйтер һүҙемде еткерергә теләйем. Эштәре өсөн маҡтарға ла, ҡайһы бер үтенес, тәкдимдәремде еткерергә лә иҫәбем бар...**



Гәзитте ҡулға алғас та, мәҡәләләрҙең баш һүҙенә иғтибар итәм: бөгөнгө көн мәсьәләләре күтәрелгән икән, уларға мәҡәлә геройҙары ниндәй ҡараш белдерә, фекер төйөнө ниндәй? Мәҡәләлә төйнәлгән фекер минең фекеремә ауаздаш булған хәлдә, "Ҡана, мин дә был эшкә үҙ өлөшөмдө индерәйем әле", тип, дәртләнеп китәм. Шундай мәлдәрҙең береһе, тип, быйыл иғлан ителгән "Һәр кем уҡырға тейешле йөҙ башҡорт китабы" акцияһына шаңдау яҙып ебәреүемде әйтергә булалыр. "Ғәлимов Сәләмдең "Бала" поэмаһы был исемлектә мотлаҡ рәүештә урын алырға тейеш, - тигән саҡырыу ташлағайным, уны редколлегия шундуҡ ҡабул итеп, гәзиттә баҫтырып та сығарҙы. Ошондай һиҙгерлек, иғтибарлылыҡ, һис шикһеҙ, гәзит уҡыусы менән редакция араһында булырға тейеш ул. Гәзитте уҡымлы итә торған төп сараларҙың береһе бындай акциялар. Уҡыусыларҙы йәлеп итә торған конкурстар тураһында ла әйтеп үтеү маҡсатҡа ярашлы булыр. "Бер һүрәткә ҡарап" конкурсы, мәҫәлән, шулай уҡ уҡыусыла ижад ҡомары тоҡандырып ебәрә торған конкурс. Миңә был конкурста еңеп сығырға тура килде. Һынлы сәнғәткә яҡын кешемен. Ҡыҙым да, һеңлем дә әлеге конкурста репродукцияларын урынлаштырған башҡорт рәссамдарынан һабаҡ алдылар. Ғөмүмән, беҙҙең нәҫелдә һынлы сәнғәткә яҡын кешеләр бихисап. Мин, бер тотонһам, кешеләрҙең йөҙ төҙөлөшөн бик еңел ҡағыҙға төшөрәм. Рәссамдарҙың үҙҙәре менән дә яҡшы танышмын, улар менән йыш ҡына әңгәмәләшеп тә алам. Ошо сәбәптәндер, миңә гәзит биттәрендә даими донъя күргән репродукцияларҙың идея-тематик йөкмәткеһен асып биреү ҡыйынлыҡ тыуҙырманы.

Редакция хеҙмәткәрҙәремә бер нисә үтенесем бар. Беренсенән, мин "Әйҙәгеҙ, аҡса эшләйек!" тигән рубрикалағы сығыштарҙы көтөп алам. Шуларҙы дауам итегеҙ. Хатта ки, уларҙы төрлөләндереп, аҡса эшләүҙә шаҡ ҡатырғыс, ғәҙәти булмаған уңышҡа өлгәшкән замандаштар тураһында күберәк яҙһағыҙ ине. Миҫал итеп, Кореянан килеп, мул итеп ҡыяр үҫтереп күрһәткән эшҡыуар тураһында "Башҡортостан" гәзите яҙҙы бит, шундайыраҡ кешеләр тураһында "Киске Өфө" лә күберәк яҙһын ине, тим.

Икенсенән, һеҙ бик матур, шәп кешеләр менән әңгәмәләр ойошторһағыҙ, улар тураһында мәҡәләләр яҙһағыҙ. Үҙегеҙ тураһында - редакция коллективы тураһында ла яҙығыҙсы. Мин, мәҫәлән, ошо гәзиттең хужабикәһе - Гөлфиә Янбаеваның шәхси тормошон, уйҙарын, күңел торошон сағылдырған мәҡәлә уҡырға теләр инем. Беҙ уның республика "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһе икәнен беләбеҙ, ә ниндәй әсәй, ниндәй өләсәй икән ул? Яҙыусылар, уҡытыусылар тураһында күберәк яҙығыҙ. Ғөмүмән, ошо гәзитте барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан һәр журналистың үҙ уйкисерештәрен, шәхесен сағылдырған мәҡәләләр көтәм.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА,**
**Өфө ҡалаһы 18-се мәктәбенең башҡорт теле уҡытыусыһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Ҡурай байрамы" Башҡортостандан ситкә сыға. Тәүгеләрҙән булып фестиваль Ырымбур өлкәһендә уҙғарыла. Сараны Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты ойоштора. 6 декабрҙә фестивалде Пермь ҡалаһы, 8 декабрҙә - Магнитогорск, 9 декабрҙә - Силәбе, 10 декабрҙә Мейәс ҡабул итә. Ҡурай байрамы Ҡурған ерендә тамамлана.

✓"Айыҡ Рәсәй" һәм Йәмғәт палатаһы ҡарамағындағы Эксперт-аналитика үҙәге "Рәсәй төбәктәренең милли айыҡлыҡ рейтингын" төҙөнө. Был исемлектә Башҡортостан 21-се урынды биләй. Бер йыл элек республика 19-сы урында ине. Документҡа ярашлы, Чечня, Ингушетия һәм Дағстанда эсеүселәр аҙ. Ростов өлкәһе - ошо күрһәткес буйынса иң яҡшы ун төбәк исемлегендә һуңғы урында. Магадан өлкәһендә, Чукотка автономиялы округында һәм Коми Республикаһында спиртлы эсемлектәр ҡулланыу кимәле бик юғары.

✓7 декабрҙә Рәсәй ҡалалары буйлап сәйәхәте барышында Яңы йылдың төп тылсымсыһы - Бөйөк Устюгтан Ҡыш бабай бәләкәстәр менән осрашыу өсөн Өфөгә килә. Ҡыш бабай "Йортҡа әкиәт" социаль акцияһы йәрминкәһендә ҡатнаша, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн социаль приютҡа, Һаулығы буйынса мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн реабилитация үҙәгенә бара. Бынан тыш, ул Конгресс-холл янындағы республика шыршыһында уттар ҡабыҙыу тантанаһында, шулай уҡ Ҡыш бабай тирмәһен асыуҙа ҡатнаша.

✓Рәсәй Хөкүмәте 2017 йылдың 1 июленән коммуналь хеҙмәттәргә тарифтарҙың артыуын раҫланы. Тимәк, түләүҙәр дәүләт билдәләгән кимәлдән артырға тейеш түгел. Башҡортостанда коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙең үҙгәреү индексы 5,8 процент тип билдәләнгән. Дөйөм алғанда, илдә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өсөн түләүҙәр ете процентҡа арта. Иң ҙур хаҡ Мәскәүҙә көтөлә.

✓Башҡортостанда киҙеү һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләүҙең күтәрелеше ғинуар аҙағында - февраль баштарында көтөлә. Эпидемия 6-8 аҙна дауам итәсәк һәм март аҙағына тамамланасаҡ. "Роспотребнадзор"ҙа билдәләүҙәренсә, быйылғы миҙгелдә вирустың A I/Калифорния ("суҫка киҙеүе"), A II/Гонконг һәм B/Бризбон төрҙәре киң таралаcаҡ. Белгестәр алдан прививка эшләтергә кәңәш итә. Вирусҡа ҡаршы иммунитет барлыҡҡа килһен өсөн ваҡыт (ике аҙнанан кәм түгел) талап ителә.

АФАРИН!

# БАЛҠЫП ЯНА УТТАРЫ!

**Мәскәүҙә үткән V Халыҡ-ара "ENES-2016" Энергияны һаҡлау, энергия һөҙөмтәлелеген күтәреү һәм энергетиканы үҫтереү форумында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың электр селтәрҙәрен "Smart Grid" технологияларын ҡулланып реконструкциялау һәм "Аҡыллы ҡала" технологиялары ярҙамында тышҡы яҡтылыҡ сараларын модернизациялау буйынса доклад менән сығыш яһаны.**

Әлеге ваҡытта "Смарт Грид" Рәсәй субъекттары араһында бары тик Өфөлә генә ҡулланыла. Уның төп үҙенсәлеге - электр тәьминәтенең сифатын һәм ышаныслылығын күтәреү менән берләттән, электр энергияһы юғалтыуҙарын кәметеү. Был турала 2013 йылда БЭСК һәм "Сименс" компанияһы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлә. Эшмәкәрлектең беренсе этабында ҡала селтәрҙәренең хәл-торошона анализ яһала, система проблемалары асыҡлана, уларҙы модернизациялау концепцияһы һайлана һәм уларҙы үҫтереү буйынса һөҙөмтәле саралар билдәләнә. Икенсе этапта интеллектуаль селтәр участкаһы булдырыла. Иҫке ҡорамалдар тулыһынса яңыһына алыштырыла, электр тәьминәтен коммерция иҫәбен алыу ҡорамалдары ҡуйыла һәм башҡа эштәр башҡарылып, пилот проектын тормошҡа ашырыу уңышлы тамамлана, программа тәьминәте тышҡы йоғонтонан ышаныслы һаҡланған Өфө ҡалаһы селтәрҙәре менән идара итеү үҙәге булдырыла. Был проектты тормошҡа ашырыу барышында интеллектуаль селтәр участкаһында электр энергияһын юғалтыу күләме 95 процент тәшкил итә. Бөгөн был тәжрибә тотош ҡалаға таратыла.

Икенсе әһәмиәтле йүнәлеш - урамдарҙы яҡтыртыуҙы тәьмин итеү. Был эшмәкәрлек "Өфө ҡала уты" муниципаль предприятиеһы ҡарамағында. Ул ҡала буйынса дөйөм оҙонлоғо 1941 километр булған 88 мең яҡтыртыу нөктәһен хеҙмәтләндерә. Был өлкәне модернизациялау сиктәрендә терегөмөш лампалары натрий лапмаларына алыштырыла. Улар ҡала территорияһын яҡтыртыу күләмен арттырыуға, электр селтәрҙәренең көсөргәнешен һәм электр энергияһы сығымдарын кәметергә мөмкинлек бирә. Натрий лампалары терегөмөш лампаларына ҡарағанда өс тапҡырға оҙағыраҡ эшләй.

Шулай уҡ "Аҡыллы ҡала" технологияһын ҡулланыуҙы индереү буйынса ла эштәр алып барыла. "Аҡыллы ҡала" технологияларын индереү Өфө ҡала хакимиәтенең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе", - тип билдәләне сығышы һуңында Ирек Ишмөхәмәт улы. Шулай уҡ ул, башҡа эре ҡалаларҙың етәкселәре менән бергә, ҡала мәрҙарының энергия һөҙөмтәлелегә һәм тоторокло үҫеш мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара осрашыу мөрәжәғәтен һәм Декларацияһын хупланы.

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ

# ТЕМӘСКӘ ЛӘ...

## иғтибар итәйек әле!



**2019 йылдың 21 февралендә тап Баймаҡ районының Темәс ауылында 1-се Бөтә башҡорт хәрби съезы ойошторола, унда Башревком һайлана. Уға Башҡорт Хөкүмәте вәкәләттәре йөкмәтелә һәм Башҡорт Автономиялы Совет Республикаһы төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителә.**

РФ Президенты В.В. Путиндың Башҡортостан автономияһының 100 йыллыҡ юбилейын билдәләү тураһындағы Указы ошондай тарихи ваҡиғалар менән бәйле төбәккә яңы мөмкинлектәр асырға тейеш, тип уйлайбыҙ. Оло юбилейҙы лайыҡлы ҡаршы алыу маҡсатында БР Хөкүмәте, Баймаҡ районы хакимиәте һәм Темәс ауыл биләмәһе тарафынан махсус ҡарарҙар ҡабул ителер, тигән өмөттәбеҙ. Ошо мөмкинлектән файҙаланып, районды һәм Башҡортостандың тәүге баш ҡалаһы - Темәстең ҡайһы бер социаль-иҡтисади һәм мәҙәни мәсьәләләрен хәл итеү бик тә яҡшы булыр ине. Атап әйткәндә, Темәс ауылында яңғын депоһы, мәктәпкә төкәтмә һәм мәктәп яны интернаты төҙөү, Темәс леспромхозының элекке балалар баҡсаһын капиталь ремонтлау һәм уны яңынан асыу, ауыл биләмәһенең административ бинаһын ремонтлау, Темәс–Әмин–Күнзавод юлын асфальтлау, яңы микрорайондарҙағы юлдарға ҡырсынташ түшәү мөһим. Шулай уҡ Темәс музейын мемориаль залда урынлашҡан Беренсе Башҡорт Хөкүмәте ағзаларының балауыҙ фигуралары менән тулыландырыу ҙа талап ителә. Шул уҡ ваҡытта Темәс энциклопедияһын нәшер итеү ҙә күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә.

Темәс ауылы - Башҡортостан тарихында мөһим урын биләп торған төбәк һәм ул һәр яҡлап иғтибарға, хөстәрлеккә лайыҡ. Республикабыҙҙың беренсе баш ҡалаһы менән беҙ горурланырға һәм уны артабан үҫтереү өсөн барыһын да эшләргә тейешбеҙ. Сөнки тап ошо ерҙә ҡасандыр мөһим ҡарарҙар ҡабул ителгән.

**Рауил ЙӘНСУРИН,**
**Темәс ауылының почетлы гражданины.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ СӘЙЕР

**Бөгөн халыҡтың идара итеүсе ойошмаларға коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурыстары артыуы күҙәтелә. Һөҙөмтәлә идара итеүсе компанияларҙың тәьминәт ойошмалары алдында ла бурыс күләме арта бара. Шулай итеп, идара итеү компанияларының йорттарҙы, йорт алдарын төҙөкләндереүҙе сифатлы итеп башҡара, ә тәьминәт ойошмаларының селтәрҙәрҙе һәм ҡорамалдарҙы ваҡытында алыштыра алмауында торлаҡ йорттарҙа йәшәүселәрҙең күрһәтелгән хеҙмәт өсөн ваҡытында түләмәүе сәбәпсе булып сыға.**



# ТАЯҠ ИКЕ ОСЛО...

Әлбиттә, идара итеү компаниялары ҡайһы саҡта халыҡты иҫкәртеү саралары ла күреп ала ул, йәғни электр энергияһын һәм йылы һыуҙы биреүҙе туҡтатып алғылай. Мәҫәлән, быйылғы ярты йыллыҡта Киров районында ғына торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр буйынса бурыс күләме 150 миллион һум тәшкил иткән. Райондың 28 фатирында йәшәүселәр идара итеү компанияларына 300 мең һум бурысҡа батҡан. Ҡайһы берәүҙәр хатта дүртәр йыл коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләмәгән. Профилактик әңгәмәләр үткәргәндән һуң, коммуналь хеҙмәттәр былдай кешеләрҙең утын, йылы һыуын өҙгән, канализация менән ҡулланыу мөмкинлеген япҡан. Идара итеүсе компаниялар былдай сараларҙың һөҙөмтәле булыуын раҫлай - тиҙ арала 32 миллион һум бурыс ҡайтарылған.

Был ҡәтғи сара, әлбиттә, сөнки аҡсалы кеше шунда уҡ ҙур ғына сумманы сығарып һалды ла икән, ти. Ә бит ҡайһы бер ғаиләләрҙең ундай мөмкинлеге булмауы ла ихтимал. Әлбиттә, ҡалала ауыр иҡтисади хәл-торошта булған ғаиләләргә аңлап ҡарайҙар һәм уларҙың хәленә инергә тырышалар. Мәҫәлән, бурыслылар, тәьминәт ойошмалары, власть вәкилдәре ҡатнашлығында уҙған 213 комиссия ултырышында түләүҙәрҙе кисектереп тороу тураһында 177 акт төҙөлгән.

Ләкин таяҡ бер осло ғына булмағандай, бында халыҡ ҡына ғәйепләме икән? Граждандар ҙа бит теге йәки был тәьминәт ойошмаһының эше менән ҡәнәғәт түгеллеген белдерә. Әммә уларҙың мөрәжәғәтенә ҡолаҡ һалыусы бармы? Тегендә-бында канализация йә һыу торбаларында проблемалар килеп сығып, диспетчерҙарға хәбәр иткәндән һуң аҙналап ярҙам ала алмау осраҡтары тураһында ишетеп-күреп торабыҙ бит. Был ғына түгел: коммуналь хеҙмәттәр өлкәһендә идара итеү компанияларының мутлашыуы ла сер түгел, быйыл ғына милекселәргә дөйөм алғанда нисәмә миллион һум аҡса кире ҡайтарылды. Буш һүҙ һөйләмәҫ өсөн һандарға мөрәжәғәт итәйек: Башҡортостандың торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе дәүләт комитеты тикшереүе һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, тикшереү барышында идара итеү компаниялары торлаҡ өсөн коммуналь түләүҙәр иҫәпләгәндә хоҡуҡ боҙоуҙарға юл ҡуйған һәм халыҡтан 40,4 миллион һум аҡса артыҡ йыйылған.

Ғөмүмән, таяҡ ике осло, тигән аҡылға таянһаҡ, бөтә был мәсьәләләрҙә халыҡты ғына ғәйепләү урынлы түгел икәнен дә инанырбыҙ. Былны Өфөлә йәшәүсе пенсионер Азия Кусимованың ошо һүҙҙәре лә раҫлай: "Торлаҡ-коммуналь хужалығына килеп, һыу өсөн түләүҙе тикшерттем, - тип һөйләгәйне ул. - Квитанция буйынса түләһәм, айына һыуға ғына ике мең һум түләү килеп сыға. Бухгалтерияла ултырыусылар, счетчиктарығыҙ иҫке, алыштырырға кәрәк, тип, ҡайтанан иҫәпләүҙән баш тарттылар. "Счетчиктың иҫке икәнен мин ҡайҙан беләйем?" тиһәм, "Тикшереүселәр булып киткән бит, счетчиктарҙы алыштырырға тип акт яҙып китмәнеләрме ни?" тип һорайҙар. "Эйе, килде, тикшерҙе бер ҡатын, бер нәмә лә әйтмәне лә, бер яҙыу ҙа ҡалдырмаһы", - тием. "Счетчиктарығыҙҙы алыштырығыҙ", тип тик ултыралар. Улар менән риза булмайынса, Бессонов урамындағы ЕРКЦ-ға барып, һыуҙы ҡабат иҫәпләтеүгә ғариза яҙып ҡалдырҙым. Унда кешенең күплеге - барыһы ла оло йәштәгеләр. Ә күпме кеше ҡул һелтәп, күпме яҙылған, шул сумманы алып бара ла түләй инде. Мин яңғыҙыма ике бүлмәле фатир өсөн айына уртаса 3 мең түләһәм, ғаиләләләр, пенсиялары аҙ күләмдә булыусылар нишләйҙер, аптырайым..."

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әҙерләне.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓30 ноябрҙә әсәлек капиталы иҫәбенән бер тапҡыр 25 мең һум аҡса алыуға ғаризалар ҡабул итеү ваҡыты тамамлана. Электрон ғаризаларҙы Рәсәй Пенсия фондының сайтында бирергә мөмкин. Башҡортостандың ҡала һәм районҙарында Рәсәй Пенсия фонды идаралыҡтарына 40 меңдән ашыу ғариза ҡабул ителгән, улар буйынса 804 миллион һум аҡса күсерелгән. Өҫтәүенә, 1,8 меңдән ашыу ғариза электрон төрҙә килгән. Төбәктә әсәлек капиталына 253,7 меңдән ашыу дәүләт сертификаты тапшырылған. Әле 136 меңдән ашыу сертификат хужалары бер йәки бер нисә йүнәлеш буйынса капиталды тулыһынса тотонған.

✓Республиканың Милли музейында тәүге тапҡыр "Башҡортостанда радиотапшырыуҙар һәм телевидение тарихы" тигән күргәҙмә асылды. Иҫке экспозиция залындағы стендтарҙа 1920 йылдарҙан башлап беҙҙең көндәргә тиклем ил тарихы менән тығыҙ бәйле булған этаптар сағылдырылған. Күргәҙмәне ойоштороу өсөн байтаҡ эш башҡарылған, ҙур фотоархив һәм текстар тупланған. Күргәҙмә ике ай дауамында буласаҡ.

✓Өфөлә ЮХХДИ "Бурыслы" иҫкәртеү операцияһы үткәрә. Сара юл ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штраф түләмәүселәрҙе асыҡлауға йүнәлтелгән. Законға ярашлы, штраф, ҡарар көсөнә ингән көндән алып, 60 көн эсендә түләнергә тейеш. Бурыслы водителдәрҙе асыҡлаған осраҡта Дәүләт автоинспекцияһы хеҙмәткәрҙәре уларҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Ваҡытында түләмәгән осраҡта штраф икеләтә арттырыла (1 мең һумдан кәм түгел) йәиһә ғәйепле кеше 15 тәүлеккә тиклем ҡулға алына, мәжбүри эштәргә ҡушыла.

✓Ямал-Ненец автономиялы округында урындағы Башҡорт ҡоролтайының киңәйтелгән ултырышы уҙҙы. Унда Ямалдағы милли-мәҙәни автономияларҙың йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре тәжрибә уртаҡлашты һәм фекер алышты. Башҡортостандан конференцияла Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Вельмир Аҙнаев ҡатнашты.

✓18 декабрҙә Өфөләге Олимпик-Парк майҙанында Ҡыш бабайҙар парады ойошторола. Яңы йыл парадында баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары ҡатнаша ала, бары тик Ҡыш бабайҙың костюмы кәрәк. Программала мәҙәни, күңел асыу конкурстары, спорт ярыштары, шулай уҡ таҙуан шыуыу, арҡан тартышыу һәм йүгереү ҡаралған. Ҡомарлы ҡунаҡтарҙы быйма ташлау, тоҡ кейеп һикереү, "Тау батшаһы" кеүек боронғо уйындар көтә.

КӘҢӘШМӘЛӘ ҠАРАЛДЫ

# ТУҒАН ТЕЛДӘ УҠЫТЫУҘЫ...



## бер кем дә тыймай ҙаһа!

**Ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан Башҡортостан Республикаһы Милли музейының ҙур залында "Төп дөйөм белемдә туған башҡорт телендә биреү проблемаһы"на арналған түңәрәк ҡор үткәрелде.**

Башҡарма комитет аппаратының баш белгесе Рәйсә Күзбәкова әҙерләгән докладта был ҡорҙа барасаҡ һөйләшеү темаһына ишара яһалды: мәктәптәрҙә туған башҡорт телендә уҡытыу буйынса хәүефле хәлдәр бар һәм улар көндән-көн етди төҫ ала бара. "Башҡорт балалар баҡсаларында ла, мәктәптәрҙә лә уҡытыу һәм тәрбиә эштәре күберәк урыҫ телендә алып барыла, - тине Рәйсә Абдрахман ҡыҙы. - Ҡала ерә өсөн уғата ғәҙәти күренеш был. Туған телдең бишеге булған ауылдарҙа ла туған телдә белмәү проблемаға әйләнә. Ни өсөн? Сөнки БДИ (Берҙәм дәүләт имтиханы) һәм башҡа һынылыҡҡа һылтауҙар менән хатта төп башҡорт ауылдарында ла уҡытыуҙы урыҫ теленә күсереү бара.

"Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Федераль закондың 14-се статьяһына ярашлы, бала төп дөйөм белемде, йәки туғыҙынсы синыфты тамамлағанғаса, туған телендә алырға хоҡуҡлы. Ул ғына ла түгел, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының яңыртылған варианты ла туған телдә уҡытыуҙы иҫкәрмәй итмәй. Рәсәй Федерацияһының Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан бер нисә вариант уҡыу пландары эшләнгән, шул иҫәптән туған телдә уҡытыу алып барылған мәктәптәр өсөн махсус уҡыу планы ла бар. Тағы ла бер мөһим документ: ул Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығының 1394-се һанлы бойороғо: уға ярашлы, 9 синыфтан һуң дәүләт имтихандарын бала туған телендә бирергә хоҡуҡлы. Бының өсөн мәктәп беренсе мартҡа тиклем ғариза ғына бирергә тейеш. Ләкин 5-9 синыфтарҙа йәки урта звенола уҡытыуҙың күпселек урында урыҫ телендә алып барылыуы һөҙөмтәһендә, 9 синыфтан һуң дәүләт имтихандарын туған телендә бирергә теләүселәр юҡ.

2009 йылда БР Президенты тарафынан Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы раҫлангайны. Уға ярашлы, 5-9 синыфтарҙа математика, химия, физика кеүек теүәл фәндәр ике телдә алып барылырға, ә гуманитар фәндәр туғыҙынсыға тиклем тик башҡорт телендә генә уҡытылырға тейеш. Бөгөн был юридик көскә эйә булған Концепция тормошҡа ашырылмай. БР Мәғариф министрлығы тарафынан яңы концепцияның проекты эшләнгән, ләкин ул раҫланмаған. Әйткәндәй, яңы концепция проектында беҙҙә хәүефләндерер урындар байтаҡ: "Недостаточно развитая система статуса родного языка в республике не позволяет организовать качественное обучение на этих языках", - тиелә унда. Быны нисек аңларға? Ғөмүмән, концепция бындай типтағы документтарға ҡуйылған талаптарға яуап бирмәй.

Күренеүенсә, уҡытыуҙы туған телдә ойоштороу өсөн кәрәкле хоҡуҡи-норматив документтар бар. Беҙгә туған телдә уҡытыуҙы бер кем дә тыймай. Ә ни өсөн закон нигеҙендә туған телдә уҡытырға мөмкинлек була тороп та, туған телдә уҡыусылар һаны йылдан-йыл кәмей һуң? Әлбиттә, мәғлүмәттәргә ышанһаң, туған телдә белем алыусы балалар һаны әллә ни кәмемәгән дә кеүек: бер нисә йыл элек ул 37 процент самаһы булһа, бөгөн 34 процент тирәһе (Был һандар Мәғариф министрлығынан алынды). Ләкин Ҡоролтай комиссияһы туплаған мәғлүмәттәр, дәреслектәрҙең башҡорт теленә тәржемә ителмәүе, туған телендә имтихан бирергә теләүселәрҙең булмауы, күп кенә фәндәрҙең бары урыҫ телендә генә уҡытылыуы саң ҡағырға мәжбүр итә. Районндарҙағы күпселек мәктәп директорҙары ла проблеманы башҡорт теленә тәржемә ителгән дәреслектәрҙең булмауы, башланғыс кластар өсөн олимпиада, төрлө тикшереү эштәренең тик урыҫ телендә генә килеүе менән аңлата. Ысынлап та, был эштәр районндарға тик урыҫ телендә генә ебәрелә. Башланғыс синыфтар өсөн математика буйынса дәреслектәр башҡорт теленә бик насар тәржемә ителгән, хаталар күп, етмәһә, улар Федераль исемлектән төшөп ҡалған. Тирә-яҡ мөхит фәненә бәйле лә шул уҡ хәл. Ғөмүмән, әгәр ҙә беҙ туған фәндәр буйынса уҡытыуҙы башҡортсаға күсереүҙе мотлаҡ үтәләргә тейешле бурыс итеп ҡараһаҡ, улар буйынса һәйбәт дәреслектәрҙе тәржемәләүгә бик етди иғтибар итергә тейешбеҙ. Тағы шул. Район мәғариф органдары етәкселәре туған телдә уҡытыу тураһында һүҙ сыҡһа, БР Мәғариф министрлығынан бер ниндәй ҙә күрһәтмә булманы, тип яуаплай. Күп милләтле Рәсәй иле шарттарында милли мәҙәниәт һәм йолаларҙы һаҡлау һәм үҫтереү бурысы - "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы законның төп принциптарының береһе булараҡ алғы планға сығарыла. Тимәк, был йүнәлештәге эшмәкәрлек Мәғариф министрлығының иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, район һәм ҡала хакимиәттәренең мәғариф органдары етәкселәре алдында был бурыс ҡуйылмай, бер кәңәшмәлә лә туған телдә уҡытыу кәрәклегенә баҫым яһалмай. Министрлыҡтан тәҡдим-хаттар ҙа ебәрелмәй.

Йәнә шуныһы ғәжәп: урыҫ телендә уҡытыуға күсеүҙең төп инициаторҙары - мәктәп директорҙары, уҡытыусылар. Ата-әсәләрҙә БДИ, 4 синыфтан һуң үткәреләсәк ВПР (Бөтә Рәсәй тикшереү эштәре) менән ҡурҡытып, улар араһында дөрөҫ аңлатыу эше алып бараһы урында, уларҙы иң еңел юл һайлауға этәрәләр. Шундай рухтағы йыйылыштар протоколы нигеҙендә математика һәм тирә-яҡ мөхитте урыҫ телендә уҡытыуға күсерәләр. Закон буйынса уҡытыу теле мәктәптең локаль акты менән билдәләнә, ә ата-әсәләр йыйылышының протоколы менән түгел. Бөгөн халыҡтың аңы шул тиклем буталған. Педагогтар һәр ваҡыт балаларҙы ғына түгел, ата-әсәләрҙе лә тәрбиәләне. Тиҫтәләрсә йылдар һуҙымында тупланған был тәжрибә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, онотолдо..."

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Ҡоролтай тарафынан бик тә урынлы һәм төплө күтәрелгән, әлеге сығышта яңғыраған проблемаларға ҡағылышлы аныҡ яуаптарҙы Мәғариф министрлығынан ишетергә теләгәйне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был сараның ни тиклем мөһим булыуын яуаплы урын биләүселәр аңлап етмәгән, күрәһең. Һөйләшеүҙә министр ҙа, уның урынбаҫары ла, хатта милли телдәр буйынса бүлек мөдире лә булманы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кәңәшмәлә ҡатнашыусы һәм сығыш яһаусы Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбе директоры Г. Йомағолов та, Баймаҡ районының мәғариф бүлеге етәксеһе лә "Фәндәрҙе башҡортса уҡығандар БДИ-ны уңышлы бирә алмай, юғары уҡыу йортона уҡырға инә алмай", тигән һылтанмаға таянып, урыҫ телендә уҡытыуҙың өҫтөнлөктәрен иҫбатлап маташты. Ә зыялыларыбыҙ Мәрйәм Бураҡаева, Мәзһәр Иҫәнбаев, Гүзәл Ситдиҡова, Фәнил Күзбәков, Фирҙәүес Хисаметдинова аныҡ миҫалдарға нигеҙләнеп, бик күптәрҙең тап әсә телендә уҡыған өсөн дә киң танылыу яулауына баҫым яһаны.

- Аҫаба башҡорттар 90 проценттан ашыу булған район мәктәптәренең урыҫса уҡытыу өсөн ҡырталашыуы - телебеҙҙең ниндәй кимәлгә төшөүен күрһәтеүсе ғибрәтле хәл ул, - тине БДУ профессоры Фәнил Күзбәков. - Ярай, һеҙ, урыҫ теленә өҫтөнлөк биреүсе мәктәп етәкселәре, балаларығыҙҙы йөҙ проценты менән юғары белемле лә итә алдығыҙ, ти. Уларҙың ниндәй милләткә, үҙебеҙгәме, сит илгәме хеҙмәт итәсәктәрен фаразлай алаһығыҙмы? Миненсә, һәм бындай ҡараш менән төптән уйланғандар, моғайын, килешер, уларҙың күпселеге башҡорт өсөн юғалған буласаҡ. Сөнки милли рух бары тик әсә һөтө һәм әсә теле аша ғына тәрбиәләнә. Әгәр ҙә беҙ башҡорт мәктәптәрендә ныҡышмал рәүештә гуманитар фәндәрҙе туғыҙынсы синыфҡаса башҡорт телендә өйрәнеүгә өлгәшә алмаһаҡ, туған телебеҙ аҡрын-аҡрын юғалыуға дусар ителәсәк!.. Башҡорт теленең дайрәһе тар, тип тә һылтана кемдәрҙер. Йәнәһе, ул, кемдер әйтмешләй, Әүжәнгә еткәнсе генә. Улайға китһә, урыҫ теле лә Мәскәүгә тиклем генә лә баһа, сит илгә сыҡтыңмы, инглиз, испан, ҡытай теле кәрәк. Даирә кәрәк, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта даирәне ошо телдә һөйләшеүселәр киңәйтә ала. Әгәр ҙә беҙ юғары инстанцияларға хаттарҙы, мөрәжәғәттәрҙе үҙ телебеҙҙә яҙһаҡ, социаль өлкәлә эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙән үҙ телебеҙҙә яуап биреүҙәрен талап итһәк, даирә лә киңәйер. Тик ул бөгөн-иртәгә хәл ителә торған мәсьәләләрҙән түгел. Эйе, уның буйынса ла һис бер икеләнеүһеҙ ныҡышмал эшләргә кәрәк. Һәм ул генераль планға индерелә торғандарҙан. Әммә эштәрҙең кисектергеһеҙе, бөгөн эшләнә, ҡулдан килгәнен әле башҡара торғаны бар...

**Шулай итеп, ултырыш ҡабул иткән ҡарарҙа: "Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы Федераль закондың 14-се статьяһын тормошҡа ашырыу буйынса эш тейешле кимәлдә алып барылмай тип иҫәпләргә"; "БР Мәғариф министрлығы менән берлектә ата-әсәләргә туған телдә уҡытыуҙың әһәмиәтен аңлатыу маҡсатында 2017 йылдың февраль айында республика ата-әсәләр конференцияһын уҙғарырға"; Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы ФЗ-ға ярашлы ата-әсәләргә туған телдә уҡытыуҙың әһәмиәтен аңлатыу буйынса әҙмәҙәлекле эш алып барырға, башҡорт ауылдарында туған телдә уҡытыуҙы ойоштороуҙы контролдә тоторға", тигән пункттар бар. Сарала ҡатнашыусы Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Йомабикә Ильясованың "Был ҡарарҙар иң юғары кимәлдә контролгә алынасаҡ!" тигәне кәңәшмәлә һөйләнгәндәрҙең юғары даирәләргә лә барып етеренә өмөт уята уятыуға...**

**Таһир ҒӘБИТОВ әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Етен кеҫәле

❖ Ҡул, аяҡтарҙың бармаҡтары йыш ойоп икән, был ҡан тамырҙары менән бәйле булыуы ихтимал. Кис 1/3 стакан етен орлоғона 1 литр һыу ҡойорға, ҡайнау хәленә еткерергә һәм 2 сәғәт ҡайнар һыулы һауытта торорға. Төнө буйы тонәтебеҙ һәм иртән һеҙәбеҙ. Яҡынса 850 мл кеҫәл кеүек масса барлыҡҡа килә. Уны 5 көн эсергә: иртән ас ҡарынға һәм кис ашағандан һуң 1/3 стакан. Дауаны 15 көн ҡабатлағыҙ. 3 ай ял иткәндән һуң, тағы 15 көн етен кеҫәле эсегеҙ.

## Радикулит

❖ Был рецепт ғәҙәти радикулит, миозит, бәрелгән урындарға, ҡабырға-ара невралгияһынан шифалы. Тигеҙ өлөштә йод менән глицеринды ҡушып болғатырға һәм мамыҡ менән арҡаға һөртөргә. Умыртҡа бағанаһына тейергә ярамай. Кизе-мамыҡ кейем кейеп, йоҡларға ятырға. Ҡалын итеп ябынырға тырышмағыҙ. Көн аша ошолай 15 процедура яһарға кәрәк. Кемдең йодҡа аллергияһы бар, уларға был дауаны эшләргә ярамай.

## Ҡан тамырын таҙартыу

❖ Баш мейеһе тамырҙарын таҙартыу муйын остеохондрозынан, атеросклероздан ҡотҡара, баш ауыртыуҙары бөтөп ҡалыр, кәйеф тә күтәрелә. 5 аштерхан сәтләүеген ваҡлап, 1 ҡалаҡ йүкә балы менән болғатырға. Бер семтем дәрсен (корица), имбир өҫтәргә һәм 1 тәүлеккә һыуыткысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ 1/3 стакан һуған һутына 1 стакан бал өҫтәп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ ашарға. Ул тамырҙарҙы таҙартып ҡына ҡалмай, иммунитетты ла нығыта.

❖ Көн һайын төшкө һәм киске аштан ярты сәғәт алда яртышар стакан анар (гранат) һуты эсегеҙ. Уны алма һәм кишер һуты менән сиратларға ла була.

❖ 10 грамм дегәнәк тамырын термоста 8-10 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм һыуыткысҡа ҡуйырға. Төнәтмәне иртәнге аштан ярты сәғәт алда 4-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Тәрбиә эшен тик ғаиләгә генә ҡайтарып ҡалдырмайыҡ, иң тәүҙә ауылыбыҙҙа тәрбиәле мөхит булдырайыҡ, етәкселәрҙән генә ярҙам һорап ултырмай, атай-олатайҙар нигеҙ һалған һөнәрҙәрҙе, шөғөлдәрҙе тергеҙәйек.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Йәйге кухняны ишек алдында төҙөгәндәр. Гигиеник яҡтан ҡарағанда, был ыңғай күренеш булған, өйҙә таҙалыҡ һаҡлауға ярҙам иткән, себен-тараҡан үрсеүгә сик ҡуйылған. Йорт-йыһаз күп булмаған, ғәҙәттә, һикенән генә торған. Халыҡтың зиһене һикелә лә үҙенә күрә рациональ яҡтарҙы тапҡан. Аҡһаҡалдар фекеренсә, һике бөгөлөп-һығылып тормай, шуға күрә унда йоҡлауы уңайлыраҡ - бил талмай. Быны балалар өсөн дә файҙалы тип иҫәпләгәндәр, сөнки умыртҡа бағанаһының кәкрәйеүенә юл ҡуйылмай.

Йәнә шул да иҫәпкә алынған: белеүебеҙсә, һалҡын һауа аҫтан иҙән буйлап йөрөй. Ә һикелә аяҡтарҙы бөкләп ултырғанлыҡтан, кеше табандан һыуыҡ тейеүҙән һаҡлана. Ашағанда был бигерәк тә файҙалы. Сөнки ашағанда тән йылына, һыуыҡ тейҙереү ҡурҡынысы арта.

Торлаҡтағы һауаны яҡшыртыу маҡсатында артыш ботағын, кейәү үләнен, мәтрүшкә төтәткәндәр. Себен булмаһын өсөн тәҙрәләргә пәрҙә элеп, торлаҡты ҡараңғылатҡандар. Ҡандаланы юҡ итеү маҡсатында торлаҡты аҡ әрем яндырып төтәткәндәр, унан йоҡлай торған урын тирәһенә әрем түшәгәндәр. Өйҙө аҡлағанда эзбизгә кәрәсин өҫтәлгән. Ҡандала нығ эйәләшкән урынға кәрәсин менән аш тоҙонан эшләнгән "бутҡа"ны һөрткәндәр. Уны әҙерләү өсөн бер стакан кәрәсингә бер стакан тоҙ алынған. Түбәндәге алым иғтибарға лайыҡ: йәйләүгә сығыр алдынан торлаҡтың бер мөйөшөнә ҡырмыҫҡа иләүе һалынған: йәйге осорҙа ҡырмыҫҡа ҡандалаларҙы ашап бөтөргән.

Йыландан һаҡланыу сараһы ла иғтибарға лайыҡ. Ҡыр-урманда ҡунырға тура килгәндә ятыр урынды уратып ҡамыт, йүгән, дилбегә һалынған. Аҡһаҡалдар һөйләүенсә, йылан ат тире еҫенән ҡаса һәм йоҡлаған кеше эргәһенә килмәй.

Башҡорт халҡында тән гигиенаһына ла иғтибар ҙур булған. Ашар алдынан ҡул йыуыу мотлаҡ һаналған. Һабынды үҙҙәре лә әҙерләгән, боҙолған туң майҙы ағас көлө һелтәһенә һалып ҡайнатҡандар. Һабын өсөн ҡарағас һәм уҫаҡ көлө һелтеһе яҡшыраҡ тип иҫәпләнгән.

Нигеҙҙә, ҡара мунса төҙөгәндәр. Аҡ мунсаға ҡарағанда, ҡара мунсала йыуынғанда һөрөм менән ағыуланыу ҡурҡынысы аҙыраҡ. Һирәк булһа ла, аҡ мунсалар ҙа төҙөлгән. Йәйләүҙәрҙә дөйөм йыуыныу өсөн кейеҙ менән ҡапланған ҡыуыштан файҙаланғандар. Йылға, күлдәрҙә һыу инеү ҙә ниндәйҙер кимәлдә тән гигиенаһын һаҡларға ярҙам иткән.

Ҡатын-ҡыҙҙар башты йыуыр өсөн йомшаҡ һыуҙан - ҡар йәки ямғыр һыуын файҙаланған. Сөнки йомшаҡ һыуҙы ҡулланғанда сәс яҡшыраҡ һәм ҡуйыраҡ булып үҫә, ҡысытыу, ҡауаҡлау һымаҡ күренештәр күҙәтелмәй.

Башты йыуыр өсөн һабын түгел, ә нигеҙҙә һелте, ҡатыҡ йәки ҡорот һыуы ҡулланылған. Уларҙан файҙаланыу ҙа сәсте таҙартыуға һәм сәс үҫеүгә ярҙам иткән. Һелтене шулай ҡулланғандар: сәс һәм сәс төбөн һелте менән яҡшылап сылатҡандар, шунан бер нисә тапҡыр һыу менән йыуғандар. Әсе ҡатыҡты файҙаланыуҙың үҙенсәлеге булған. Башта шулай уҡ сәс һәм сәс төбөнә ҡатыҡты һөрткәндәр, шунан 15-20 минутҡа башҡа яулыҡ бәйләгәндәр. Аҙаҡ баш тәүҙә йылымыс һыу менән йыуылған, аҡрынлап һыуҙың эҫелеге арттырыла барған. Ҡорот һыуын файҙаланыу ҙа ошоға оҡшаш булған. Ошондай тәрбиә һөҙөмтәһендә ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәсе оҙон һәм ҡуйы булып үҫкән. Улар сәс толомон үреп, башына яулыҡ бәйләй торған булған. Яулыҡһыҙ йөрөү тыйылған.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# МИН ДӘ МАҠАРҘА ТЫУҒАН БУЛЫР ИНЕМ...

**Ошо көндәрҙә миңә Ишембай районы Маҡар ауылында иҫ китмәле тәрән мәғәнәгә эйә булған бер сарала ҡатнашырға тура килде. Был ауылдағы байрамға барып эләгеүем осраҡлы түгел. Сөнки минең нәҫелем тамырҙары ошонда, Маҡарҙа. Гәрсә мин бында тыумаһам да, үҫмәһәм дә, мәктәбендә уҡымаһам да, миңә бик ҡәҙерле был донъяға Ҡарамышевтарҙы биргән яҡтар. Бик йөрәкһенеп, тулҡынланып йөрөп ҡайттым мин Маҡарҙан.**



Рәсми рәүештә сара 40-80-се йылдарҙа Маҡар, Ибрай, Иҫәкәй мәктәптәрендә эшләп, донъянан киткән уҡытыусыларҙы хәтергә алыу кисәһе тип аталды. Кисәне Мәрйәм Солтанова етәкселегендәге Маҡар ауылы ағинәйҙәре ойоштorғайны. Унда шулай уҡ Ҡолғона, Байғужа, Урманбишҡаҙаҡ, Смаҡай, Кинйәкәй ауылдары ағинәйҙәре лә ҡатнашты. Башта беҙ Маҡар ауылы мәҙәниәт йортонда асылған "Ағинәйҙәр бүлмәһе"н ҡараныҡ. Унан һуң Маҡар мәктәбе коллективы төҙөгән сценарий буйынса ойошторолған байрам башланды. Тап ошо кисә өсөн генә тәғәйенләп тегелгән өр-яңы байрам костюмдары үҙҙәре генә лә әллә күпме фиҙаҡәрлек, әҙерлек саралары хаҡында һөйләй. Ниһайәт, юғары профессиональ кимәлдәге "Маҡар ынйылары", "Селтербей" вокаль ансамблдәре, Маҡар уҡытыусылары триоһы, мәктәп хоры менән өҙлөкһөҙ репетициялар үткәреү, ситтән башҡарыусылар саҡырыу, башҡа ойоштороу мәшәҡәттәре һөҙөмтәһе - күҙ алдында: мәҙәниәт йорто халыҡ менән шығырым тулы...

Кисәне Маҡар мәктәбе уҡыусылары һәм уҡытыусыларының хоры асып ебәрҙе. Маҡар мәктәбенең элекке уҡытыусыһы Фуат Йомағужиндың Мәрйәм Солтанова эшкәртеүендәге йыры башҡарылды. Хор янына йәм өҫтөнә йәм өҫтәп, ҡеүәтле көс - кисәнең йәне, милли кейемдәге һоҡланғыс ағинәйҙәр сығып баҫты. Тап улар был сараның маҡсатын билдәләгән дә инде. Был донъяла йәшәп киткән арҙаҡлы шәхестәрҙе ололоҡлап хәтергә алыу, уларға сикһеҙ ихтирам күрһәтеү - был үҙе бер оло тәрбиә мәктәбе. Республика кимәлендә бүтән ерҙәрҙә лә ойошторолорға хаҡлы яңы башланғыс тип тә билдәләр инем мин был сараны.

Залда ултырған ябай тамашасы булараҡ, мин шуны күҙәттем: айырым кешеләрҙең яҙмыштары тотош илебеҙ тарихын һөйләй. Кисәне алып барыусы Әминә Ғилманова менән Гүзәл Абдуллина тарафынан сәхнәгә бер-бер артлы саҡырылған кешеләр, йәғни Маҡар мәктәбенең күренекле уҡытыусыларының балалары, туғандары, яҡындарының сығыштары үҙлегенән-үҙлеге тарихи бәйән рәүешен ала. Ул бәйән район тарихы, Башҡортостан тарихы тураһында ла булып сыға. Әйтәйек, бына сәхнәлә Маҡар мәктәбенең элекке уҡытыусыһы Фуат Йомағужиндың улы Фаяз (әйткәндәй, ул минең атайымдың исемен йөрөтә, ә минең ҡустым Фуат Йомағужиндың исемен йөрөткән булған. Фуат ағай менән атайым дуҫтар булған, улдарына бер-беренең исемдәрен ҡушҡандар). Фаяз был кисәлә тамашасы алдына Фуат Йомағужиндың яҡты образы булып сығып баҫа. Маҡар мәктәбендә уҡытҡан ирле-ҡатынлы Зөфәр һәм Әлфирә Ҡарамышевтарҙың ҡыҙы Зөлфирә иһә Маҡарҙа үҙе бер оло тарих биттәрен тәшкил иткән данлыҡлы Ҡарамышевтарҙы кәүҙәләндерҙе. Мине лә Зөфәр ағай менән нәҫелемдең аяныслы ла, ғорурланырлыҡ та тарихы бәйләй. Мин Маҡар мәктәбенә Зөфәр ағайҙың шәхси архивынан Маҡар мәктәбенә ҡағылышлы материалдарҙы бүләк иттем. Уның үҙ ҡулы менән яҙған китабының оҙаҡламай Мәрйәм апай Солтанова ярҙамы менән донъя күрәсәген хәбәр иттем. Был хәбәрҙе тотош зал алҡышлап ҡабул итте.

Был кисәлә сығыш яһаған кешеләрҙең тотош исемлеген бирергә мөмкин булыр ине, улар бик күп, һәм ул сығыштарҙың һәр береһе үҙе бер тарихи хикәйәт. Мин дә Маҡар халҡы алдына үҙемде күрһәтергә тип түгел, ә 30-сы йылдарҙа ғәйепһеҙгә ғәйепләнеп, Архангел крайының Холмогор лагерына ебәрелгән олатайым Шәңгәрәй, уның бер туған ағалары Бәхтегәрәй, Арыҫлангәрәй, Сәлимгәрәй, Сәйетгәрәйҙе иҫкә алып, маҡарҙарҙың иғтибарын тағы бер ҡат илебеҙ тарихына йүнәлтергә генә теләнем. Тарихтың ҡабатланыу ғәҙәте барлығын иҫкәрттем. Әгәр ҙә минең бабамдар ҡот оҫҡос фажиғәле замандарға тура килмәгән булһа, мин дә Маҡарҙа тыуған булыр, уның үҙ балаһы булған булыр инем. Хәҙер мин унда тик ҡунаҡ сифатында ғына...

Кисәне шул ҡәҙәр матурлаған талантлы һәүәҫкәрҙәрҙе телгә алып китмәй булдыра алмайым ."Таштүрә" йырын башҡарыусы Рәйлә Нәбиуллина, йыраусылар Сәғит Мөхәмәтйәнов менән Шәрифә Юлғотлина, "Берғамыт" бейеү ансамбленең "Өс таған" бейеүе халыҡты тамам арбаны ла ҡуйҙы. Мәрхүм Маҡар уҡытыусыларына арнап, Юлай хәҙрәт аят уҡыны, мәктәптә ҡөрьән ашы уҙғарҙылар. Тотош тәрбиә мәктәбе булған ағинәйҙәр хәрәкәте, Маҡар мәктәбе шундай ҙа ҙур әһәмиәткә эйә булған сара үткәргән икән, тимәк, улар ауылда шундайын бер ғәжәйеп мөхит булдыра алған. Баланы мөхит тәрбиәләй, ти яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева. Телде лә, рухты ла, изгелекте лә мөхит бирә. Ғаилә эшләп еткермәгәнде мөхит башҡара. "Атаһынан күргән уҡ юнған, әсәһенән күргән тун бескән" тип бушҡа ғына әйтмәгән бит халҡыбыҙ. Өлгө, үрнәк менән тәрбиәләү сараһы ла ул ағинәйҙәр хәрәкәте. Балалар ололарҙы ҡабатлай ғына. Имитациялай. Ошондай сараны ойошторған маҡарҙарға рәхмәттәр яуһын!

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА,**
**шағирә, Башҡортостан**
**Республикаһының атҡаҙанған**
**мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

# ИЛ ИНӘҺЕ БАРҘА...

**Беҙҙең Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылы, шөкөр, йылдан-йыл ҙурая, йәш ғаиләләр һаны арта. "Ауылы берҙең ҡәүеме бер" тиҙәр, ауылыбыҙҙа ана шул берҙәмлекте булдырыусы аҡыллы, намыҫлы, тоғро, хеҙмәт яратҡан кешеләр йәшәй.**

Беҙҙең яҡтарҙа һәр ауыл борон-борондан килгән, яҙылмаған бер тәртипкә буйһоноп йәшәй. Ошо тәртип 90-сы йылдарҙа бер аҙ йомшарып киткәйне. Халыҡтың үҙгәртеп ҡороуҙар шауҡымында, эшһеҙлектән, аҡсаһыҙлыҡтан күңеле төштө, йыуаныс эҙләп, шешә төбөнә сумыусылар ҙа булды. Ләкин халыҡ барыбер аңына килә хәҙер. Быға ауылыбыҙҙа гөрләп эшләп киткән йәмәғәт ойошмалары - ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар ҡорҙарының тәрбиәүи саралары ла ярҙам итте. Ауылдарыбыҙҙы үҙебеҙ һаҡламаһаҡ, балаларыбыҙҙы, үҙебеҙҙе үҙебеҙ тәрбиәләмәһәк, бөгөн берәү ҙә беҙҙең өсөн был эште башҡармаясаҡ. Яҡты киләсәк өсөн яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алырға ваҡыт. Бына ошо хаҡта аңғарта килә ауылыбыҙҙың әүҙем ағинәйҙәре, аҡһаҡалдары. Улар үткәргән сараларҙа бар ауыл халҡы ихлас ҡатнаша хәҙер. Йәштәребеҙҙең шул саралар уртаһында булыуы - үҙе бер ҡыуаныс.

Бына әле яңыраҡ ағинәйҙәр менән, балаларыбыҙ өләсәй һәм әсәйҙәребеҙҙең иң яҡшы сифаттарын үҙләштереп үҫһен, тигән маҡсат менән "Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар!" байрамы ойошторҙоҡ. "Ҡыҙҙар йыйнаҡ булһа, егеттәр тыйнаҡ була", "Ирҙе ир иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын", "Игендең уңғаны - ерҙән, ҡатындың уңғаны - ирҙән", ти халыҡ. Бөгөн беҙгә аҡыллы, егәрле ир-егеттәр һәм уңған, матур, тәртипле ҡыҙҙар үҫтергән әсәйҙәр кәрәк. Ил инәләренең, арҙаҡлы ирҙәребеҙҙең ошо юҫыҡтағы аҡыллы һүҙҙәрен үҙебеҙҙең "Үҙән" фольклор ансамбле сығыштары аша сәхнәнән тороп ишеттерәбеҙ. Йәштәр, балалар алдында йыр-моң, йола, мөнәжәт ярҙамында донъяла тик "яҡшылыҡ ҡына ҡала яҡшыларҙан, йөрәктәрҙә балҡып, яҡтырып..." тигәнде иҫбатларға тырышабыҙ. Клубҡа йөрөй алмаған ололарҙың өйҙәренә барып та сығыш яһап китәбеҙ. Илебеҙгә, ауылыбыҙға именлек, кешеләргә тәүфиҡ һорап, намаҙҙар уҡыйбыҙ, ҡорбандар салабыҙ. Тәрбиә эшен тик ғаиләгә генә ҡайтарып ҡалдырмайыҡ, иң тәүҙә ауылыбыҙҙа тәрбиәле мөхит булдырайыҡ, етәкселәрҙән генә ярҙам һорап ултырмай, атай-олатайҙар нигеҙ һалған һөнәрҙәрҙе, шөғөлдәрҙе тергеҙәйек, тип саҡырабыҙ. Һәр хәлдә, Зөлфиә Ханнанованың:

"...Ил, тип, доға ҡылыр
Ил инәһе барҙа,
Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!" тигән һүҙҙәренә беҙ күптән инанғанбыҙ.

**Миңзәлә ФӘТХУЛЛИНА.**

✓ ***Беҙҙең халыҡ тәбиғәткә яҡын торған. Шуға күрә һәр бер әйберҙең йәне бар тип уйлап, шуға табыныр булған. Зороастризм һундар килеүе менән юҡҡа сыҡһа ла, беҙҙең йолаларҙа һаҡланып килә ул.***



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ҺӨЛДӘЛӘРҘЕҢ ТЕЛЕ БУЛМАҺА ЛА...

## тарихҡа тел аҫҡысы улар



### Ҡайһы бер йолалар, йәғни "Ҡарға туйы" тураһында

Төрлө халыҡтарҙа мәйетте ерләү төрлөсә башҡарыла. Беҙҙә ләхет алыу бар. Пермь башҡорттарындағы ерләү йолаһын тикшереүҙәр мәғлүмәттәре буйынса, мәҫәлән, ләхет таҡтаһы өҫтөнә артыш, мәйет аҫтына туйыҙ йә аҡбур һалғандар. Бында мәйет менән мөмкин тиклем ерҙе бысратмаҫҡа тырышыуҙы аңларға була. Ислам динендә былар юҡ, унда кәфенгә уралған мәйетте ләхет эсендәге ергә шул килеш ҡиблаға ҡаратып һалалар.

Ләхет алыу башҡорттарҙа Ислам дине килгәнгә тиклем үк булған. Бында ла шулай уҡ ерҙе, тупраҡты мәйет ҡалдыҡтары менән бысратмау күҙ уңында тотолған. Боронғонан ҡалған йола буйынса, башҡорттарҙа ҡәбер өҫтөн таш йә ағас менән бурау әле һаман да һаҡланып ҡалған. Был йола бигерәк тә Пермь өлкәһендә йәшәүсе гәйнә ырыуы башҡорттарында һәм көньяҡ (Бөрйән, Йылайыр, Баймаҡ, Ейәнсура, Әбйәлил, Күгәрсен һәм башҡа райондар) башҡорттарҙа һаҡланған. Ләхет алыу, ҡәбер өҫтөн бүрәнә менән бурау боронғо сарматтарҙа ла булған. Зороастризм традициялары буйынса, мәйетте шул килеш ергә күмергә бөтөнләй ярамаған. Сөнки ул саҡта ер, һыу, ут, һауа иң изге төшөнсәләр һаналып, уларҙы бысратыу оло гонаһ һаналған. Тәүге осорҙа мәйетте яндырыу йолаһы булған, һунынан үлгән кешенең мәйетен ҡая-тау, ағас ботаҡтарына һалып, йыртҡыс ҡоштар, ваҡ йәнлектәр ашап бөтөүен көткәндәр. Ҡәбер өҫтөндәге бүрәнә бура ла шундай һәндерә ролен үтәгән. Буралар һаман да шул традиция нигеҙендә яһала, йәғни бүрәнәләрҙең араһында ҡош-ҡорт, сыскан-ҡомаҡтар, башҡа йәнлектәр инерлек ярыҡтар ҡалдырыла. Буралар бүре, төлкө һымаҡ йыртҡыс хайуандар мәйетте ситкә алып китмәһен өсөн дә ҡуйылған. Мәйеттән тороп ҡалған һөйәктәрҙе генә йыйып, таҙартып, аҙаҡтан шул урында ҡәбер ҡаҙып, ләхет эсенә һалғандар.

Ә инде бура эсендә яткан мәйетҡә ҡоҙғон, ҡарғас кеүек емтек ашаусы ҡоштарҙы ылыҡтырыу өсөн шул тирәләге ағас ботаҡтарына, махсус ҡоролмаларға ҡан, мәйет тәҫәндәге сепрәктәрэлер булғандар, бура өҫтөнә ит киҫәктәре лә һалғандар. Зороастризм осорондағы ошондай ерләү традицияһына бәйле "Ҡарға туйы", "Ҡарға бутҡаһы" байрамдары үткәреү башҡорттарҙа әле лә һаҡланып ҡалған. Әле ул йола буйынса ер ҡарҙан әрселгәс, тау итәктәренә сығып бутҡа бешереп ашайҙар ҙа, ашауҙан ҡалған бутҡаны шундағы асыҡ урындарға ҡалдырып китәләр, ағас ботаҡтарына төрлө төҫтәге сепрәк ярпылары тағалар.

Урынлы һорау тыуа: ни өсөн был байрам "Ҡарға туйы" тип атала һуң? Саҡтармәсәғүттәр заманында көньяҡ Уралда емтек ашаусы ҡоштарҙың батшаһы грифҡарғастар бик күпләп йәшәгән һәм уларҙы бура эсендәге мәйетте ашарға саҡырыуҙы ул замандағы беҙҙең ата-бабалар "Ҡарғас туйы" тип атаған да инде. Грифҡарғастар, биологтар әйтеүенсә, көньяҡ Башҡортостанда әле осрай. Бөгөнгө беҙ үткәргән "Ҡарға туйы", "Ҡарға бутҡаһы" байрамдары тап шул традицияның дауамы ғына. Әлбиттә, байрамдың нисек барлыҡҡа килеүе сәбәптәре, Ислам дине таралғас, бөтөнләй онотолған, уны шуға күрә лә яҙ килеүгә, ҡоштарға һыйланыу туйы үткәреүгә бәйләп кенә аңлаталар. Минең уйымса, элек ҡыш үлгән кешеләрҙең дә мәйетен ерләмәгәндәрҙер, уларҙы яҙға сыҡҡансы туңдырып һаҡлап, ҡоштарға, йәнлектәргә ашарға биргәндәрҙер. "Ҡарға туйы"ның яҙ үткәрелеүе лә был осраҡта аңлашыла төшә. Икенсенән, "ҡарға", тигәндән, хәҙерге башҡорттарҙың бер өлөшө шундай уҡ емтек ашаусы ҡоҙғонды ла ниңәлер ҡарға тип атай. Бында ла уйланырға урын бар.

Боронғоса ерләүгә бәйле һүҙҙәр беҙҙең телдә лә һаҡланып ҡалған. Доньялыҡ менән бәхилләшер алдынан иң яҡын кешеһенә ризалыҡты әле лә шундай итеп биреүселәр бар: "Мин һинә ризалығымды бирәм. Һөйәгемә лә һин етерһең инде..." Бында, әлбиттә, ошондай зороастризм дәүеренән килгән ерләү йолаһына бәйле аңлатма ята. Быны икенсе төрлө итеп әйткәндә: "Ҡарға туйы"мды һин үткәрәһең!" - тип тә аңларға була бит. Былар барыһы ла беҙҙең халыҡтың тарихының боронғоло тураһында һөйләй, сөнки зороастризм дәүеренә 3-4 мең йыл үткән.

Әлеге йола буйынса ла мәйет йыуыусыларҙы "һөйәккә инеүселәр" тип атайҙар. Ҡоҙғон ҡысҡырыуын хәүефкә, кемдеңдер үлеменә юрау ҙа юҡҡа түгел. Ошоларҙан сығып, ҡарғауҙың, ҡарғыштың, йәғни кешегә үлем теләүҙең нисек барлыҡҡа килеүен аңлатырға була.

### Дин - яулап алыу сәйәсәте

Һәр бер диндең теге йәки был халыҡҡа таралыуы, үтеп инеүе иң тәүҙә сәйәси маҡсаттарҙан сығып башҡарылғаны ла мәғлүм. Күп халыҡтар һуңғы диндәрҙе үҙҙәре уйлап сығармаған, уларҙы ерҙәрен, илдәрен баҫып алырға теләүселәр идеологик ҡорал итеп файҙаланып, башҡаларға көсләп менән индергән. Был йәһәттән донъя тарихы бик күп тәрә походтары булғанына шаһит.

Беҙҙең халыҡ тәбиғәткә яҡын торған. Шуға күрә һәр бер әйберҙең йәне бар тип уйлап, шуға табыныр булған. Динен дә тәбиғәткә ҡарата булған мөнәсәбәте йүнәлешендә үҙе уйлап сығарған. Зороастризм һундар килеүе менән юҡҡа сыҡһа ла, беҙҙең йолаларҙа, хатта Ислам дине йолаларында һаман да һаҡланып килә ул. Ислам динендәге башҡа мосолман өммәттәре араһында беҙҙең үҙенсәлекле булыуыбыҙ ҙа ана шул йолаларҙың һаҡланып ҡалыуына бәйле. Ислам дине Сыңғыҙ хандың ейәндәре Үзбәк һәм Йәнебәк хандар заманында ғына башҡорттар араһында әүҙем тарала башлаған. Ул иң баштан беҙҙә яулап алыу сәйәсәте генә булған, миненсә. Бер телдә һөйләшкән, бер дин тотҡан халыҡтарҙы бер ҡул аҫтында тотоу булған уларҙың төп маҡсаты. Сыңғыҙ хан тоҡомдары ул заманда ҡайны халыҡтарҙы үҙенә нығыраҡ буйһондора алған, Ислам дине лә уларға нығыраҡ һеңеп ҡалған. Минең уйымса, башҡорттар хатта Алтын Урҙа заманында Мөйтән бей башланғысы менән 1219 йылдан бирле Сыңғыҙ хандың үҙе менән килешеү төҙөй алған. Башҡорт иле шунан бирле Алтын Урҙа дәүләтендә вассаллыҡ шарттарында йәшәгән. Тарихтан белеүебеҙсә, Сыңғыҙ хан хатта яһаҡ түләү, ғәскәренә яугирҙар ебәреп тороу шарты менән килешеү төҙөргә мәжбүр булған. Башҡорттар был осорҙа ерен, кейемдәрен, йолаларын саф көйө һаҡлап ҡала алған. Шуға күрә лә, Ислам дине лә беҙгә ул заманда ныҡлап ҡағылмаған. Ислам дине бары Рәсәй батшалығы осоронда ғына беҙгә көсләп менән индерелә башлаған. Ауылдарҙа мәсеттәр һалынған, имамдар, хәлфәләр ебәрелгән. Беҙҙең халыҡ боронғо - тәбиғи динен үҙ асылында һаҡлап ҡала алған, милли үҙенсәлегебеҙ ҙә шуға бәйле. Ислам динен мин бик хуплайым, уның милләтте ойоштороу, кешене хаҡ йәшәргә өйрәтеү асылын таныйым. Шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙ һаман да үҙенең тәбиғи асылына тоғролоғон һаҡлай икән, бында Тәүдинебеҙҙең дә ролен танырға кәрәк. Был - булмышыбыҙҙағы боронғолоғобоҙҙо һаҡлай, яҡлай белеүҙән дә килә.

Миненсә, беҙҙең тел Исламға тиклем хәҙерге телдән айырмалы булған. Әммә Алтын Урҙа дәүләтендә, сығатай теленә оҡшағыраҡ уртаҡ төрки теле дәүләт теле иҫәпләнгән. Ваҡыт үтә килә, телебеҙ Ислам дине йоғонтоһонда үҙгәрештәр кисергән. Кемдәр Исламға бирелмәгән, Алтын Урҙа дәүләте осоронда улар тәүтелдәрен дә һаҡлай алған. Мәҫәлән, сыуаштарҙы ғына алайыҡ. Улар бөгөн дә боронғо төрки телендә һөйләшә. Шулай уҡ Ислам динен алмаған яҡуттар, алтайҙар боронғо төрки телен һаҡлаған. Ә инде башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк һәм башҡа халыҡтарҙың уртаҡ төрки теленең диалекттарында һөйләшеүе Ислам дине йоғонтоһонан килә.

**Ринат ЙОСОПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

**(Аҙағы. Башы 46-47-се һандарҙа).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Күренекле ғәрәп географы Мөхәммәт әл-Иҙриси көнсығыш Европа - Ҡара диңгеҙ буйы территорияһында, Днепр һәм Дон буйы далаларында Ҡуман иле булыуы хаҡында яҙып ҡалдырған, был урынды урыҫ йылъяҙмасылары "Һары ҡыпсаҡтар яланы" ("Половецкое поле") тип атай, ҡумандар менән һары ҡыпсаҡтар (половецтар) бер үк халыҡты аңлатҡан. Билдәле булыуынса, "половец" һүҙе "һары" (блондин) тигәнде аңлата, төркисәгә "коба" тип тәржемә ителә. Ғалимдар Ғ.Ғ. Аҫылғужин, Т. М. Сабитов, Т.А. Һибәтуллина, Ю. М. Йосопов "кубан" этнонимы "ҡоман"ға әйләнгән тип иҫәпләй һәм үҙҙәренең хеҙмәттәрендә Ҡыбау (Ҡоман) ырыуына ҡараған бер нисә ауылда һаман да ошо ырыуға ҡараған башҡорттар йәшә-үе хаҡында яҙа.

Боҙло океандан алып Ока йылғаһына һәм Витебск, Полоцк ҡалаларына тиклем Рәсәйҙең төньяғында һәм урта өлөшөндә осраған урыҫтарға тиклемге барлыҡ ерһыу атамалары уғыр сығышлы. Быны Д. Европеус та иҫбатлай: уғырҙар борон-борондан хәҙерге Рәсәйҙең тотош төньяҡ өлөшөндә, Дон йылғаһы башынан алып Боҙло диңгеҙгә (океанға) тиклем, Висла йылғаһы һәм Балтик диңгеҙенән алып Уралғаса һәм артабан көнсығышҡа табан һуҙылған майҙанда йәшәгән. Дөйөм алғанда, уғырҙар Евразия территорияһында Уралдың төньяҡ-көнсығышында көн күргән остяктарҙы (истәктәр), вогулдарҙы, мансиларҙы, самоедтарҙың бер өлөшөн һәм башҡа халыҡтарҙы тәшкил иткән. Уларҙың составында мариҙарҙың, мордваларҙың, удмурттарҙың, мишәрҙәрҙең ата-бабалары ла булған. Юғарыла һанап үтелгән боронғо ҡәбиләләрҙең тамырҙары уғырҙарға барып ялғана, улар араһында һуңынан башҡорт булып киткән башуғырҙар төп урынды биләй. Был халыҡтарҙың уртаҡ аралашыу теле булмауының уларҙың араһындағы уртаҡлыҡҡа ҡамасау түгеллеген Л.Н. Гумилевтың һүҙҙәре менән дә дәлилләп булалыр: әгәр ҙә халыҡтар бергә йәшәмәйенсә лә, улар араһында уртаҡ һыҙаттар, оҡшашлыҡ бар һәм улар төрлө телдә һөйләшә икән, яҙма телдәре булмаған халыҡтарҙың телдәре тиҙ һәм йыш үҙгәргән. Был күренеш бер үк халыҡтың төрлө һөйләштәрендә йыш осрай. Мәҫәлән, Дағстанда утыҙҙан ашыу тел бар.

XII быуаттың 50-се йыл урталарында бәшәнәк-үҙәй урҙаһын Башҡорт хан аймағы (ҡыпсаҡ-һары ҡыпсаҡ (половец)-ҡоман) тип атап йөрөткәндәр. Уралдағы төп уғыр ҡәбиләләре данлыҡлы Башҡорт хан хөрмәтенә башҡорт атамаһы ала. Улар: "тау башҡорттары" тип аталып йөрөтөлгән Уралтауҙа йәшәүсе башҡорттар. Дон һәм Волга буйында йәшәүсе Туҡһаба ҡәбиләләре, Дәште Ҡыпсаҡтың көнбайышында көн итеүсе ҡомандар, ҡомандарға ҡушылыусы көнбайыш ҡыпсаҡтар - үҙәй-төркиҙәр, бәшәнәк-һары ҡыпсаҡ (половец) ҡәбиләләре, ҡомандар (ҡобау) - ошо халыҡтар һәм ырыу-ҡәбиләләр бер берәмеккә ойошоп, конфедерацияны барлыҡҡа килтерә. Улар Башҡорт хан менән тыуҙы бәйләнештә генә тормаған, күбеһе туранан-тура Башҡорт хандың йоғонтоһонда булған.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Сәсәнлекте үҫтерергә тырышыусылар иң тәүҙә уның тәбиғәтен дөрөҫ күҙ алдына килтерергә тейеш. Ә был иһә башҡаларҙың ижад емештәрен ятлап, уларҙы юғары кимәлдә башҡарыусынан ысын сәсәнде айырырға ярҙам итәсәк.***

# СӘСӘНЛЕК - ЭПОС ЙӘКИ

## сәсәнлек - ул булмыш,

**Гәзитебеҙҙең 45-се һанында сәсәндәр хаҡында бәхәс ҡоро баҫылғандан һуң, үҙ фекерен белдереп шылтыратыусылар күп булды. Әлбиттә, "Ҡобайыр, эпос башҡарыусыларҙы "сәсән" тигән оло исем менән атап буламы?" тигән сығышыбыҙҙағы фекерҙәрҙе кемдер ҡабул итте, кемдер кире ҡаҡты. Шулай булырға тейеш тә, сөнки бәхәс булмаһа, хәҡиҡәт бит күңелдә ойотҡо булып ҡына йөрөүсән. Һәм беҙ, бәхәсте дауам итеп, ошо темаға түңәрәк ҡор ойошторҙоҡ. Һөйләшеүҙә этнограф Зәкирйән ӘМИНЕВ, яҙыусылар Әхмәр ҮТӘБАЙ, Мәүлит ЯМАЛЕТДИН, БР Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағындағы Сәсәндәр үҙәге етәксеһе Нәфисә ТУЛЫБАЕВА ҡатнашты.**

**Беҙҙә сәсәнлек мәктәбен башлыса "Урал батыр" эпосын һөйләүселәргә ҡайтарып ҡалдыралар. Шуға ла һөйләшеүебеҙҙе халҡыбыҙҙың ошо бөйөк ҡомартҡыһы, уның донъя алдында тотҡан урыны йәки тәғәйенләнеше хаҡындағы һүҙҙән башлайыҡ әле...**

**М. Ямалетдинов:** Урал батыр" эпосы башҡортто халыҡ-ара аренаға алып сыҡҡан мәшһүр мәҙәни ҡомартҡыбыҙ. Ул беҙҙе милләт юғарылығында тотоп тороусы бөйөк әҫәр. Шул уҡ ваҡытта, унда һалынған идеяларҙың, темаларҙың гуманистик рухы донъя халыҡтары эпостары менән ауаздаш. Ҡайһы бер миф мотивтарының уртаҡлығы, беренсенән, боронғолоғобоҙҙо күрһәтһә, икенсенән, милләтебеҙҙең бөтә кешелек донъяһы цивилизацияһының айырылғыһыҙ бер өлөшө икәнен раҫлай. Ҡөрьәндә лә бит: "Халыҡтарҙың тарихын юллап төпкә төшкән һайын, уларҙың бер тамырға барып тоташҡаны асығыраҡ күренә", - тиелә.

"Урал батыр"ҙы тәүләп уҡығаным бөгөнгөләй хәтеремдә. 1968 йылдың август аҙаҡтарында мин, Баймаҡ ҡалаһына эшкә ебәрелгән йәш белгес, уҡыуҙар башланғанын көтөп, ҡайҙа һуғылырға белмәй йөрөгәндә, китапханаға инеп "Ағиҙел" журналының 8-се һанын һорап алдым. Ә унда "Урал батыр" эпосы тулыһынса баҫылғайны. Уны уҡып әҫәрләнгәнем, һоҡланыу ҡатыш ғорурлыҡ тойғолары кисергәндәрем һаман иҫтә. Тик уларҙы хәҙер ҡәҙимге, ябай һүҙҙәр менән генә аңлата алмам кеүек. Ҡыҫҡаһы, мин ул көндә ергә яңынан тыуғандай хис иттем үҙемде - йыһан ярып ҡысҡырғым, кемдәндер һөйөнсө һорағым килде, күңелем тулды. Шул ваҡыттан алып был эпос миңә тормошта һәм ижадта юл күрһәтеүсе рухи компас һымаҡ.

"Урал батыр" эпосын популярлаштырыу буйынса ҙур эштәр алып барыла беҙҙә. Бигерәк тә уны яттан һөйләүсе уҡыусы балалар араһында йыл һайын республика конкурсы үткәрелеүе һөйөндөрә. Әммә беҙ тик бер генә эпосҡа иғтибарҙы туплап, үҙебеҙҙе сикләмәйбеҙме, ярлыландырмайбыҙмы? Конкурстың атамаһын шул килеш ҡалдырған хәлдә лә, теләк буйынса башҡа эпостарыбыҙҙы ятлаусыларға ла юл асылһа, был тик файҙаға ғына булыр ине һымаҡ. Ҡайһы бер эпостарыбыҙ ижади фантазияны үҫтереү йәһәтенән дә бик яйлы һәм отошло бит. Мәҫәлән, "Ҡара юрға", "Ҡуңыр буға" һ. б. Улар, әйтерһең, театрлаштырылған тамаша өсөн ижад ителгән.

**Н. Тулыбаева:** Халҡыбыҙҙың боронғо ҡомартҡыһы, ауыҙ-тел ижадының гүзәл өлгөһө - "Урал батыр" эпосы, мәңге һайыҡмаҫ шишмә һымаҡ, яңынан-яңы серҙәрен аса. Ғалимдар уны төрлө яҡлап тикшереп, ғилми хеҙмәттәр ижад итә. Ысынлап та, уны фольклор нигеҙендә лә, астрономия, космогония, һандар темаһы аша ла, философия, география, архетиптар һәм символдар, шартлылыҡ һ.б. өлкә һәм билдәләнештәр аша ла өйрәнеп, ниндәйҙер яңылыҡ табыусылар бар.

Салауат Ғәлләмов "Урал батыр" эпосының боронғолоғо тураһында яҙып сығып, шуның менән ғалимдарҙың иғтибарын был бөйөк әҫәргә яңынан йәлеп итте, тиергә була. Быларҙан тыш, әле киләсәктә лә был эпосты икенсе, беҙ әлегәсә белмәгән яҡтарынан асырҙар әле, тип уйлайым. Эпостың асылмаған серҙәре бик күп әле.

**Ә. Үтәбай:** Был эпос халҡыбыҙҙың борондан килгән хәтерен йәшәтеүсе код. Ул үҙенең эсенә донъяның, ер һәм күктең, ундағы тормоштоң барлыҡҡа килеүен, уларҙың тәүбашланғыста ниндәй фәлсәфәгә таянып көн итеүен, был донъяла ниндәй көстәр хөкөм һөрөүе һәм мәңгелек айҡашыуы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе һаҡлай. Уның нисә мең йылдар аша юғалмай һаҡланып килеүе лә ябай тарих түгел бит. Телдән тапшырылып килгән әҫәр, тиеү менән генә сикләнмәҫ инем был тәңгәлдә. Ул ҡарһүҙ йәки эпос кимәленә генә һыйып етмәй. Бәлки, киләсәктә был исем аша мөһимерәк серҙәр асылыр.

**З. Әминев:** "Урал батыр" эпосы әле христиан, ислам диндәре бөтөнләй булмаған ваҡытта, беҙҙең эраға тиклем үк барлыҡҡа килгән әҫәр, бының сәбәбе башҡорттоң халыҡ булараҡ шул дәүерҙә формалашыуылыр. Сөнки төрлө ырыуҙар башҡорт атамаһын ҡабул итеп йәшәп китеү өсөн уға берҙәм идеология, берҙәм донъяуи ҡараштар кәрәк булған. Милли үҙаңы формалашып, берҙәм атамаһы нығынмайынса, халыҡты ойошоп бөткән, тип атап булмай. Был фәнни аксиома. Башҡортто иһә бик боронғо дәүерҙәрҙән үк башҡорт атамаһы менән беләләр. Урал батыр эпосы ана шул берҙәм идеологияны һынландырған әҫәр. Бүтән төрки халыҡтарының береһендә лә ундай боронғо әҫәр юҡ, сөнки улар барыһы ла һуңыраҡ барлыҡҡа килгән. Донъя кем тарафынан, ҡасан, нисек, нимәнән барлыҡҡа килтерелгән, тигән һорауҙарға яуап эҙләүҙән тыуған, йәғни Урал батыр кеүек космогоник эстәлекле әҫәрҙәр был донъяла бигүк күп түгел. Эпостың фәлсәфәһен герменевтика, семантика һәм башҡа ысулдарҙы ҡулланып, эстәлеген аңлатып, ныҡлап өйрәнергә ваҡыт. Бына мәҫәлән, Йәнбикә менән Йәнбирҙе исемен беҙ "йән", йәғни урыҫса әйткәндә "душа" мәғәнәһенән сығып аңлатабыҙ. Был да дөрөҫ кеүек. Әммә, башҡортто формалаштырыуҙа төрки телле ырыуҙарҙан тыш, элегәрәк Урал киңлекттәрендә көн иткән һинд-иран телле бик боронғо ырыуҙарҙың ҡатнашҡанын иҫтә тотһаҡ, Йән һүҙенең мәғәнәһе тағын да тәрәнерәк асыла. Һинд-иран (йәғни арий) телдәрендә йән тоҡом, үрсем биреүсе тигәнерәк мәғәнәлә ҡулланылған. Йәғни, Йәнбирҙе менән Йәнбикә тоҡомдо башлаусылар. Уларҙан тыуған Урал менән Шүлгән - яҡшылыҡты (изгелекте) һәм яуызлыҡты һынландырыусы - ике көс. Йәғни, был ике көстө лә йән биреүселәр - кешеләр тыуҙырған. Йәғни, донъялағы изгелек тә, яуызлыҡ та бары кешенән генә тыуа, был әле лә шулай. Ә донъялағы бүтән заттар донъяны төҙөүҙәге ярҙамсы образдар. Бында барыһы ла образлы, шартлы ҡулланылышта.

**Гәзиттә "Ҡобайыр, эпос башҡарыусыларҙы "сәсән" тигән оло исем менән атап буламы?" тигән мәҡәлә донъя күргәндән һуң "сәсән" исеменә инде өйрәнеп киткән ҡайһы бер апайҙар, инәйҙәр үпкә белдерҙе. Тимәк, беҙ был өлкәлә баштан уҡ ниндәйҙер хата ебәргәнбеҙ, шулаймы? Һәм бармы беҙҙә бөгөн ысын сәсәндәр?**

**М. Ямалетдинов:** Уны "хаталар" тигәнгә ҡарағанда, "етешһеҙлектәр" тип атау урынлыраҡ булыр ине. Ә был етешһеҙлектәр сәсәнлектең хосусиәтен, ғөмүмән, сәсән тигән юғары исемдең мәғәнәһен белеп бөтмәүҙән килә, минеңсә. Был һүҙҙең айышына мин боронғо Ҡытай шиғриәтен үҙ аллы өйрәнгән саҡта төшөндөм. Баҡтиһәң, "шижень" тип боронғо Ҡытайҙа үҙҙәре әҫәр ижад итеп, үҙҙәре шуны көйгә һалып, үҙҙәре үк шуны башҡарыусыларҙы атағандар икән. Бында беҙ сәсәнлекте барлыҡҡа килтереүсе өс башланғысты күрәбеҙ: беренсеһе - шағирлыҡ, икенсеһе - композиторлыҡ, өсөнсөһө - йыраусы әртислек. Төрки ырыу-ҡәбиләләре әлмисаҡтан боронғо Ҡытай батшалыҡтары менән рухи-мәҙәни өлкәлә бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә йәшәһә лә, "сәсән" төшөнсәһе бары тик башҡорт халҡында һаҡланып ҡалған. Был үҙе үк ғәжәйеп бер күренеш. Асылда, әүәлге башҡорт сәсәндәре үҙҙәрендә әлеге өс башланғысты берләштереүсе заттар булған. Сәсәнлектең классик миҫалы - Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев. Уның ҡобайырҙар, эпостар, йыр текстары ижад итеүе лә, көй сығарыусы оҫта ҡурайсы-музыкант булыуы ла, уларҙы башҡарыусы йыраусы булыуы ла тарихта мәғлүм. Ошо яҡтан ҡарағанда, сәсән үҙенең йәмғиәттә тотҡан урыны һәм роле буйынса ҡоро шағирҙан күпкә юғары тороусы шәхес булараҡ күҙаллана. **Тимәк, сәсәнлекте үҫтерергә тырышыусылар иң тәүҙә уның тәбиғәтен дөрөҫ күҙ алдына килтерергә тейеш. Ә был иһә башҡаларҙың ижад емештәрен ятлап, уларҙы юғары кимәлдә башҡарыусынан ысын сәсәнде айырырға ярҙам итәсәк.**

**Н. Тулыбаева:** Беҙҙең яҡта онотолоп ҡобайыр йә эпос һөйләй белгәндәрҙе "әүлиә" тип йөрөткәндәр. Минең уйымса, уларҙың донъялағы тәғәйенләнеше лә бөтөнләй икенсе төрлө. Был әүлиәләр тел ҡомартҡыларын һөйләгән генә түгел, дауалаған, имләгән, тағы ла ниндәйҙер көстәргә эйә булған. Улар бит белгәндәрен дә "Һеҙгә тапшырам" тип һөйләгән. Кемдән алып тапшыралыр, уныһы асыҡланмаған. Хатта бөгөн дә күрәҙәлектә бик көслө булған кешеләр бар. Былар бит шулай уҡ мөғжизә. Мин уларҙың феноменын аңламайым, әммә ҡайҙандыр, нимәлер менән бәйләнеше булғандарҙың барлығын да инҡар итә алмайым. Шунлыҡтан, минең фекер шундай: беҙҙә ҡырғыҙ сәсәне йәки Ғәбит сәсән кеүек трансҡа инеп, эпос



✔ ***Шағирҙар конференцияларында осрашҡанда, Рәшит ағай Әхтәри йәштәргә төндәр буйына туҡтамайынса шиғри телмәрҙә тарихтар һөйләр ине. Бер фекере лә ҡабатланманы һәм ул нимәнелер хәтерләп алыуға бүленеп туҡтаманы.***









# ҠОБАЙЫР ҺӨЙЛӘҮСЕ ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## ул - халыҡтың теле

һөйләр сәсәндәр юҡҡа сыҡҡан һәм уларҙың киләсәктә булыуы ла бик икеле. Әммә улар юҡҡа сыҡҡан тип ҡул ҡаушырып ултыра алмайбыҙ, беҙ был өлкәне заманса мәктәп менән тергеҙәбеҙ. Шундай рухи байлығыбыҙҙы юғалтыр хәлебеҙ юҡ.

Бөгөнгө беҙ сәсән тип атаған категория ул ҡобайыр-эпос-бәйеттәрҙе бер быуындан икенсеһенә тапшырыусы ролен үтәй. Беҙ уларҙы ла иғтибарһыҙ ҡалдыра алмайбыҙ. Был үҙе үк манҡортлоҡ буласаҡ. Уйлап ҡараһаң, цивилизацияның емерткес көсө аҫтында хатта шул ҡобайыр-эпос-бәйеттәрҙе тапшырыр сәсәндәребеҙ ҙә юҡҡа сыҡты бит, ә һеҙ Ғәбит сәсән кимәлен һөйләйһегеҙ.

**З. Әминев:** Бөтә нәмә лә ихтыяждан тыуа. Беҙҙәге һуңғы ысын сәсәндәр Ғәбит менән Хәмит сәсән булған. Ә ниңә хәҙер ундайҙар юҡ, тип, миңә лә һорау биргәндәре булды. Минең уйымса, ундайҙар бөгөн дә беҙҙең арала барҙыр ул, тик беҙ уларҙы күрә генә белмәйбеҙҙер. Сөнки боронғо сәсәндәр менән күсәгилешлек, бәйләнештәр өҙөлгән. Яҙма әҙәбиәт формалашҡан һәм сәсәнлек тә әкренләп кенә юҡҡа сыҡҡан. Сәсән бит ул ҡәҙимге кеше түгел, ундай кешеләр ҡапыл ҡарауға сәйерерәк тә күренгән. Боронғо сәсәндәр, минеңсә, тик ҡобайыр ғына һөйләп йөрөмәгән, улар шулай уҡ халыҡ йолаларын, дауалау ысулдарын да белгән, сөнки улар бит халыҡ аҡылын үҙҙәрендә туплап, киләсәк быуынға тапшырыусылар булған. Төрлө кирәмәттәрҙе аңғарып, уларҙы халыҡҡа аңлатыусылар ҙа шулар булған. Ошо аҡылдары, белемдәре менән халыҡ араһында ихтирам яулағандар. Бала саҡта, алтмышынсы йылдарҙа, Баймаҡта беҙҙең урамдағы таныштарына Шәйшәриф диуана килеп йөрөй торғайны. Осло кәпәс кейеп, ҙур муҡсай йөкмәп, яурыны аша уратып арҡан бауы аҫып йөрөр ине. Үҙ алдына әллә ниҙәр мығырлап һөйләп, муҡсайына таш тултырып, шуларҙы тирә-яғына ташлап барыр ине. Атайым ҡаты реалист булһа ла, шул диуана менән һөйләшеп ултырырға ярата торғайны. Мин бер саҡ Шәйшәриф олатай тураһында "Алйот" тип әйтеп ысҡындырҙым һәм атайым мине һыҙырып әрләп ташланы. "Ул белгәнде һеҙ белмәйһегеҙ әле, асылын аңламай тороп, бер ваҡытта ла ундай һүҙ һөйләмә", - тине асыуланып. Һикһәненсе йылдар башында, Баймаҡ автокзалында автобус көтөп ултырһам, яныма шул диуана килеп ултырҙы. Мығырлап, нимәләрҙер һөйләп ултыра теге. Ирекһеҙҙән, телмәре ҡолағыма килеп салынғайны, аптырап киттем - Хафиз, Руми, Ғүмәр Хәйәм робағиҙарын һөйләп ултыра бабай. Әҙ-мәҙ булһа ла әлеге шәхестәрҙең ижадын белгәс, ҡасандыр мин алйот тигән бабай ауыҙынан робағиҙар ишетеүгә иҫем китте. Мин тегегә хәбәр ҡушып, бер аҙ һөйләшеп ултырҙыҡ. Уның донъя тураһындағы фәлсәфәләре һаман хәтеремдә. Был кеше, баҡтиһәң, беҙҙең яҡтың һуңғы суфый дәрүише булған. Тик шуныһы үкенесле, Шәйшәриф олатайға коммунизмға табан елдереп китеп барыусылар тарафынан иғтибар итеүсе булманы. Бөтә белгәндәрен ул үҙе менән алып китте... Нимә әйтергә теләйем: был кешеләр сәсән булмаһалар ҙа, уларҙың теленә лә был донъялыҡтың ниндәйҙер фәлсәфәһе һалынған булған бит. Уларға беҙгә, ябай кешеләргә, аңлашылмаған нәмәләр билдәле булған.

Быларҙы аңлар өсөн беҙ башҡорттоң Донъя моделе (Ҡоролошо) тигән төшөнсәне гел күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Был Модель, йәғни Ҡоролош буйынса, һәр халыҡтың үҙ элитаһы була. Элитаһыҙ халыҡ булмай. Элитаһы юҡ ителгән халыҡ бөтөүгә ҡарай тәгәрәй. Элитаға рухани (йәғни идеологияны етәкләүсе) ҡатлам, хәрбиҙәр, етәкселәр ингән. Ун һигеҙенсе быуатта бер туҡтауһыҙ баш күтәргән башҡорттарҙы ауыҙлыҡлай алмағас, батша власының башҡорттарҙы юҡ итеүгә ҡоролған махсус программаһы ҡабул ителә. Шул йүнәлештә иң тәүҙә халыҡ идеологияһын яҡшы аңлаған, уны тоя, тотоп ала белгән сәсән кеүек рухани ҡатламды юҡ итеү башлана. Сөнки улар аҡылында тормошта дөрөҫ йәшәү принциптары, "Урал батыр"ҙағы кеүек, рух азатлығын табыу сере ятҡанын властар ҙа яҡшы аңлаған. Унан һуң килгән әҙәбиәт һәм шул уҡ властар күҙәтеүе аҫтындағы белем сәсәндәр ижадын, сәсәндәргә ихтыяжды ябып ҡуйған да инде. Былар барыһы ла ана шул сикләү, халыҡтың аңын томалау юлдары. Шулай итеп, беҙҙең башҡорттоң Донъя моделе ҡыйратыла. Беҙ һаман шул Донъяны үҙебеҙ аңлағанса, үҙебеҙ теләгәнсә тергеҙә алмайынса йонсойбоҙ...

**Ә. Үтәбай:** Сәсәнлек - сәнғәт түгел, ә булмыш. Сәсән - ул халыҡтың теле. Тимәк, сәсән эпос йәки ҡобайыр һөйләүсе генә түгел. Ул халыҡҡа ниндәйҙер йөкмәтке йәки миссия менән килгән. Уйлай китһәң, Мөхәммәт, Ғайса бәйғәмбәрҙәр ҙә шул уҡ ролде үтәгән. Беҙҙең Байыҡ сәсән кеүектәрҙең, Салауат батыр һымаҡтарҙың да үҙ миссияһы, халыҡ хәтерендә ҡалырлыҡ эше һәм һүҙе булған.

Тағы ла бер нәмәгә иғтибар итәйек. Сәхнәгә сығып, кемдеңдер шиғырын башҡарған кешене беҙ "шағир" тимәйбеҙ, ә "башҡарыусы" тибеҙ. Шуның кеүек, халыҡ ижадын башҡарыусыларҙы ла үҙ атамаһы менән атарға кәрәк. Ул хатта "Урал батыр" эпосын башҡорт, урыҫ, инглиз телдәрендә ятҡа һөйләй алған тәҡдирҙә лә. Бында Мәүлит ағайҙың шағирлыҡ, композиторлыҡ, башҡарыу һәләте тигән өс берәмек берлеген хуплайым.

Сәсәнлек сәрпәкләнгән, тигән фекер ҙә йәшәй. Мин бының менән килешәм. Бөгөн ул шул уҡ йырға ла, бейеүгә лә, фольклорға ла, көйҙәргә лә, һынлы сәнғәткә лә әйләнеп ваҡланып киткән. "Байыҡ" бейеүе элек сәғәттәргә һуҙылған бейеү булған, уның аша ла сәсәнлек бирелгән, минеңсә. Беҙ сәсәнде думбыра тотоп йырлаусы итеп кенә күҙ алдына килтереп өйрәнгәнбеҙ. Әлбиттә, был уның экзотик формаһы. Шунлыҡтан, бында йөкмәтке һәм форма тирәһендә уйланаһы уйҙар күп әле...

▶ **Республикала юғалып барған сәсәнлекте яңынан тергеҙеп, уның мәктәбен башлап ебәреүселәр, әлбиттә, изге ниәт менән тотонған был эшкә. Әммә улар тегеһен-быныһынан айырып тормаған. Кеше ҡобайыр һөйләй, эпосты яттан белә, йырлай ҙа икән, тимәк, ул - сәсән, тигән дә ҡуйғандар. Бөгөн беҙ бының яңылыш икәнен аңлайбыҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, был юҫыҡта дөрөҫ йүнәлеш алыр өсөн ни эшләргә тейешбеҙ?**

**М. Ямалетдинов:** Иң тәүҙә балалар һәм үҫмерҙәр араһынан туған телгә битараф булмағандарҙы, әҙәби ижадҡа әүәҫтәрҙе эҙләп табып, улар менән айырым шөғөлләнеүҙән башларға тейешбеҙҙер. Уларҙың һәр сәнғәт төрөнә һәләтле булыуы ла бик мөһим. Әлегеләрҙе сәсәнлек серҙәренә үҙе сәсән булған, һис юғы, ауыҙ-тел ижадын биш бармағы кеүек белгән тәжрибәле кешеләр өйрәтергә тейеш, әлбиттә. Йәғни, профессиональ нигеҙҙә, тип әйтмәксемен. Бының өсөн йәмғиәтебеҙҙең сәсәнлек традицияларын тергеҙеүгә һәм үҫтереүгә ҡыҙыҡһыныулы ынтылышы булыуы шарт. Ҡырғыҙстандағы һәм Ҡаҙағстандағы кеүек. Ҡаҙаҡтарҙа, мәҫәлән, үҙҙәре әйтмешләй, "суырып салмалы аҡындар"ҙы (әйтешкерҙәрҙе) асыҡлау һәм тәрбиәләү мәктәп эскәмйәһенән башланып, урта һәм юғары махсус уҡыу йорттарында дауам итә. Уларҙа йыш ҡына ойошторолған әйтештәрҙең популярлығы түбәндәге миҫалдарҙа асыҡ күренә: еңеүсегә төп приз ҡаҙаҡ аҡсаһы менән бер нисә миллион тәңкә тәшкил итә. Шуныһы айырым иғтибарға лайыҡ: аҡындар әйтешендә юғары урындарҙа эшләгән вазифалы кешеләр мотлаҡ булырға тырыша икән. Ҡыҙыҡһыныуҙың сәбәбе - күҙ алдында тыуған импровизацион характерҙағы ҡанатлы һүҙҙәрҙе, афоризм булырҙай мәргән юлдарҙы, социаль сатира өлгөләрен яҙып алып, уларҙы кәрәк урында ҡулланыу. Ни тиһәң дә, сәсәндәр, аҡындар элек-электән халыҡтың теле, йәғни, замандың үҙенсәлекле барометрҙары ролен башҡарған. Киләсәктә беҙҙә лә эш дөрөҫ ойошторолһа, ихтимал, яңы ижади көстәр үҫеп сығыр һәм беҙ сәсәнде икенсе шөғөл кешеһе менән бутамаҫҡа өйрәнербеҙ.

**Ә. Үтәбай:** Заманында ырыуҙар тарихы өйрәнелә, халыҡ үҙ ырыуҙарын белеп, шәжәрәләрен таба башлағас, ҡасандыр ырыуҙар булыуҙан туҡтап, инде халыҡ булып формалашҡас ниңә уларҙы кире айырып маташырға, тип ҡаршы төшкән, был күренеште трайбализм тип атаған ғалимдар ҙа булғайны. Әммә ырыуыңды белеү беҙгә шәжәрәңде, нәҫел тарихыңды өйрәнеү кимәлендәге генә сара булды. Трайбализм күренеше күҙәтелмәне. Был мөмкин дә түгел ине. Сөнки инде күптән тыуып, үҫеп етеп, инде ир ҡорона ингән кешене кире әсәһенең ҡарынында йәшәтеү мөмкин түгел. Шуның кеүек, сәсәнлек тә йыр, бейеү, шиғыр һәм башҡа сәнғәт төрҙәренә сәрпәкләнеп бөткәс, уны бөгөн кире элекке халәтенә ҡайтарам, тип, башҡа сәнғәт төрҙәрен юғалтырғамы, тигән һорау ҙа үҙенән-үҙе тыуа. Әммә ырыуҙар хаҡындағы фекерҙә лә, бында ла боронғолоҡтоң нисек булыуын, башланғысын, тамырҙарҙың ҡайҙан үҫеп сығыуын аңлау фарыҙ. Тап ана шул нигеҙҙе аңламау артабанғы хаталарҙы тыуҙыра ла инде. Был күҙлектән ҡарағанда, элекке рәүешендәге сәсәнлекте тергеҙеү мөмкин булмағаны ла көн кеүек асыҡ.

Кеше шағир булырға, әммә сәсән булмауы ла мөмкин. Һин том-том китаптар ижад ит тә, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап, ниндәйҙер системаға ҡаршы бармайһың, уның идеялары өсөн көрәшмәйһең икән, һиндә сәсәнлек юҡ. Ниндәй партия ҡоршауҙары эсендә йәшәгән һәм шунда ла "Батшаларға башын эймәгәнде, башҡаларға башҡорт баш эймәҫ" тип әйткән Рәми Ғарипов, "Илендә илен һағынған" Рауил Бикбаев, "Уятығыҙ Уралды" тигән Ринат Хәйри - сәсән, мәҫәлән. Әлбиттә, шуға яҡын сәсән фекерле Ҡолдәүләт, Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла, әле Салауат Әбүзәрҙәр бар. Тағы ла бер кешене телгә алып үтке килә, беҙ йәш саҡта Рәшит ағай Әхтәри булды. Йәш шағирҙар конференцияларында осрашҡанда, ул йәштәргә төндәр буйына туҡтамайынса шиғри телмәрҙә тарихтар һөйләр ине. Шул һөйләгәндәрендә бер фекере лә ҡабатланманы һәм ул нимәнелер хәтерләп алыуға бүленеп туҡтаманы. Хәҙер уйлауымса, ул беҙ күргән ҡырғыҙ сәсәне кеүек, трансҡа инеү һәләтенә эйә лә булған. Беҙ иһә шуны аңламай ҡалып, уға тейешле иғтибар бирмәгәнбеҙ.

Дөрөҫ йүнәлеш алыу өсөн беҙгә бөгөн сәсәнлектең ана шулай сәрпәкләнгән хәлдә булыуын аңлау кәрәк. Һәм туҡтап ҡалмаҫҡа, һәр сәрпәгендә уны үҫтерергә, балалар араһында мәктәп эштәрен көйләргә, ошо башланғысты дауам итергә. Сәрпәлгән һәр өлөштө юғары кимәлгә еткереп үҫтергәндә генә сәсәнлек мәктәбе хасил буласаҡ.

**(Дауамы 11-се биттә).**

*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# ҺӘР ХАЛЫҠТЫҢ МОҢО...

## Йыһандан төшөрөлгән йәшерен мәғлүмәт




**ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәр ойошмаһының халыҡ музыка ҡоралдары оркестры составында Төрки илдәре бойондороҡһоҙлоғонон 25 йыллығына арналған концертында ҡатнашып, тәжрибә туплап ҡайтҡан "Йатаған" этно-төркөмө етәксеһе Илдар ШАКИР менән түбәндәге әңгәмәбеҙ.**

**➔ Әлеге гастролдәрҙән алған тәьҫораттарығыҙ ниндәй?**

- "Урал моңо - 2016" Халыҡ-ара төрки йәштәренең музыкаль ижады конкурс-фестиваленең йомғаҡлау концертында ТӨРКСОЙ халыҡ-ара ойошмаһының баш режиссеры Арман Нурмөхәмәтов менән таныштыҡ һәм ул беҙгә хеҙмәттәшлек тәҡдим итте. Баҡтиһәң, Нью-Йорк ҡалаһында быйыл ТӨРКСОЙ ойошмаһының милли музыка ҡоралдары ансамбле булдырылған икән. Унда музыка ҡоралдарында уйнаусы бөтөн донъяға билдәле оҫталар йыйылған. Улар менән бергә ике аҙна буйы Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркиә илдәренең төрлө ҡалаларында концерт ҡуйып сәйәхәт итеү бәхете тейҙе беҙгә. Ансамблдең составында ҡырҡ кеше ине, шулар араһында Рәсәйҙең Башҡортостан, Татарстан, Тыва һәм Саха-Яҡут республикаларынан делегаттар ҡатнашты. Һәр милләт вәкиле үҙ халҡының быуаттар аша килеп еткән илаһи йыр-моңон башҡарып ишеттерергә тейеш ине. Башта көйҙө айырым уйнай башлайһың, һуңынан бөтә оркестр ҡушыла. Быға тиклем бергә эшләгән коллективтар менән сағыштырғанда кимәлдәр ер менән күк араһылай. Сөнки ТӨРКСОЙ ойошмаһының милли музыка ҡоралдары ансамблендә көйҙөң һәр нескәлеген тойоп, алдан бер тапҡыр ҙа уйнап ҡарамаған композицияны концерт барышында юғары оҫталыҡ менән башҡара алған кешеләр булды. Бөтә концерттарға ла инеү түләүһеҙ, тамаша залдары моңға ғашиҡ кешеләр менән шығырым тулы. Тамашасы беҙҙең сығыштарҙы күтәрмәләп, геүләп ҡысҡыра, "Афарин!" тигән тауыштар ишетелеп ҡала. Үҙҙәренә таныш йыр-көйҙәрҙе ҡушылып йырлаусылар ҙа табылды.

Беҙ, "Йатаған" төркөмө ағзалары, ҙур тәжрибә туплап ҡайттыҡ был сараларҙан. Иң мөһиме, бер ваҡытта ла республика буйлап сығыш яһау менән генә сикләнмәҫкә, һәр ваҡыт яңы үрҙәргә ынтылырға, оҫталыҡҡа башҡаларҙан да ҡарап өйрәнергә кәрәк, тигән уй тыуҙы. Сөнки бар нәмәнең дә кимәле бары тик сағыштырыу аша ғына күренә. Тәү сиратта беҙгә музыка ҡоралдарында уйнау оҫталығын арттырырға һәм эшһөйәрлерәк булдырырға кәрәк, тигән һығымтаға килдем. Ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙ думбырасыларының башҡарыу оҫталығына хайран ҡалып ҡайттым. Улар уйнағанда думбыраны төрлөсә әйләндереп, тубыҡҡа терәп тә, яурындарына һалып та көйҙө өҙмәйенсә генә башҡара. Ә бына эшһөйәрлеккә килгәндә, уңышҡа өлгәшәм, тигән кешегә ялҡауланыу тураһында онотторға кәрәк. ТӨРКСОЙ ойошмаһының милли музыка ҡоралдары ансамбленә тупланған музыканттар үҙ эшенең оҫтаһы булырға, тамашасылар алдында юғары кимәлдә сығыш яһарға, эшләргә ашҡынып тора. Уларҙың үҙ эшенә ҡарата мөнәсәбәте бөтөнләй икенсе. Ҡаҙағстандың бөтөн донъяға билдәле "Сазген сазы" фольклор-этнографик ансамбленең музыкаль етәксеһе Марат Жалбиров менән эшләү бәхете тейҙе. "Сазген сазы" ансамбленең репертуарында ике меңдән артыҡ көй, был коллективта ысын мәғәнәһендә эшһөйәр кешеләр эшләүенә инандым. Әйткәндәй, Ҡаҙағстанда традицион музыка кафедраһы беҙҙәгенән һуңыраҡ асылһа ла, уларҙың эш һөҙөмтәһе иҫ китерлек...

**➔ ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәр ойошмаһының халыҡ музыка ҡоралдары оркестрының бәләкәй составына саҡырылыу яңылығын нисек ҡабул иттегеҙ?**

- Ҡаҙағстандың Талдыҡорған, Алма-Ата ҡалаларында, Ҡырғыҙстандың баш ҡалаһы Бишкәктә, Төркиәләге Анкара, Киренея, Измир ҡалаларында концерттар тамамланып, ҡайтыр мәлдә ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәр ойошмаһының йәнә ошондай гастролдәр ойоштороуы тураһында ишеттем, ләкин әһәмиәт бирмәнем. Ошо ике аҙналыҡ концерт туры ла беҙҙең "Йатаған" төркөмө өсөн ҙур ҡаҙаныш ине, етмәһә, самолеттан килеп төшкәс тә мин Силәбе өлкәһенә милли музыка ҡоралдарында уйнау буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрергә тип, юлға сығырға тейешмен. Шулай яңы тәьҫораттар, тәжрибә туплап ҡайтып, илһамланып эшләп йөрөгәндә тағы ла ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәр ойошмаһынан шылтыратып, ойошманың халыҡ-ара музыка ҡоралдары оркестрының бәләкәй составында уйнарға саҡырҙылар. Тәүҙә ике кеше килегеҙ: үҙең һәм төркөмдөң ҡурайсыһы Морат Йәноҙаҡов, тигәйнеләр. Мин өсәүләп барайыҡ, ҡурай, думбыра, ҡылҡубыҙ булыр, тигәс, килештеләр һәм Азат Нухов та ҡушылды. Шул октябрь айында Төркиәнең Стамбул һәм Малатья ҡалаларында ун ете кешенән торған халыҡ-ара оркестр составында беҙ ҙә сығыш яһаныҡ. Шуны ла әйтергә кәрәк, ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәр ойошмаһының халыҡ музыка ҡоралдары оркестрына беҙҙәге медиатор менән уйналған, тимер ҡыллы думбыра ҡабул ителмәй. Тәүҙә барғанда мин бер ҡылы ғына тимерҙән булған думбырамды алып барғайным, уйнарға рөхсәт итмәнеләр. Шуға, икенсе барғанда Илһам Байбулдин эшләгән уйын ҡоралымды алдым. Белгестәр уның дөрөҫ яһалыуын билдәләне, тик думбыра эшләүҙә ҡиммәтерәк ағас материалы ҡулланырға кәңәш итте.

**➔ Төрлө халыҡтарҙың репертуарға ингән көйҙәрен тиҙ генә өйрәнергә тура килде, тигәйнең инде. Ә шулай ҙа башҡа милләттәрҙең көйөн еренә еткереп уйнап ишеттереп буламы?**

- Төрлө халыҡтарҙың көйҙәрен уйнай белеү - бер, иң тәүҙә үҙ халҡыңдың моңон тамашасы алдына еренә еткереп сығарыу маҡсат бит. Башҡорт халҡының ҡанына һеңгәнен, булмышын башҡа берәү ҙә тулыһынса сағылдыра алмай, әлбиттә. Башҡортҡа хас моң бер төрлө, төрөк кешеһе күңелендә ул икенсе төрлө ярала. Шуға, беҙ ниндәй музыка ҡоралында уйнарға өйрәнһәк тә, ниндәй халыҡтың көйҙәрен оҫта башҡарһаҡ та, уның төп йөкмәткеһен тулыһынса асып еткерә алмайбыҙ. Шулай уҡ, ҡурайҙа кем генә уйнаһа ла, ул башҡорт халҡының көйгә һалынған рухиәтен тамашасыға тулыһынса тапшырмай. Моң - һәр халыҡтың үҙенә айырым Йыһандан төшөрөлгән йәшерен мәғлүмәт, ә музыкант уны йөрәге аша үткәргәндән һуң ғына башҡаларға ла дөрөҫ итеп еткерә ала. Ер йөҙөндәге халыҡтар бушҡа ғына төрлө итеп яралтылмаған, һәр кем үҙ көйөн уйнарға, үҙ моңон киләсәк быуындарына тапшырып барырға тейеш. ТӨРКСОЙ ойошмаһының халыҡ музыка ҡоралдары ансамблендә төрлө милләт вәкиле нәҡ үҙ халҡының милли уйын ҡоралдарында үҙ көйҙәрен сәхнәгә сығып уйнауы, үҙ мәҙәниәтен һәм рухиәтен күрһәтә алыуы был сәйәхәттәребеҙҙе үҙенсәлекле итте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Төрки халыҡтарының уйын ҡоралдарында уйнаусыларҙың иң аҫылдарын бергә туплаған ТӨРКСОЙ халыҡ-ара төрки мәҙәниәттәр ойошмаһының оркестрының артабан да уңышлы эшләүен күреп, һоҡланырға яҙһын. Әлбиттә, был коллективта башҡорт халҡының да лайыҡлы вәкилдәре милләтебеҙҙе балҡытып тороуын теләр инек. Ә бына башҡорттарҙың һәр ваҡыт тиңдәр араһында тиң булып йәшәүен белеп, туғандаш халыҡтар араһында ла абруйыбыҙҙы арттырырға тырышып йөрөгән "Йатаған" этно-төркөм егеттәре киләсәктә яңы ижади үрҙәр яуларына шик юҡ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

# ҺӨЙГӘНЕҢ ЭРГӘҺЕНДӘ...

## эре булып ҡыланма



Шул уҡ матур күҙҙәр, йылмайыу, йомшаҡ ҡулдар, әйтерһең, биш йыл түгел, бер генә көн үткән. Оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырғандан һуң, егет ҡыҙҙы ҡосағына алды, ҡыҙҙың күҙҙәренән йәш эркелде. Бер-береһен ҡосаҡтарынан ебәрергә теләктәре юҡ ине лә... Тик ҡайтырға кәрәк, ҡыҙҙы бит өйҙә көтәләр...

Әле генә булған татлы осрашыу хистәренән арына алмай, уйҙарына бирелеп бара торғас, юл ситендә ҡул болғаған егетте күреп, машинаһын туҡтатты.

- Ағай, Ибраһим яғынамы?

- Юҡ, барып етмәйерәк боролам, әйҙә, ултыр, атлап барып етерһең, күп ҡалмай бит.

Йәш егет йылдам ғына машинаға инеп ултырҙы.

- Ағай, машинаң нисәнсе йылғы? - тип һорап ҡуйҙы бара биргәс.

- Ике мең етенсе.

- Мин дә ошондай машина алырға хыялланам, ағай.

- Алырһың, ҡустым, алырһың... - егеттең күңеле һаман төшөнкө, машина ҡайғыһы юҡ ине. Әммә яңы танышы бик һүҙсән булып сыҡты. Егерме йәш икән үҙенә. Бара торғас, үҙенең һөйгән ҡыҙы тураһында һөйләй башланы. Уның бигерәк эре ҡыланыуына, үҙен әллә кемгә ҡуйыуына зарланғандай итте. Таныш күренеш...

- Ағай, һин кәләш алғанһыңмы? - был һорау егеттең яраһына тоҙ һипкәндәй итте.

- Юҡ, - тип, ҡоро ғына яуап ҡайтарҙы.

- Ниңә?

- Мин дә ҡасандыр һинең кеүек егерме йәшлек инем. Әрменән ҡайтҡан ғына саҡ. Шул мәлдә бер ҡыҙ менән таныштым. Ул мине ныҡ яратты, ауыр саҡтарҙа һүҙ менән ярҙам итеп торҙо, һәр саҡ янымда булды. Ә мин эре ҡыландым. "Йәшмен, сибәрмен, ҡыҙҙар үҙҙәре артымдан йүгерә", тип уйлай инем.

- Ә хәҙер ул ҡайҙа?

- Ташлаштыҡ, биш йыл элек...

- Ҡабат осрашманығыҙмы?

- Осраштыҡ... Ярты сәғәт элек кенә... Биш йылдан һуң тәүге тапҡыр осраштыҡ...

- Араларҙы яңынан бәйләп булмаймы ни инде?

- Һуң, ҡустым, бик һуң... Ул кейәүҙә, ике йәшлек ҡыҙы бар. Һуңланыҡ, аҙашты беҙҙең мөхәббәт. Мин үҙем ғәйепле. Унан һуң, ысынлап та, ҡыҙҙар күп булды, тик күңел ятҡаны булманы. Мин дә ярата инем бит уны, тик шул эрелегем ҡамасауланы. Иҫеңдә ҡалдыр, ҡустым: егет кеше ғорур булырға тейеш, тик тәкәббер булма. Бына минең боролош... - машина ҡарлы юлда шығырлап туҡтаны.

- Рәхмәт, ағай! - егет машинаның ишеген япты. Уның ҡолағында: "Ғорур бул, ләкин һөйгәнең эргәһендә үҙеңде эре тотма", - тигән һүҙҙәр генә яңғырап ҡалды.

**Илгиз БУРАНБАЕВ.**

✓ *Сәсәндәр халыҡтың иң изге серҙәрен белгән. Шуға ла ырыуҙың серле белемен дошман белеп ҡалып, төрлө сихыр, боҙом аша халыҡҡа зыян килтермәһен, тип, үҙ халҡы тураһындағы боронғо йолаларҙы ныҡ һаҡлағандар.*



# СӘСӘНЛЕК - ЭПОС ЙӘКИ ҠОБАЙЫР ҺӨЙЛӘҮСЕ ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## сәсәнлек - ул булмыш, ул - халыҡтың теле



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**З. Әминев:** "Киске Өфө"лә үткәнендә баҫылған мәҡәләлә "Тик ир-егеттәр генә сәсән булған", тигән фекер әйтелгәйне. Мин бының менән тулыһынса килешәм. Быны бер беҙҙең генә түгел, башҡа халыҡтар миҫалында ла күрергә була. Ни өсөн тик ир-егет кенә сәсән булған һуң? Ҡатын-ҡыҙҙар һәләтһеҙ тигәндән түгел. Беҙҙең һәләтле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ етәрлек булған, әле лә бар, артабан да тыуыр улар. Әммә бында эш икенсе нәмәлә. Сәсәндәр халыҡтың иң изге серҙәрен белгән. Шуға ла ырыуҙың серле белемен дошман белеп ҡалып, төрлө сихыр, боҙом аша халыҡҡа зыян килтермәһен, тип, үҙ халҡы тураһындағы боронғо йолаларҙы ныҡ һаҡлағандар, сит халыҡҡа һөйләп бармағандар.

Сәсәндәр халыҡ араһынан сер тоторлоҡ, ышаныслы, ижадҡа һәләтле ир балаларҙы һайлағандар, уларҙы әкренләп кенә үҙҙәренә ылыҡтырып, өйрәткәндәр. Ир бала ырыуҙы дауам итеүсе, ә ҡыҙ баланың икенсе ҡәүемгә кейәүгә сығыуы бар. Борон бит кәләште икенсе ырыуҙан алырға, тигән дуализмға бәйле ҡәтғи талап булған. Икенсе ер-һыуҙарға оҙатылып, сер итеп кенә һаҡланған рухи мираҫты үҙе менән алып китеп, сит-яттарға еткереүҙән шулай һаҡланған халыҡ. Был тик башҡорт өсөн генә түгел, ғөмүмән, бөтә донъяға таралған күренеш.

Дөрөҫ йүнәлеш эҙләгәндә, бөгөн сәсәндәр мәктәбен асып, рухи мираҫты тергеҙеп ятҡанда, "ҡыҙ бала сәсән була алмай" тип тыйыу урынһыҙыраҡ та булыр. Әйҙә, ҡыҙ балалар ҙа белһендәр, ятлаһындар, сәсәнлек серҙәрен өйрәнһендәр, һөйләп-көйләп тә йөрөһөндәр. Әммә "Мин - сәсән" тип онотолоп китмәһендәр генә, тип әйткем килә. Бөгөн Ғәбит, Хәмит сәсәндәр юҡ икән, беҙгә бит улар кеүектәр ижад иткән мираҫ килеп еткән, ҡағыҙға теркәлгән. Уларҙы ҡабул итеп алып, артабан дауам итеүселәр, йәшәтеүселәр, тапшырыусылар булһын. Йәғни, тап мәктәп эше дауам иттерелһен.

Асылда, ысын сәсәндәр тик ир-егеттәр генә булған. Бөтөн халыҡтарҙа ла 12-14 йәштә ир баланың кем булыуын асыҡлаған осор булған. Улар үҙ тәбиғәте ҡушҡан һәләте буйынса - йә яугир, йә икенсе берәй шөғөлгә ылыҡтырылған. Уларҙы шул йәштән йә оҫталарға, йә уҡыуға тапшырғандар, ҡыҫҡаһы, киләсәген күҙаллағандар.

**► Бәлки, "Урал батыр" эпосы менән сәсәнлекте бөтөнләй бәйләмәҫкәлер?**

**Н. Тулыбаева:** Был ике төшөнсәне бәйләгәндә лә, бәйләмәгәндә лә, беҙҙең ҡырғыҙ аҡыны кеүек сәсәнебеҙ юҡ. Тимәк, ул кимәлдә башҡара алыусыбыҙ ҙа юҡ. Беҙгә, булғанына шөкөр итеп, эпос, ҡобайырҙы әлегесә башҡарыусылар араһында бәйге ойоштороrға ғына ҡала. Килешәм, беҙҙекеләр ысын сәсән нисек булыуын белһендәр, әммә беҙ уның кеүек була алмайбыҙ, тип, үҙҙәрен сикләмәһендәр ҙә. Ҡырғыҙ ғалимәһе Гөлнара Айтпаева менән һөйләшкәндә, ишеттегеҙ бит, уларҙа ошондай балаларҙы эҙләү, табыу һәм өйрәтеү үҙәге бар. Ғәйеп итеп әйтмәйем, әммә ғалимәнең үҙенең дә ябай ғына түгеллеген аңлағанһығыҙҙыр, тип уйлайым. Ул шундай балаларҙы тоя, тимәк, дөрөҫ итеп һайлап ала ла белә. Ҡайҙа беҙҙә ундай кешеләр, үҙәктәр?

Быларҙан тыш, күсәгилешлек, быуындан-быуынға тапшырыу тигәнде лә онотмайыҡ. Мин эпос тураһындағы мәғлүмәттең һайланма кешеләргә тапшырыла барып, беҙгә килеп еткән ҡомартҡы булыуына ышанам. Шунлыҡтан, уны беҙҙең быуын да киләсәккә тапшырыу бурысын үтәргә тейеш. Бөгөн элекке кеүек ҡарһүҙҙәр, әкиәттәр, риүәйәттәр һөйләп төндәр үткәргән өләсәйҙәр юҡ. Балаларға уларҙы кемдер еткерергә тейеш тә инде. Тап ошо эште сәсәндәр мәктәбе башҡара ла, минеңсә.

**М. Ямалетдинов:** Быйылғы фестивалдең афишаһына иғтибар иткәнһегеҙҙер: ул "Конкурс сэсэнов (сказителей)" тип аталды. Минеңсә, был сәсән менән икенселәр ижадын башҡарыусыны бер яҫылыҡҡа ҡуя. Әгәр атамалағы йәйәләрҙе алып ташлап, "Конкурс сэсэнов и сказителей" тиһәң, дөрөҫөрәк булыр ине. Башҡортсаһы "Сәсәндәр һәм ҡобайырсылар конкурсы". Ҡырғыҙҙың манассыһы, яҡуттың олонхосыһы, ҡалмыҡтың жаңғарсыһы кеүек, "Урал батыр" эпосын башҡарыусыны ла Урал батырсы, йә иһә ябайлаштырып, ҡобайырсы, тиергә була. Иң мөһиме, киләсәктә бындай конкурстарҙа үҙе ижад иткән эпос башҡарыусы (сәсән) менән башҡаларҙың эпик әҫәрен башҡарыусы (ҡобайырсы, Урал батырсы, манассы, олонхосы һ. б.) айырым баһаланырға тейештәр. Шунһыҙ алға китеш тә, сәсәнлекте тергеҙеү менән уны үҫтереү ҙә мөмкин түгел, тип уйлайым.

**З. Әминев:** Сәсәнлек менән ҡобайырҙар бер-береһенә айырылғыһыҙ бәйле нәмәләр, сөнки эпостар беҙгә "сәсән" тип аталғандар аша килеп еткән. Беҙ быны бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ. Ә инде бөгөн үҙен сәсәнмен тип йөрөүселәрҙең элекке сәсәндәргә тап килмәүе икенсе мәсьәлә. Сәсән, сәсәниә, тип, беҙ элекке ысын сәсәндәрҙең бәҫен генә төшөрәбеҙ кеүек. Бәлки, "сәсән" атамаһын йолҡоламай, башҡарыусыларға икенсе атама уйларғалыр? Быныһы, әлбиттә, ойоштороусыларҙың ҡарамағында. Әммә уйланырға кәрәктер кеүек...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фекерҙәр төрлө яҡлы булды. Әммә береһе лә уйһыҙ ҡалдырманы. Ысынлап та, "Урал батыр" эпосының эсенә йомолған һайын йомолаһың, төпкә төшкән һайын унда тәрәнерәк, төплөрәк фекерҙәр яралыуын тояһың. Әйтерһең, ул үҙе шулай, мине аңлағыҙ, серемде сисегеҙ, төшөнөгөҙ, тип тартып, арбап торғандай. Мәңгелек әҫәр, мәңгелек хәҡиҡәт ул - "Урал батыр" эпосы. Уны беҙҙең быуынға Ғәбит сәсән тапшырып ҡалдырған булһа, киләсәктә, бәлки, бер нисә быуаттан һуң, ул шул быуынға үҙ сәсәне аша улар һөйләшкән телдә һәм аңда килер. Яҙмаларҙа яҙылғанса, оло яуҙар үтеп, кешелек бөтөнләй икенсе йәшәйеш алып, икенсе тормош башланғандан һуң да был әҫәр ошо мәғлүмәте менән кешеләргә еткереләсәк. Юғиһә, кешелек аңында донъя барлыҡҡа килеү тураһындағы фәлсәфә лә юйыласаҡ бит. Унһыҙ кешелек тә булмаясаҡ...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмә ҡорҙо.**

*О, СПОРТ!*

# БЕРЕНСЕҺЕН ДӘ ЯУЛАРБЫҘ!

**Ошо көндәрҙә Өфөнөң Республика спортсылар әҙерләү үҙәгендә кикбоксинг буйынса Рәсәй кубогы һәм Бөтә Рәсәй турниры үтте. Ярыштарҙы БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Рәсәй һәм Башҡортостан кикбоксинг федерациялары менән берлектә Рәсәй Федерацияһының Спорт министрлығы ойошторған. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән 300-ләп спортсы араһында Башҡортостан спортсылары ла бар. Әле беҙ Сибай ҡалаһының "Шоңҡар" спорт клубы баш тренеры, спорт мастерлығына кандидат Хәлит Фәрит улы ҺИБӘТУЛЛИН менән әңгәмәләшәбеҙ.**



*Рәсәй спорт мастеры Вадим Ғүмәров.*

**➔ Кикбоксинг буйынса ошондай ҙур ярыштар үткәрерлек булғас, был спорт төрө Башҡортостанда ла киң таралған, тип әйтеп буламы?**

- Спорт төрө булараҡ, әлбиттә, ул Европала, Азияла, АҠШ-та бик киң таралған. Ә беҙҙең илдә беренсе федерация 1991 йылда ғына ойошторолдо. Спорт төрө үҙе лә сағыштырмаса яңы, ә Рәсәйҙә айырыуса йәш спорт төрө иҫәпләнә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәйҙең көслө кикбоксерҙары бар. Тимур Йосоповты, Фәрхәт Имашевты, Фәнил Уйылдановты айырып әйтергә була...

Беҙҙең Сибайҙа ла был спорт төрө менән яратып шөғөлләнгән балалар һәм йәштәр байтаҡ. Бына әле Рәсәй чемпионатына биш кикбоксерҙан торған команда менән килдек. Спортсыларыбыҙҙың береһе - хеҙмәткәр, дүртеһе -БДУ-ның Сибай институты талиптары. Был ярышҡа килгән Вадим Ғүмәров тураһында айырым әйтеп үтке килә. Быйыл Екатеринбург ҡалаһында үткән Рәсәй беренселегендә ул 18 йәшкә тиклемгеләр араһында лоу-киклы фул контакт буйынса 1-се урын һәм Рәсәй спорт мастеры титулын яуланы. Бөгөн мин алып килгән командалағыларҙың бөтөнөһө лә лоу-кик төрөндә сығыш яһаясаҡ. Тағы бер бик көслө спортсыбыҙ - өлкәндәр араһында сығыш яһаусы Европа чемпионы, Донъя кубогы эйәһе, Халыҡ-ара класлы спорт мастеры Азамат Мусин яңыраҡ ҡына Словенияла үткәрелгән Европа чемпионатында еңеү (икенсе тапҡыр Европа чемпионы исемен алды) яулап ҡайтты, шуға ла әле ул ял итә, был ярышҡа килмәй торҙо. Ул 14 спортсы араһынан беренселеккә сыҡты.

**➔ Сибайҙы беҙ ушу буйынса ла, кикбоксинг буйынса ла бик көслө спортсылар тәрбиәләгән мәктәп тип беләбеҙ. Заманында Тимур Кәримов бер нисә тапҡыр донъя кубогына лайыҡ булды... Ә бөгөнгө еңел булмаған осорҙа көрсөк ғәләмәте һеҙҙең эшкә ныҡ тәьҫир итәме?**

- Һиҙҙерә. Ауырлыҡтар һуңғы ике йыл эсендә бермә-бер артты. Ситтә үткән ярыштарға барырға аҡса табыуы ауырлашты. Шунлыҡтан, уларҙа һирәгерәк ҡатнаширға тура килә. Беҙ, спортсылар, финанслау тигән нәмәгә аяғыбыҙ-ҡулыбыҙ менән бәйлебеҙ бит. Ни өсөн тигәндә, ҡорамалдар, кейемдәр һатып алырға кәрәк, улар туҙып ҡына тора. Бөгөн дә Өфөгә үҙ аҡсабыҙға килдек. Ни өсөн тигәндә, алдараҡ әйткәнемсә, беҙҙе спорт мастеры тигән исем алыу мөмкинлеге ылыҡтыра.

Әйткәндәй, беҙгә Өфө алыҫ булһа ла, үҙебеҙҙең ут күршеләргә - Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһына, Силәбегә, Ҡаҙағстандың Аҡтүбә ҡалаһына, ҙурлығына-бәләкәйлегенә ҡарамай, ярыштарға йыш йөрөйбөҙ. Улар ҙа беҙгә килеүҙе ғәҙәт иткән. Шулай тәжрибә уртаҡлашабыҙ, бер-беребеҙҙе үҫтерәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең бөгөнгө геройҙарыбыҙҙан Вадим Ғүмәров Өфөлә үткән Рәсәй Кубогында өсөнсө урын яуланы. Уның тренеры Хәлит Фәрит улы: "Ололар ҡорона яңы аяҡ баҫты егет. Быға тиклем үҫмерҙәр төркөмөндә генә көс һынаша ине бит. Еңеүҙәре алда уның", - тип, егеттең киләсәген яҡшыға юраны.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

✓ *Бер заман төнгө сәғәт өстә "Эсеп үлгән, эсеп үлгән" тигән бик шат һәм тантаналы итеп ҡысҡырышҡан тауыштарға уяндым да, кемдең эсеп үлгәнен аңламай ыҙаландым. Ә тауыштар артҡандан-арта барҙы.*



ИНТЕРНЕТТАН



# РИЗЫҒЫҢ НИНДӘЙ ТӨҪТӘ?

■ Сыр - кальций һәм B12 витаминына бай тәмле һәм файҙалы ризыҡ ҡына түгел. Ул ҡартайыу процесын яйлата икән. Ғалимдар һуңғы тикшеренеүҙәр сиктәрендә үңәҙле сыр берләшмәләренең тәьсирен һынаған. Һүҙ спермидин тигән берләшмә тураһында бара, уның емеш себендәренең һәм ҡорттарҙың ғүмерен оҙайтыуы хаҡында белгестәр күптән белдергәйне. Был юлы был берләшмәне сысҡандарҙа һынап ҡарағандар. Бер төркөмгә спермидин өҫтәлгән һыу эсергәндәр, икенсеһенә -ябай һыу. Һөҙөмтәлә, тәүге төркөмдәге сысҡандарҙың ғүмере күпкә оҙайған. Берләшмә йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртҡан һәм ҡан баҫымын түбәнәйткән. Етмәһә, ул аутофагия процесын әүҙемләштергән, һөҙөмтәлә күҙәнәктәр токсиндарҙан таҙарынып, зарарланған өлөштәрен яңынан эшкәрткән. Аутофагия - күҙәнәктең һәм уның эшмәкәрлегенең ғүмерен ярайһы оҙайта, тимәк, ҡартайыуҙы ла әкренәйтә. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, көн һайын 80 грамм майлы сыр ашау "файҙалы холестерин" кимәлен күтәрә.

■ Күптәр файҙалы ризыҡтарға иғтибар итеп бармай. Шуға ла уларҙы буйрға тәҡдим итә Триестағы Халыҡ-ара перспектив тикшеренеүҙәр мәктәбе ғалимдары. Тәбиғи ризыҡтарға килгәндә, уларҙың ҡыҙыл төҫтәгеләре тиҙерәк туйҙыра. Йәшел ризыҡтар, киреһенсә, түбән калориялы булыуы менән айырыла. Кешеләр ҙә ҡыҙыл төҫтәге ашамлыҡтарға өҫтөнлөк бирә икән. Шуға ла ғалимдар файҙалы ризыҡтарҙы ҡыҙыл спектрға яҡыныраҡ төҫтәргә буярға тәҡдим итә.

■ Компьютер организм өсөн зарарлы, тибеҙ. Әммә компьютер уйындары өлкән йәштәге кешеләр өсөн файҙалы икән. Был уларҙың когнетив функциялары кәмеүен әкренәйтә, ти Сидней университеты ғалимдары. Компьютер уйындары менән мауыҡҡыусылар тиҙерәк фекерләй, уларҙың хәтерҙәре лә яҡшыраҡ. Шулай ҙа былар ҡартайыу процесын туктата алмай. Шуға ла баш мейеһен иртәрәк "күнектерә" башларға кәрәк.

■ Норвегия ғалимдары билдәләүенсә, әүҙем сәләмәт тормош алып барыусылар, шулай уҡ юмор тойғоһона эйә булыусылар оҙағыраҡ йәшәй икән. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре менән һирәгерәк ауырый. Үҙ адресына әйтелгән тәнҡитте ҡабул итә белеүселәр ҙә сәләмәтерәк була. Һынауҙарҙа 50 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Шаяртта белеүселәр һәм шаярыуҙы аңлаусылар йоғошло ауырыуҙар менән һирәк ауырый, уларға онкология ла осрамай. Әйткәндәй, бындай һөҙөмтәләр ир-егеттәргә тулыһынса тура килмәй. Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәре хәүефен бер нәмә лә түбәнәйтә алмай, ти табиптар. Стресс гормоны ир-егеттә өлкәнәйгән һайын күтәрелә бара икән. Ошонан сығып, белгестәр көслө затка тормошҡа ыңғай яҡтан ғына ҡарарға кәңәш итә.

■ Техас ғалимдары бер нисә тикшеренеү үткәргән һәм иртә тороу кешенең психик сәләмәтлегенә зыян итә, тигән һығымтаға килгән. Ниндәйҙер сәбәп менән иртә торорға мәжбүр булған кеше ярһып бара, тиҙ арый. Был даими ҡабатланһа, депрессия, хатта башҡа психик ауырыуҙар барлыҡҡа килеүе бар. Биоритмдың систематик рәүештә боҙолоуы нервы системаһына кире йоғонто яһай. Был өлкәлә тикшеренеүҙәр дауам итә.

ТӘҮБӘ ҺҮҘЕ

# ТЕРЕ ҠАЛҺАМ, НАМАҘ УҠЫР ИНЕМ...

**Был яҡты донъяларҙың серен белеп тә, аңлап та бөтөрөрлөк түгел... Минең аңлауымса, һиҙемләүемсә, беҙҙең эргәлә параллель донъя бар: ул Илаһи көс беҙҙең бөтә донъябыҙҙы ҡора, беҙҙе йәшәтә, эшләтә һ.б. Быға мин үҙем инандым...**



Мин башҡаларҙан айырылып бармаған ҡәҙимге кешемен. Ауылда күп балалы ғаиләлә тыуып үҫтем, ҡалаға сығып китеп, белем алдым, тормошҡа сыҡтым. Бер йылдан улыбыҙ тыуҙы. Тик ирем менән 5 йыл ғына йәшәнек, эсә, һуғыша башлағас, айырылыштыҡ. Баш ҡалала унда-бында күсеп йөрөп, тамам ялҡҡас, улым менән икәүләшеп тыуған ягыма әйләнеп ҡайттыҡ. Тәүҙә апайымдарҙа йәшәнек. Һуңынан минән өлкәнерәк, тәүге ҡатыны менән айырылған бер ирҙе осратып, уға кейәүгә сыҡтым һәм уның донъяһында йәшәй башланыҡ. Башта, әлбиттә, беҙҙең турала төрлө ғәйбәттәр, яман һүҙҙәр һөйләнеләр. Тик ирем үҙенең туғандарынан да, минекеләрҙән дә һүҙ әйттермәне, ҡыйырһытманы, улымды үҙенең балаһы кеүек ҡабул итте, тәрбиәләне. Яйлап, бөтәһе лә үҙ урынына ултырҙы, ҡәҙимгесә йәшәп алып киттек. Хәҙер икенсе балабыҙҙы ҡыҙыбыҙ бар. Бер ҡарауға, кешенән кәм-хур йәшәмәйбеҙ, улымды бергә үҫтерҙек, ул иремде "атай" тип кенә тора, уҡыттыҡ, әле армияла хеҙмәт итә. Ҡыҙыбыҙ ҙа үҫеп килә, быйыл 1-се синыфҡа уҡырға бара. Иптәшемдең тәүге ҡатынынан балалары, ейәндәре беҙгә килеп йөрөй, сырсыу килеп, ғауғалашып ултырған юҡ, һәүетемсә йәшәп ятабыҙ, Аллаға шөкөр. Үҙем эшләйем, ике юғары белемем, яратҡан һөнәрем бар. Өйҙә лә, эштә лә өлгөрөргә тырышам, бигерәк тә тәмле-татлы итеп бешерергә, бәйләргә, китап уҡырға яратам. Бергәләп ҡош-ҡорт, мал-тыуар, бал ҡорттары ҡарайбыҙ, үҙебеҙҙең көс менән тапҡан малға, донъяға ҡыуанып йәшәгән булабыҙ. Беҙҙән кеше өҙөлмәй: балалар, ейәндәр (иптәшемдең тәүге ҡатынынан), туғандар, таныштар, дуҫтар килеп-китеп тора, Аллаға шөкөр. Бөтәһенә лә асыҡ йөҙ күрһәтергә, ихлас ҡунаҡ итергә, уларҙың күңелдәрен күрергә тырышабыҙ...

Тик һуңғы ваҡытта ошондай табындар эске менән йыш бәйләнә башланы. Табындар күңелле үтә, әлбиттә, тик икенсе көндө "эскегә һалышмаһам ярай ине" тигән уйҙар мейене телгеләп, ныҡ ҡурҡыта башлай. Һәр ошондай табындан һуң эстән генә Хоҙайҙан мине яман ризыҡтан айырыуҙы һорай инем. Быйыл бигерәк тә сейә күп булды, бик күп компот эшләнем, һәр банканы япҡан һайын "Эскеһеҙ табындарға яҙһын", тип теләйем. Сөнки эске табындары көн дә булмаһа ла, аҙна һайын ҡабатланып торҙо: тыуған көндәр, эштәге уңыштар, яңы машина-әйберҙәр, отпуск, ял итеүҙәр һ.б. Бер яҡтан ҡараһаң, шатлыҡҡа тулы тормош, икенсе яҡтан, ул шатлыҡтар араҡы менән "йыуыла"...

Быуна бер көндө йыраҡтан бик оҙаҡ йылдар күрешмәгән ауылдашыбыҙ, әхирәтебеҙ отпускыға ҡайтып төштө. Һәр ваҡыттағыса, ҡунаҡ булдыҡ, йәшлек хәтирәләрен иҫкә төшөрҙөк, бик матур ғына кис ултырып ташланыҡ. Ирем ул көндө эштән һуң ғына ҡайтты, эске табынын күреп, кәйефе лә төшкәйне уның, мин бер һүҙ ҙә әйтмәнем, әйтһәң, ғауға буласаҡ, шуға ла ҡунағымды оҙатҡас, әкрен генә өҫтәлде йыйыштырып, йорт-ҡураны ҡарап, ҡош-ҡортто ашатып, йоҡларға яттым. Бер заман төнгө сәғәт өстә "Эсеп үлгән, эсеп үлгән" тигән бик шат һәм тантаналы итеп ҡысҡырышҡан тауыштарға уяндым да, кемдең эсеп үлгәнен аңламай ыҙаландым. Ә тауыштар артҡандан-арта барҙы, уларға башҡалар ҙа ҡушылды. "Эх, иренә әйтмәне, ҡыҙын детдомға бирмәһә ярай ине!" "Улына ла хәбәр итмәне (улым Мәскәүгә эшкә киткәйне), сәғәт өс, Мәскәүҙә - бер, хәҙер шылтыратһа ла була инде, тик нимә тип әйтер икән уға?" "Эй, бахырың, әллә күпме компот эшләне, үҙе эсә лә алманы..." Ошондай тауыштарҙы ишеткәс, минең турала һүҙ барғанын аңланым. Береһен дә күрмәйем, тик эргәмдә йөрөгән, һәр аҙымымды күҙәткән, һәр һулышымды тойған "кемдендер" минең бөтә тормошомдо тәфсирләп, әсенеп һөйләгәнен тойҙом. Үҙем аңлайым, ишетәм, күҙем асыҡ, тик бер нәмә лә эшләй алмайым. Ул тауыштар һуңғы ваҡытта күргән төштәрҙән эпизодтарҙы ла иҫкә төшөрҙө, "Эсергә ярамағанлығын, иманға килеүендә беҙ һинә төштәреңдә лә аңлатырға тырыштыҡ, аңламаның..." тип үпкә белдерҙеләр. Һәм улар тауышына тағы кемдәрҙеңдер (шайтандарҙың икәнен аңланым) "Эсеп үлгән, эсеп үлгән!" тигән шатлыҡлы тауыштары ҡушылды. Күҙ йомолһа, ауыҙ асыла, эстән бер нәмәне һура башлаған кеүек тойола. Инде күҙ йомолдо, тигәйнем, 6 йәшлек ҡыҙым ныҡ итеп сәсемдән тартты, күҙемде асып ҡараһам, ул бер нәмә булмағандай, эргәмдә изрәп йоҡлап ята. Тауыштар тағы дауам итте: "Ярай, үлгән тип кешеләр килер, былай өйө, постеле таҙа ғына, оят булмаҫ!" "Эх, йыуынып, тәһәрәт алып ятһа ярай ине, йән сыҡҡанда ғәүрәттәр ҙә сыға, бысранаһың", тигән тауыштан һуң, тороп, йыуынып ятырға булдым. Ни ғәләмәт, мин атлап йөрөмәйем, аяғым иҙәнгә теймәй, бына-бына осоп китермен кеүек, аптырап, иҙәнгә ҡаты итеп баҫып ҡарайым, иҙәнде тоймайым. Шулай ҙа йыуынып, таҙарынып яттым, сәғәт таңғы 5 етеп килә ине. Төнө буйы йоҡламаған кеүекмен, хәлем дә ныҡ бөткәйне, арығайным, ике сәғәт йәнемде тартҡысланылар, йолҡҡосланылар. Ни булһа ла булыр, тип ята бирҙем. Шунда минә ап-асыҡ үҙемдең ике йөҙөмдө күрһәттеләр: береһе - матур кейемдә, оҙон йәшел күлдәктә, мәсеткә китеп барам, икенсеһе - эсеп, йөҙөм күгәреп бөткәйне. "Мин дә үлдем, буғай", тигән уйҙар менән теге донъяға китергә ризалаштым. "Тере ҡалһам, намаҙ уҡыр инем!" тинем дә, күҙҙәремде йомдом...

Иртән уянғас, тере ҡалыуыма оҙаҡ ышанманым. Тәндең, йәндең ныҡ итеп әрнеп һыҙлауына ҡарамай, тороп, ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр менән булыша башланым. Төнгө мәхшәр күҙ алдында тик тора, бөтә деталдәренә тиклем иҫләйем. Шулай шанҡып бер көн йөрөнөм, шунан йома көндө ҡыҙым менән мәсеткә киттек. Йома намаҙына тиклем арыу ғына ваҡыт булһа ла, халыҡ күп ине, кемдер ҡорбан салдырған, бай табын ҡорғайнылар. Шунда минә "Бына Хоҙай һинең мәсеткә килеүеңә ҡалай ҡыуана, бай табын-өҫтәлдәр менән ҡаршы ала", тигән һүҙҙәр ишетелгәндәй булды. Кешеләр килә торҙо, мәсет намаҙҙарын уҡый торҙо. Ә минең күҙҙәрҙән туктатып та, тыйып та булмаған күҙ йәштәре аҡты ла аҡты... Намаҙ уҡыған апай-инәйҙәр шул тиклем һөйкөмлө, сибәр, мөләйем инеләр. Улар минә шундай бәхетле, таҙа, саф күңелле булып күренде. Улар янында үҙемде ҡарт, йәмһеҙ, килбәтһеҙ, наҙан итеп тойҙом. Шуға ла мин уларҙан көнләшеп илай инем... Кәйеф-сафа ҡорған табындарҙа үҙемде күтәренке кәйефле итеп түгел, яланғас йөрөгән кеүек күрҙем, минә ошондай табындарҙа ултырған сағым өсөн шул тиклем оят булды, әйтерһең дә, ике бала ал-

дында еңелсә иҫерек түгел, ә шәрә яланғас йөрөгәндәй булдым. Иҫ киткес оят ине: балаларым, ирем, әсәйем, туғандарым алдында! Ә әсәйем бит иманлы кеше, хаж ҡылған, 5 намаҙын ҡалдырмай, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ураҙа тота (Һуңынан әйтте ул: "Балаларым намаҙ уҡыһын тип гел теләнем, иншалла, 3 балам намаҙға баҫты!"- тип.)

Ошолай шаңҡып ҡайттым мин мәсеттән. Ике көндән һуң аяҡтарым үҙенән-үҙе ауылға атланы, әсәйем янына, намаҙ уҡырға өйрәнергә! Әсәйемә түкмәй-сәсмәй бөтәһен дә һөйләнем, ул тыңланы ла ауылдағы мәсеткә, аҡшам намаҙына алып китте. Намаҙлыҡҡа баҫыу менән үҙемде яңы тыуған саф, таҙа, гонаһһыҙ сабыйҙай хис иттем, бәхетемдән осоп киткәндәй булдым. Шундай еңеллекте, рәхәтлекте, илаһилыҡты күптән татымағанымды аңланым. Шул кистә әсәйем менән бергә йәстү, витр намаҙҙарын уҡыныҡ. Мин ул төндә ауылда йоҡлай алманым, минән төнө буйы "Әл-Фатиха" сүрәһен "ятлаттылар", уянам да, доға ҡабатлайым, ҡайһы ваҡыт доға әйткән тауышыма үҙем уянып китәм. Шулай итеп, "Әл-Фатиха" сүрәһен ятланым! Һуңынан башҡа доға-сүрәләрҙе лә шулай йоҡлағанда ятланым, шуға ла еңел булды. Бер аҙна тирәһеләй ирем дә намаҙ уҡығанды белмәне, белгәс, әҙерәк әрләште, риза булмай маташты, тик һуңынан килеште.

Әкренләп намаҙ уҡый башлағайным, ике эш тәҡдим иттеләр. Ике урында эшләп, намаҙын уҡырмы икән, тигән Хоҙайҙың бер һыныуы булдымы, әллә ике эш хаҡы алам тигән нәфсе ҡотҡоһомы - аңламаным. Ике эштән арып-талыуҙар, ғаилә, балалар, бөтмәҫ йорт мәшәҡәттәре булһа ла, намаҙҙы ташламаным. Быйыл 10 августа намаҙға баҫыуыма 1 йыл булды! Намаҙға баҫыу ғына тип әйтеү булмаҫ ине быны, күңел тыныслығы табыуға, яҡты донъяларҙы яңынан таныуға, Хоҙайҙан әйтеп бөтмәҫлек көс-ҡеүәт алыуға 1 йыл булды! Намаҙ һайын Хоҙайҙан ошо доғалы, иманлы, намаҙлы тормоштан мине айырмауын теләйем, һорайым, иншалла, шулай буласаҡ та! Әсәйем дә бит беҙгә шундай изге теләктәр теләгән, Аллаға шөкөр, 5 балаһы бөтәһе лә белемле, намаҙ уҡый белә, иманлы тормошта йәшәй, ошонан да ҙур бәхет бармы икән әсә кешегә!

Был ваҡиғанан һуң бер хәҡиҡәтте аңланым: беҙҙең эргәлә фәрештәләре, шайтандары, иблестәре булған параллель донъя бар. Беҙ уларҙы күрмәһәк тә, улар беҙҙе белә, күрә, киҫәтә, ҡоторта... Һәм беҙ был донъяға һынау тотоу өсөн генә килгәнбеҙ - теге донъяла ожмахҡамы-тамуҡҡамы эләгеүебеҙ бөгөнгө эштәребеҙҙән, ғимәлдәребеҙҙән, ғибәҙәттәребеҙҙән тора! Тик Хоҙайҙың ҡеүәте менән, изге доға-аяттар аша беҙ был донъяның матурлығын, мәғәнәһен күрә лә, тоя ла алабыҙ, шуға ла тик Хоҙайға һыйынырға, табынырға тейешбеҙ, иншалла, шулай булһын! Әйткәндәй, минең кинәт намаҙға баҫыуым бик күптәр өсөн көтөлмәгән ваҡиға булды, кемдер аптыраны, кемдер аңламаны, кемдер сәйерһенеп ҡараны, ә миңә уларҙың фекере барыбер ине, тик Хоҙай ғына сәйерһенмәһен, ситкә типмәһен тип теләнем, теләйәсәкмен дә!

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо ваҡиғанан һуң күпмелер ваҡыт үткәс, мәрхүм атайым төшөмә инде. Бик ашығып: "Һин яҙып ҡуй, ике донъя бар тип яҙып ҡуй!" - тине. Бына, атайымдың һүҙен үтәнем, ике донъя бар, тип яҙып ҡуйҙым...**

**Айһылыу ҒҮМӘРОВА.**
**Дыуан районы.**

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Тағы ла өй эйәһе тураһында

Үткән быуаттың етмешенсе йылдары башы ине. Ике балам булғас, һөт кәрәк, тип, Ырғыҙлынан һыйыр һатып алдыҡ, мартта быҙауларға тейеш, һәр хәлдә, урыҫ хужалары шулай тип ышандырҙылар. Төндәр, март башы тирәһе булыуға ҡарамаҫтан, шаҡтай һыуыҡ ҡына, быҙау туңдырырлыҡ хәленән килә ине. Сығып-сығып ҡарайбыҙ, һыйырыбыҙ инде быҙаулау мәле етеп, елен тултырғайны. Көтә-көтә, таңға табан ҡаты йоҡлап киткәнбеҙ.

Бер ваҡыт карауат эргәһендәге тәҙрәне кемдер өс тапҡыр сиртте:

- Рауил, тор, һыйырың быҙауланы, сығып ал, - тигән ир тауышын асыҡ ҡына ишеттем. Кем булыуы мөмкин? Таңғы тәмле йоҡола ҡайһы күрше беҙҙең һарайҙы ҡарап йөрөр икән, етмәһә, шыҡһыҙ һыуыҡ. Ят тауышҡа ҡапыл тертләп, ныҡ ҡына ҡурҡтым. Ҡатынды уяттым. Ул бер нәмә лә ишетмәнем, ти. Сығырға ҡушҡас, киттек һарайға. Ишекте асһаҡ, ысынлап та, һыйыр быҙаулаған, ялап, ҡоротоп бөтөп кенә тора. Быҙауҙың еүеш йөн остары ҡырауланғайны. Имеҙҙек тә, өйгә алып инеп киттек. Шулай, быҙауҙы туңыуҙан билдәһеҙ тауыш ҡотҡарҙы.

- Был нимә булды икән, нисек белергә? - тигән һорау баштан сыҡмай. Ул саҡта атеизмдың иң көслө сағы, юҡбар тип һаналған нәмәне кешегә һөйләп, оятҡа ҡалғы килмәй, етмәһә, уҡытыусымын, хөрәфәттәргә ышанырға тейеш түгелмен.

Киттем ауыл осондағы яҡын ҡоҙама. Өйҙә ҡоҙағый ғына ултыра ине. Хәл-әхүәл һорашҡас, ситләтеп кенә ен, пәрей, бисура өй эйәһе һәм башҡа мифик заттар тураһында һөйләшеүгә күстек. Байтаҡ ғибрәтле хәлдәр һөйләне. Һүҙҙе өй эйәһенә борҙом.

- Өй эйәһе бар, шикләнергә лә түгел, тик ул кешегә күренмәй йәшәй. Ҡайһылары күренә, хужалары менән бергә йәшәй, ғәҙәттә, мейес артында булыусан, - тип һөйләп, миҫал да килтерҙе. Тик ул кешеләрҙең исемен мин онотҡанмын, ҡоҙағый исеме менән һөйләгәйне. Оло быуын кешеһенә атеизм шауҡымы теймәгән, динле кеше ине. Мифик заттарҙың булыуына ныҡлы ышана.

- Өй эйәһе тәҙрә сиртһә, ҡурҡыта бит әле, ни эшләргә икән? - тип, һораштым.

- Бер кемгә лә өйөндөң эйәһе бар, тип, һөйләп йөрөмә, юҡһа, шунда уҡ китәсәк. Ҡурҡырға ла кәрәкмәй, зыяны юҡ, файҙаһы ғына бар, - тигәс, тынысландым.

Артабан һәр йыл һайын, өй хужаһы һыйыр быҙаулағанды белгертеп, тәҙрә сиртеп, тауыш менән уятыр булды. Күп тә тормай, һарыҡ та һатып алдыҡ. Уның да бәрәсен сығып алырға торғоҙор ине.

1979 йылда Мәксүттән Ғәҙелгәрәйгә күстек. Билдәле, мал-тыуар, тауыҡтарҙы ла ҡалдырманыҡ. Һыйырыбыҙ гел генә мартта быҙаулар ине. Бына быҙаулар мәле етте. Теге тауыш уятырмы, Мәксүттә ҡалмағанмы, тигән һорау ҡыҙыҡһындыра.

- Рауил, тор, һыйырың быҙауланы, сығып ал, - тигән тауыш, өс тапҡыр тәҙрә сирткәндән һуң, ишетелде. Шул уҡ тауыш, тимәк, элекке өйҙә ҡалмаған, беҙгә эйәргән. Һарайға инһәк, һыйыр быҙаулап, ҡоротоп тора ине.

1983 йылда яңы өйгә күстек. Инде һыйыр ҙа, өй ҙә икенсе, уятыусы булыр микән? Быҙаулау мәле еткәс, өс тапҡыр сиртте лә, шул уҡ тауыш быҙауҙы сығып алырға ҡушты. Һыйыр имен-аман быуҙаулап, ялап торған була. Шуныһы ҡыҙыҡ: өй эйәһе йыл һайын тик бер үк тәҙрәгә генә сиртә, хатта аҫҡы өлгөһө лә бер үк. Һыйыр нисек быҙаулай, хәленән килерме, тыуһа, өшөмәҫме, тигән уй беҙҙе борсоманы. Һыйырҙар алмашына торҙо, имен быҙаулап биреүен дауам итте.

Бер ваҡыт был рәхәткә нөктә ҡуйылды. Үҙем ғәйепле. Һүҙҙән-һүҙ килеп сығып, бәхәсләшеп, үҙем дә һиҙмәй, һөйләй ҡуйҙым. Һыйыр быҙаулар мәл етте, көтәбеҙ. Һаман да тауышҡа ышанабыҙ. Ләкин ҡатын, ниңәлер, хәүефләнә, һыйырҙы ҡарауыллай. Һыйыр ныҡ ауырый, быҙаулай алмай. Һөйрәп алырға тура килде. Шул саҡ ҡоҙағыйым һүҙҙәре иҫкә төштө лә бит, һуң ине инде, терһәкте тешләп булмай. Телде тешләрлек булған да бит...

Байтаҡ йылдар үтте, ҡабат беҙҙе тәҙрә сиртеп уятыусы булманы. Үҙебеҙ ҡарауыллайбыҙ, ауыр быҙаулаһалар, һыйырға ярҙам итәбеҙ.

Өй эйәһе китһә, мал ҡото ла китеүе дөрөҫтөр, ахыры. Шунан бирле мал ҡазаһы күрмәгән йыл юҡ: йә юғала, йә бүре ашай, йә нимәлер ашап, эсе ташып үлә, йә айыу һуға. Бер йылы һуғымға тигән өс баш малды ла бүре ашаны. Ҡышҡыға тигән итте һатып алырға тура килде. Ҡорт көтә инем. Ыңғай ғына үрсеп, ун биш башҡа еткергәйнем. Хәҙер уныһы ла кирегә тәгәрәне, кәмей килеп, биш башҡа ҡалды.

Шулай, өй эйәһе барлығына тормош үҙе ышандырҙы. Баштан үткәндәрҙе яҙҙым, ышаныу-ышанмау уҡыусының үҙенән тора.

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Проблема ваҡыттамы, әллә үҙебеҙҙәме?

Ысынлап эшләргә теләгәнегеҙҙе тормошҡа ашырыуға ваҡыт табыр өсөн был хаҡта хыялланырға ғына түгел, ә уны ысын күңелдән эшләргә теләргә тейешһегеҙ. Ваҡытыбыҙға хужа булырға ныҡлы ҡарар иткәс, иң беренсе аҙым булып календарҙағы билдә йәки ваҡытты бүлеү буйынса план торорға тейеш түгел. Ул - иң һуңғы этап. Тәү сиратта ни өсөн беҙ быны эшләргә тейешлекте түгел, ә нимәлер эшләргә теләйбеҙ икәнен асыҡларға кәрәк. Бының өсөн тормошобоҙҙа ваҡыттың әһәмиәтле йәки әһәмиәтһеҙ роль уйнауының ысын философияһын аңлау зарур. Барыһы ла беҙҙең контролдә булһын, тиһәк, көслө стимул барлыҡҡа килеү менән аныҡ ғәмәли аҙымдар ваҡыты етәсәк. Сәғәт телдәрен һәм календарҙы үҙебеҙгә буйһондороу ваҡытты ихтирам итмәү тигәнде аңлатмай. Бары тик улар менән нисек эш итергә икәнлеген аңлағас ҡына уларҙы контролләү мөмкинлегенә эйә буласаҡбыҙ. Ваҡыт менән эш итеп, иҫ киткес һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин. Иң беренсе тырышлыҡ ҙур маҡсаттар менән бәйле булмаҫҡа тейеш. Уңыш сере - дөрөҫ башланған юл башы.

Һәр сәйәхәт беренсе аҙымдан башлана. Күберәк ваҡытҡа эйә булғығыҙ килә, әммә нимәнән башларға белмәйһегеҙме? Саҡ ҡына тырышлыҡ һалып, иртәрәк торорға тырышығыҙ! Ошо ҡаһарманлыҡ тормошоғоҙға бер йәки ике сәғәт, ғүмерегеҙгә бер нисә йыл өҫтәр. Күптән башҡарырға тейешле эшегеҙҙе һайлағыҙ һәм уға иртәнге аш алдынан тотоноғоҙ. Ниндәйҙер мәсьәләлә эксперт булырға теләйһегеҙме? Һәр көн иртән ошо предметты ярты сәғәт өйрәнегеҙ һәм ысын белгес буласаҡһығыҙ. Һеҙҙән башҡаса бер нәмә лә талап ителмәй. Барыһы ла бик ябай, әммә "Бик теләр инем дә... ләкин ваҡыт етмәй" тип илаулаусы күптәрҙең иғтибарынан ситтә ҡала. Ваҡыт беҙҙе бер ниндәй цикләүҙәр менән дә бәйләмәй. Беҙ бары тик үҙебеҙҙе үҙебеҙ цикләйбеҙ.

"Ошонан һуң..." теорияһы. Әгәр ваҡытығыҙҙы бүлһәгеҙ, теләһә ниндәй эштә уңыш ҡаҙана алаһығыҙ. Мәҫәлән, нимәнелер һәр аҙна эшләгәнсе, ниңә уны ике аҙнаға бер тапҡыр ғына башҡармаҫҡа. Әгәр бер урынға һәр дүшәмбе бараһығыҙ икән, унда ике аҙнаға бер тапҡыр барып ҡарағыҙ. Һәр икенсе дүшәмбенең кисен буш ҡалдырып, уны икенсе мөһим эшкә бағышларға мөмкин. Күпселек "ошонан һуң..." теорияһы менән йәшәй. Улар ҙур пландар ҡора. Бөйөк эштәрҙе балалар үҫкәс, эште алмаштырғас, яңы машина алғас, уҡыуҙы тамамлағас, яңы ҡорғандар алғас һ.б. һуң эшләүгә ҡалдыра. Ләкин был зарыҡтырып көттөргән "ошонан һуң..." бер ҡасан да килеп етмәй, әммә кешеләр һаман да ошо көндөң килеп етеренә өмөтләнә. Ошо ваҡыт эсендә әллә күпме мөмкинлек күп тапҡырҙар ишегегеҙҙе ҡаҡҡандыр, моғайын, әммә ул асҡанығыҙҙы көтөп, тупһала ултырмай. Нимәлер эшләргә теләйһегеҙ икән, хәҙер үк эшләгеҙ. Йәиһә хәҙер үк план төҙөгөҙ. Йәки хәҙер үк төпкө аңығыҙҙы программалағыҙ. Иртәгә түгел! Һеҙҙең хәҙергенән дә күберәк ваҡытығыҙ бер ваҡытта ла булмаясаҡ. Алда торған 24 сәғәтте нисек үткәреүегеҙгә сираттағы 24 сәғәтте нисек үткәреүегеҙ бәйләнгән. Үҙегеҙҙәге авантюризм һәм мажаралар рухын тергеҙегеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 28 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 02.05, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Научи меня жить". 5-я и 6-я серии. Детективный сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 00.05 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.45 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "София". 1-я и 2-я серии. Криминальный сериал (12+).
23.10 "Специальный корреспондент" (12+).
02.00 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**Профилактика на канале**
**14.00 Новости недели.**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (6+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 22.45, 01.00 Новости (на башк. яз.).**
**19.15 "Бай бакса" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар" (12+).**
**23.15 "Уличный боец". Худ. фильм (16+).**
**01.30 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.30 И.Абдуллин. "Озорная молодость". Спектакль (12+).**

### 29 НОЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (12+).
13.20, 14.15, 15.15, 00.25 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.10, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.15 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Научи меня жить". 7-я и 8-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.10 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "София". 3-4-я серии (12+).
23.10 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.20 "Дар". Драматический сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (12+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 01.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30, 01.00 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Кожа, в которой я живу". Худ. фильм (12+).**
**02.30 С.Латыпов. "Оль-ля-ля" (12+).**

### 30 НОЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Научи меня жить". 8-я и 10-я серии. Детективный сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Время покажет" (16+).
01.15 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.10 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "София". 5-6-я серии (12+).
23.10 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.20 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.15 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 23.30, 01.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Это мы!" (12+).**
**18.15, 20.00 "Полезные новости" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.50 Хоккей. КХЛ. "Динамо" (Рига) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**24.00 "Средь бела дня". Худ. фильм (16+).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**03.15 Ф.Буляков. "Таштугай" (12+).**

### 1 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.45 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 00.55 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.45, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.45 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Научи меня жить". 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Маршал Жуков. До и после Победы" (12+).
00.40 Ночные новости.
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 01.10 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.45 "Вести-Башкортостан".
14.55"Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "София". 7-я и 8-я серии (12+).
23.10 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
03.10 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башҡорттар" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское времечко".**
**23.00 "Территория девственниц". Худ. фильм (16+).**
**01.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.15 А.Яхина. "Лебедушка моя" (12+).**

### 2 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 04.55 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым.
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон". Музыкальный конкурс (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 "INXS: нас никогда не разлучить" (12+).
02.00 "Побеждай!" Спортивная комедия (16+).
03.55 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.35 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Аншлаг и Компания". Юмористическая программа (16+).
23.40 "Осенний лист". Мелодрама (16+).
03.45 "Дар". Комедийный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Это мы!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.45 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Здоровое решение" (12+).**
**12.30 "Морские динозавры" (12+).**
**13.15 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 Золотой фонд Башкирского ТВ "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 24.00, 02.00 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-саға" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45, 10.15 "Интервью" (12+).**
**17.15 "Квадратный метр", "Телелавка" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**22.00 "Наука 102" (6+).**
**00.30 "Доверие". Худ. фильм (16+).**
**02.30 В.Буркин. "Кадриль" (12+).**

### 3 ДЕКАБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Танкисты своих не бросают". Сериал (16+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Лучше всех". "Рецепты воспитания" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Голос". Специальный выпуск (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период". Новый сезон.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.40 "МаксимМаксим" (16+).
23.55 "Подмосковные вечера". Вечеринка (16+).
00.50 "INXS: Нас никогда не разлучить" (16+).
02.30 "Самозванцы". Худ. фильм (16+).
04.20 "Модный приговор".
05.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.20 "Опекун". Худ. фильм.
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Семейный альбом" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Время дочерей". 1-4-я серии. Драматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "За лучшей жизнью". Криминальная драма (12+).
00.40 "Служанка трех господ". Худ. фильм (12+).
02.40 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения льва в волшебной стране Оз" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Торнакай. Летим вместе".**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.45 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2016" (12+).**
**17.00 "Ломая барьеры". Гала-концерт IV межрегионального фестиваля детского творчества (6+).**
**19.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 01.45 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Путь Карлито". Худ. фильм (18+).**
**02.00 Т.Миннуллин. "Мулла" (12+).**

### 4 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Танкисты своих не бросают". Сериал (16+).
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.45 "Теория заговора" (16+).
13.40 "Евгений Миронов. Жизнь в будущем времени". Док. фильм (12+).
14.45 Юбилейный концерт Валерия и Константина Меладзе.
16.20 "Точь-в-точь". Новый сезон (16+).
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб Веселых и Находчивых". Кубок мэра Москвы (16+).
00.45 "Бойфренд из будущего". Романтическая комедия (12+).
03.00 "Модный приговор".
04.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.20 "Где находится нофелет?" Худ. фильм.
07.00 "Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Время дочерей". 5-8-я, заключительная, серии. Сериал (12+).
18.00 "Синяя птица". Всероссийский открытый конкурс юных талантов.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Последний рубеж". 4 серии. Военно-драматический сериал (12+).
03.00 "Без следа". Детективный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Папируса" (0+).**
**08.30 "Мечты" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Весело живем" (12+).**
**15.45 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Позывной "Барс" (12+).**
**17.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.45 "Это мы!" (6+).**
**18.15 "Дознание" (16+).**
**18.50 Хоккей. КХЛ.**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Девятые врата". Худ. фильм (16+).**
**03.15 Л.Разумовская. "Ваша сестра и пленница" (12+).**

***✓ Ул ваҡытта юлаевсылар бер миҙгелдә ике тапҡыр рәттән 12 еңеү яулауға өлгәшкәйне. Йә, ярай, еңелеүҙәр булмаһа, еңеүҙең дә тәме ул тиклем татлы булмаҫ ине.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӘСӘЙҘӘР КӨНӨ МЕНӘН!




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**46-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Артек. Янғужин. Шөбһә. Ҡалым. Тамаҡ. Ағиҙеле. Йосопов. Ләүәш. Рәйесе. Ленин. Код. Күркә. Икәү. Илем. Рәмил. Аҡрын. Отош. Габрово. Еңгәй. Ауылдаш. Ильясов.
**Вертикаль буйынса:** Йоҡлаған. Ҡаскандар. Пфеннинг. Ярлы. Афғани. Мавра. Алыш. Күмер. Офелия. Бәҙретдинов. Томра. Көнгә. Шав. Тел. Күрше. Әсеү. Әбәк. Ҡош. Әбләй.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Ишембай районы** Һайран ауылынан Нәкирә Рәхмәтуллина, **Салауат районы** Мөрсәлим ауылынан Рәшиҙә Сафина, **Ейәнсура районы** Новопавловка ауылынан Айнур Әлмөхәмәтов, Азамат Әлмөхәмәтов, **Белорет районы** Рысыҡай ауылынан Зимфира Мәхмүтова, **Учалы ҡалаһынан** Нәзифә Абдрахманова, **Учалы районы** Уральск ауылынан Гөлниса Мортазина, **Октябрьский ҡалаһынан** Әхмәҙулла Хасаев, **Шишмә районы** Сәлих ауылынан Гөлшат Даянова, **Өфө ҡалаһынан** Әнфисә Фазлетдинова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ. Ғүмерҙе йылдар һаны билдәләмәй ул, күңелегеҙ гел йәш булһын, тип өндәшәбеҙ һеҙгә һәм киләсәгегеҙ яҡты, ырыҫлы, нурлы булһын тип теләйбеҙ!

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**26 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+
**27 ноябрь "Яңғыҙҙар ташы"** (Ә. Ғаязов), драма 12+
**29 ноябрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**30 ноябрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н. Ғәйетбаев), комедия 16+
**1 декабрь "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+
**2 декабрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 декабрь "Калигула"** (А. Камю), трагедия 16+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 декабрь "Мин ҡабаттан тыуыр булһам"** - "Рәсәй тауыштары" Бөтөн Рәсәй конкурсы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Райман Ишбаевтың яҡты иҫтәлегенә арналған кисә. 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 ноябрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ноябрь - Декабрь (Сәфәр - Рабигел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (28) дүшәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 29 (29) шишәмбе | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |
| 30 (30) шаршамбы | 7:47 | 9:17 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 1 (1) кесе йома | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 2 (2) йома | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 3 (3) шәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 4 (4) йәкшәмбе | 7:53 | 9:23 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХОККЕЙ

# ЕҢЕЛЕҮҺЕҘ ҘӘ БУЛМАЙ

**Ситтә уҙғарған уйындарҙы "Салауат Юлаев", ҡыҙғаныска күрә, еңеү менән тамамлай алманы. Көйәрмәндәрҙең 2009-2010 уйын миҙгеле тағы ҡабатланыр, тигән өмөтө аҡланманы. Ул ваҡытта юлаевсылар бер миҙгелдә ике тапҡыр рәттән 12 еңеү яулауға өлгәшкәйне. Йә, ярай, еңелеүҙәр булмаһа, еңеүҙең дә тәме ул тиклем татлы булмаҫ ине. Шуға күрә алдағы осрашыуҙар "Салауат Юлаев" уйынсылары һәм команда көйәрмәндәренә шатлыҡлы минуттарҙы күберәк алып килеүенә ышанайыҡ.**

Ошо арала юлаевсылар "Сочи" һәм "Витязь" хоккей клубтары менән көс һынашты. Тәүге уйында юлаевсылар һәр осорҙа ла берәр тапҡыр хужалар ҡапҡаһын "асыуға" өлгәште. Ә "Сочи" уйынсылары беренсе осорҙа Никлас Сведбергтың һағын үтә алмаһа ла, икенсе осорҙа уға бер, ә өсөнсөлә ике шайба сәпәне. Шулай итеп, төп уйын ваҡыты тигеҙ иҫәп менән тамамланды. Өҫтәмә 20 минутлыҡ ваҡыт та еңеүсене асыҡламаны, ә буллит буйынса хужалар көслөрәк булып сыҡты. Осрашыу "Сочи" файҙаһына 4:3 иҫәбе менән тамамланды.

"Витязь" менән уйынды "Салауат Юлаев" ышаныслы башланы. Һөҙөмтәлә ҡунаҡтар юлаевсыларҙың баҫымына ҡаршы тора алманы - хужалар уларға бер шайба оҙатты. Икенсе осор бер кемгә лә мәрәй килтермәне. Матчтың өсөнсө осоронда иһә Валерий Белов командаһы иҫәпте тигеҙләп кенә ҡалманы, уйындың һуңғы минуттарында алға сыҡты һәм еңеү яуланы. Уйын һөҙөмтәһе 1:2.

Әлеге командалар менән уйындарҙан һуң "Салауат Юлаев" 34 уйын уҙғарғандан һуң 59 мәрәй менән дөйөм турнир таблицаһынының 7-се баҫҡысын биләй.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**Бөтәһе лә уҡырға тейеш башҡорт әҙиптәренең әҫәрҙәрен барлауҙы дауам итәбеҙ. "Киске Өфө" гәзите һәм "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө ойошторған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы шарттарына ярашлы, гәзит уҡыусыларыбыҙ һәм интернет селтәрендә яҙылған тәҡдимдәр буйынса исемлектең егерменсе пунктын билдәләнек. Артабан да фәһемле, зауыҡлы һәм башҡорт халҡының асылын сағылдырған китаптар/әҫәрҙәр исемлеген бергәләп тулыландырып бөтәйек! Бының өсөн үҙегеҙҙең тәҡдимдәрегеҙҙе редакция адресына хат менән йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөнә яҙып ебәрә алаһығыҙ.**
**Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡытыусыһы Рәсимә Алламоратова Закир Һаҙыйҙың "Йыһанша хәҙрәт" повесын тәҡдим итә.**

"XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте менән танышҡанда шул осорҙоң билдәле прозаигы Закир Һаҙыйҙың "Йыһанша хәҙрәт" повесын кластан тыш уҡыу дәресендә өйрәнәбеҙ. Был әҫәр хәҙер мәктәп программаһына ла индерелә. Повесты ошо уҡ осорҙа ижад ителгән немец яҙыусыһы Генрих Манндың "Верноподданный" романы менән сағыштырыу бик ҡыҙыҡлы. Ике әҫәрҙең дә төп геройҙары белем алыу, тәжрибә туплау, йәғни шәхес булараҡ үҫеү юлында үҙ йөҙөн юғалта бара. Уларҙың шундай булып китеүендә тик үҙҙәре генә ғәйепләме икән? Ошондай тирандар үҫтереүгә, тәрбиәләүгә уңайлы шарттар булдырған йәмғиәтте нисек баһаларға? Был һорауҙарға яуаптар табырға тырыша авторҙар. Яҙыусы үҙ заманынан бер ни тиклем алда бара. Ул киләсәк заман күҙлегенән бөгөнгө көндө тасуирлай, ябай кешеләр күрмәгәнде күрә, булыуы мөмкин булған ваҡиғаларҙы иҫкәртә. Генрих Манндың "Верноподданный" романы Германияла властка фашизм килеүен хәбәр итә, тип иҫәпләнһә, минең ҡарашҡа, Закир Һаҙыйҙың "Йыһанша хәҙрәт" повесы ла Рәсәйҙә коммунистарҙың диктатура системаһы ҡороу хәүефе тураһында иҫкәртә. Ике әҫәр ҙә был системаның ҡыйралышҡа дусар буласағына ишаралай. Дидерих Геслинг емеректәр араһында, еүеш күләүектә ултырып ҡалһа, Йыһанша хәҙрәт тә, кешеләр йөрәгенә шом һалып торған емерек, иҫке мәҙрәсә биналарын ҡалдырып, ғүмере ахырында ҡылған ҡылыҡтарының яҙаһын күреп, был донъянан китеп бара. Йыһанша хәҙрәттең системаһын үҙе үҫтергән тәрбиәһеҙ һәм булдыҡһыҙ холҡо юҡҡа сығара. Закир Һаҙый һәм Генрих Манн - ике быуат сигендә йәшәүсе яҙыусы, һәр береһе заман заңын, буласаҡ үҙгәрештәрҙе һиҙеп, кешелекте хаталарҙан һаҡларға тырышҡан шәхестәр. "Йыһанша хәҙрәт" повесы һәм уның авторы Закир Һаҙый заман шауҡымында онотолоп ҡалһа ла, XX быуат башында беҙҙең башҡорт мөхитен тасуирлап яҙған билдәле яҙыусы булғанлығын һәр быуын кешеһе белергә тейеш".

ХУШЛАШЫУ ҺҮҘЕ

# ИЖАДИ МӨХИТКӘ ӘЙҘӘНЕ



1972 йыл ине. Юғары белемгә эйә булырға ынтылған ҡайнар йөрәкле ҡыҙҙар һәм егеттәр Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый башланыҡ. Беҙҙең төркөмдөң кураторы итеп әле генә йәнтөйәге Бөрйәндән эшкә саҡырылған Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәновты тәғәйенләп ҡуйҙылар. Һомғол буйлы, алсаҡ йөҙлө, итәғәтле, кеселекле, ихтирамлы, яғымлы тауышлы... 33 йәштә генә... Уны тәү ҡараштан, танышыуҙан үҙ иттек һәм артабан хөрмәтләп, "Әхмәт ағай" тип кенә йөрөттөк.

Тәүҙә ағайыбыҙ беҙҙең менән бер ятаҡта йәшәне, яҡын кеше, аҡыллы кәңәшсе булып, күңелдәребеҙҙе нығыраҡ арбаны. Әхмәт ағай йәшәгән бәләкәй генә бүлмәлә байтаҡ урынды китаптар биләй ине. Лекцияларҙан һуң күмәкләп һөйләшкәндә, аралашҡанда ул тәрән, күп яҡлы белемгә эйә булырға инандырҙы. Һуңыраҡ реферат, ғилми мәҡәләләр яҙыу ғына түгел, ә кандидатлыҡ диссертацияһына әҙерлек башларға ла өндәне. Педучилище тамамлап, уҡытып килгән егеттәрҙе йәштәрҙең тәрбиәсеһе, остазы итеп ҡуйҙы.

Ағайыбыҙҙың сәме, дарманы, илһамы менән ижади мөхиткә сорналдыҡ. "Шоңҡар" әҙәби берекмәһендә рухландыҡ, нәҫерҙәребеҙҙе, шиғырҙарыбыҙҙы уҡыныҡ, геү килеп олуғ әҙиптәрҙең әҫәрҙәрен тикшерҙек, университет кимәлендә әҙәби-мәҙәни кисәләр үткәрҙек, "Саҡматаш" исемле ҡулъяҙма журнал сығарҙыҡ... Уны ҡулдан-ҡулға йөрөтөп, таушалғансы, туҙғансы уҡынылар. Әйткәндәй, халыҡ ижадын йыйыу сәйәхәтенән һуң сығарған "Әбйәлил иле - йыр иле" тигән биш метр самаһы оҙонлоғондағы стена гәзитебеҙ бөтә университетты хайран итте, декан был күренеште ғәжәп хәл итеп һөйләне.

Шуға ла һабаҡташтарымдан кемдәрҙендер - һәләтле журналистар, кемдәрҙендер шиғри күңелле абруйлы уҡытыусылар булып китеүендә Әхмәт ағайыбыҙҙың йоғонтоһо ифрат ҙур булды. Уның ғилми өлкәләге олуғ остазы күренекле ғалим Марат Хәләф улы Минһажетдинов булһа, беҙҙең остазыбыҙ - нәҡ үҙе! 44 йыл буйы ижади мөхиттә бергә ҡайнаныҡ, осрашып, фекер алышып йәшәнек. Үҙемә килгәндә, уның өгөтө менән халҡыбыҙ ижады буйынса хеҙмәттәр яҙҙым, кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланым, "Ватандаш" журналында эшләгәндә байтаҡ мәҡәләләрен баҫырға әҙерләнем. Остазыбыҙ үҙенең тәүге сығарылыш шәкерттәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәне. Беҙ уны гелән осрашыуҙарыбыҙға саҡырҙыҡ. Һәр саҡ килде, хәлдәребеҙҙе белеште, таянысыбыҙ булыуҙы дауам итте. Әхмәт ағай ысын кеше, халҡыбыҙҙың мәшһүр улы булып хәтеребеҙҙә һаҡланасаҡ. "Урал батыр" эпосындағыса, уның донъяла мәңге ҡалыр эше - фәҡәт яҡшылыҡ! Ошо яҡшылыҡтары әхирәт донъяһында ла уның йәнен йәннәттә итһен!

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ,**
**журналист, яҙыусы.**

**"Киске Өфө" гәзите коллективы һәм уның меңәрләгән уҡыусылары исеменән күренекле ғалим-фольклорсы, профессор, йәмәғәт эшмәкәре**
**Әхмәт Мөхәмәтвәли улы**
**Сөләймәновтың**
**вафаты айҡанлы уның балаларының, яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МАЛҺЫҘЛЫҠ ЯРЛЫЛЫҠ ТҮГЕЛ,

## аҡылһыҙлыҡ - ярлылыҡ

Ир аҡыллыһы өс йылғыһын алдан уйлар, ҡатын аҡыллыһы өс көнлөгөн алдан уйлар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хәүефһеҙлек ҡаһарманлыҡты һәм тиҙлекте кәметмәһен өсөн, бөйөк эштәрҙе уйламаҫтан атҡарыу кәрәк.

**(Юлий Цезарь).**

Ерҙә кешеләр йәшәгәндә, яманлыҡ та йәшәр.

**(Тацит).**

Закондар үрмәксе ауы һымаҡ: көсһөҙҙө ул тағы ла нығыраҡ бутай, көслө уны өҙөп сыға.

**(Солон, боронғо ете аҡыл эйәһенең береһе).**

Әйтелгән һүҙ өсөн үкенергә тура килде, әйтелмәгәне өсөн - юҡ.

**(Ксенократ, боронғо грек фәлсәфәсеһе).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер үҫмер ысын Остазды эҙләп, юлға сыға. Ауылынан сыҡҡас, ағас төбөндә ял итеп ултырған ҡартты осрата. "Ҡайҙа юл тоттоң, егет кеше?" тип һорай унан ҡарт. "Мин ысын Остазымды эҙләйем. Әлбиттә, мин уны ҡайһы тарафта табырымды белмәйем. Һин өлкән кеше, бәлки, кәңәш итерһең..." "Ярай, мин һиңә ярҙам итәм, - ти ҡарт. - Әгәр ҙә һин берәй ваҡыт ошондай уҡ ағас төбөндә, бөкөрәйеп (ҡарт бөкөрәйеп, Остаз нисек ултырырға тейешлекте күрһәтә), шундай-шундай ҡиәфәтле (ҡарт ул кешенең төҫ-башын һүрәтләй) кешене күрһәң, һис икеләнмә, ул һин эҙләгән Остазың булыр..."**

**Үҫмер ҡартҡа рәхмәт әйтә лә, юлын дауам итә. Ул диңгеҙҙәр кисә, тауҙар артыла, бар донъяны урап сыға. Юлында бик күп ҡыҙыҡ һәм файҙалы нәмәләр күрә, тик баяғы ҡарт һүрәтләгән Остазды ғына таба алмай. Сәйәхәт итеп йөрөй торғас, байтаҡ йылдар уҙа. Бер ваҡыт ул, хәҙер инде өлкән йәштәге ир, үҙенең тыуған яҡтарына ҡайтып төшә. Юлдағы ағас төбөндә туҡтай һәм унда үҙен оҙатып, кәңәштәрен биреп ҡалған ҡартты күрә. Ҡарт бынан бер нисә йыл элек үҙе һүрәтләгән Остаз һынында, ҡиәфәтендә күҙ алдына килеп баҫа. "О-о! Һин, минең Остазым, һәр ваҡыт ошонда булдыңмы ни? - тип ҡысҡырып ебәрә оҙон юл үтеп ҡайтҡан ир. - Ни өсөн һин мин эҙләгән Остаз икәнеңде теге саҡта уҡ әйтмәнең?" "Эйе, мин ул саҡта ошонда инем, - ти ҡарт. - Ә бына һин... Һин бында түгел инең шул..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары — **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2171/11